✓ *Аҡыл - ул тар булғанды киңәйтеү, киң булғанды бәләкәйләтеү, бер-береһенә оҡшағанды күбәйтеү һәм ҡәҙимге генә нәмәләргә ҡыҙыҡһыныу уятыу.*

(Квинтилиан).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

1 - 7 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №1 (419)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡыш бабай берәү түгел,

биш йөҙләп тә була икән

4

Ҡаҙ өмәһе

5

Ҡуян мажаралары,

йәғни Ғәҙеллектең тәүге һабаҡтары

11

Заты кем дә, аты кем,

йәғни Эшлекленән эшлекле тыуа

12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Юлбарыҫ йылынан ҡасып, Куян йылынан ниндәйерәк һыйыныр ышыҡ эҙләйһегеҙ?

Марат ТУЛЫБАЙ, хеҙмәткәр: "Һыйыныр ышыҡ" тигәндән, "Бейеш" йырындағыса, Куян йылында: "Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем, тышҡынайын ниҙән тышлайым, йәйгелеген бында йәйләгәйнем, ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым?" тигән һымағыраҡ булмаһын инде. Сөнки беҙ үҙ илебеҙҙә, үҙ еребеҙҙә, үҙ республикабыҙҙа йәшәйбеҙ. Шуға күрә лә мин яңы Куян йылында һыйыныр ышыҡ эҙләмәйем. Йәшенмәйем. Йәшенгән, ана, һәлпеш ҡолаҡ, ҡылыйғүҙ ҡуян өшәләгенә йәшенһен. Киреһенсә, ҡурайсы булараҡ, мин алдағы йылда башҡорт моңон, сәнғәтен бар донъяға яңғыратыу өсөн тағы ла үтемлерәк саралар эҙләүгә яғындамын. Нимәнәндер, кемдәндер йәшеренеп ундай эштәрҙе башҡарып булмай бит. Икенсенән, Бейеш ҡасҡын замандары күптән инде тарихта тороп ҡалған. Уҙған йылда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡорт дәүләт филармонияһында үткән Ҡурай байрамына әсәһе менән килеп, бының менән ҡурайлы-быҙға үҙ мөнәсәбәтен, битараф булмауын белдерҙе. Ишетеүебеҙсә, Рөстәм Зәки улы үҙе лә ҡурайҙа уйнарға өйрәнә икән.

Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы һәм ҡалаһының "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире: Тәбиғәттә юлбарыҫ та, ҡуян да бар һәм улар үҙ-ара һыйышып йәшәй, һәр хәлдә, юлбарыҫтарҙан ҡуян заты зыян күрмәй. Урманда юлбарыҫ булғаны өсөн генә ҡуян унан ҡасып китмәй. Әлбиттә, Юлбарыҫ йылы беҙҙе бик күп һынауҙарға дусар итте. Әммә беҙ уҙған йылда тәбиғәттә барған катаклизмдарҙың йәмәғәт-селектә дауам ителешенә юл ҡуйманыҡ. Уҙған йыл ҡоро килде, уның ҡарауы, йыл аҙағында ер өҫтөнә ишелеп-ишелеп аҡ ҡар, тимәк, бәрәкәт яуҙы. Шулай булғас, мин бер йылдан ҡасып, икенсеһендә йәшеренеү яғында түгелмен. Киреһенсә, беҙгә

> Юлбарыҫ йылындағы ыңғай үҙгәрештәрҙе, позитивты Ҡуян йылында ла дауам итергә, ә киреләрен йәғни негатив күренештәрҙе иҫке йылда ташлап ҡалдырырға кәрәк. Тик уларҙы ҡар аҫтына күмеп ҡалдырырға ярамай, сөнки яҙын ҡарҙар ирегәс, ҡар аҫтындағылар ер өҫтөнә күсеүсән.

Матбуғат хеҙмәткәре булараҡ, мин милли матбуғатты һаҡлап ҡалыу өсөн тырышҡан фиҙаҡәрҙәр рәтендәмен. Нисек кенә тимәйек, илебеҙҙә барған үҙгәрештәр, милек-ара капиталистик мөнәсәбәттәр милли матбуғатҡа ла ҡағылмайынса үтмәйәсәк. Беҙ быны тоябыҙ. Бындай шарттарҙа милли матбуғаттың һаҡланып ҡалыуында тик дәүләт институты, республикалар етәкселәре генә гарант булып тора ала. Был милли матбуғаттың, һеҙҙең һорауҙа әйтелгәнсә, һаҡланыр сараһы, "һыйыныр ышығы".

Флур ҒАЗИН, яҙыусы, фоторәссам: Ҡулыма фотоаппарат тотоп, Бөрйән урмандарының арҡырыһын-буйын үттем шикеле. Шулай ҙа унда әле мин барып етә алмаған, ғөмүмән, кеше аяғы теймәгән ерҙәр, шырлыҡтар, ҡая-тау итәктәре, йылға морондары күплеген дә беләм. Һәр хәлдә, Бөрйән урмандарында ғүмереңдең аҙағынаса кешеләрҙән ҡасып, ышыҡланып йәшәр урындар бар. Әммә ундай тормош кемгә оҡшаһын инде? Кешеләрҙән ҡасып булһа ла, үҙ-үҙеңдән ҡасып булмайҙыр. Минеңсә, кешелек тә, милләт тә шундай уҡ халәттә. Бына милләткә килгәндә, минеңсә, ул үҙ-үҙен һаҡлар өсөн үҙенең йолалары, традициялары "ышығында" йәшәргә тейештер.

"Айыуҙан ҡасҡан - бүрегә", ти халыҡ әйтеме. Кеше аралашмайынса йәшәй ҙә алмай. Мин, мәҫәлән, үҙ эштәрем менән ай һайын тиерлек Өфөгә килеп китәм һәм ошонда урмандар араһындағы яңғыҙлығымдан "ял итәм". Юлбарыҫ йылынан ҡасып, Куян йылының ышыҡ урындарын эҙләүгә килгәндә, мин унда үткәнемдәге күңелһеҙ хәлдәремдән, уңышһыҙлыҡтарымдан йәшеренер инем. Ҡалған ғүмеремде файҙалыраҡ, күңеллерәк итеп үткәрер өсөн.

Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.

МОНОЛОГ

САБЫЙҘАРЫБЫҘ ЯҢЫ КАНАЛДА...

күңел телендә һөйләшәсәк

Дауамы 8-9-сы биттәрҙә.

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ, тип өндәшәбеҙ һәм һеҙҙе әле генә тормошобоҙға аяҡ баҫҡан серлелек, сафлыҡ, өмөт-хыялдарға сорналған яңы йылыбыҙ менән ҡотлап, иң матур теләктәребеҙҙе юллайбыҙ. Артабан да, гәзитебеҙҙең һәр һаны менән һеҙгә иң йылы хистойғоларыбыҙҙы оҙатып торорбоҙ, тип ышандырабыҙ. Сөнки беҙгә һеҙ, һәр уҡыусыбыҙ, ҡәҙерле. Беҙҙең ихтирамыбыҙҙы һеҙ ижадыбыҙ - баҫмабыҙҙағы һәр һүҙ, һәр һөйләм, һәр мәҡәлә аша тоя алырһығыҙ, тип уйлайбыҙ.

ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ БУЛЫП ҠАЛЫҒЫҘ,

тип, бурыс йөкмәтә уҡыусыларыбыҙ

Бына әле лә һеҙ журналистарыбыҙҙың йөрәк йылыһы менән һуғарылған яңы йылдағы тәүге һанды ҡулығыҙға алдығыҙ. Бәлки, кемдәрҙер уны тәүге тапҡыр күреп торалыр һәм гәзитебеҙ уның өсөн асылмаған серҙәр донъяһы һымаҡ тойолалыр. Уҡыусыларыбыҙ араһында шулай уҡ гәзитебеҙ сыҡҡандан алып уның менән айырылмағандар, "Киске Өфө"нө һулаған һауаһы, эскән һыуы менән сағыштырғандар барлығын беләбеҙ. Был көндәрҙә беҙ ошондай дуҫтарыбыҙҙан бик күп Яңы йыл ҡотлауҙары алдыҡ. Гәзитебеҙ менән әле генә танышҡандарҙы ошо хаттарҙың бәләкәй генә йөкмәткеһе менән таныштырғанда, баяғы серҙәр донъяһы ҡорғанының бер сите асылғандай булыр, моғайын.

"Шундай аҡыллы, үҙ һүҙе, үҙ йөҙө, үҙ фекере булған гәзит ижад иткәнегеҙ өсөн рәхмәт. Беҙ гәзиттең килгәнен көтөп алабыҙ, һәр беребеҙ берәр битләп бүлешеп алып, алмашлап уҡыйбыҙ. Уҡымай ҡалдырыр бер генә һөйләме лә, йөрәккә майҙай яғылмаған бер һүҙе лә юҡ бит уның", - тип яҙа Йылайыр районы Ялпаҡ ауылынан Мансура һәм Рауил Вахитовтар.

"Халҡыбыҙ араһында милли үҙаң, рух тәрбиәләгән, һәр хәлваҡиғаға урынлы баһа биргән, кешене шәхес булараҡ үҫтерерҙәй фәһемле фекерҙәре менән ҡыуандырған был баҫманы уҡымау яҙыҡ булыр ине. Уҡып сығабыҙ ҙа, ирем Мырҙа Шаһимәрҙән улы менән уҡылғандар буйынса фекер алышабыҙ, ундағы кәңәш-аҡылды тормошта, балалар тәрбиәләүҙә ҡулланабыҙ. Артабан да халыҡ гәзите булып ҡалығыҙ...", - тип яҙа Баймаҡ ҡалаһынан Сәлимә Кейекбирҙина.

"Башҡорттарыбыҙға ғына хас тыйнаҡлыҡ,олпатлыҡ бар был гәзиттә. Ғүмер булһа, унан айырылмай бергә йәшәргә ине", - тип яҙа Гөлшат һәм Вил Ҡыуатовтар Ейәнсура районы Юлдаш ауылынан.

Бына шулай, гәзитебеҙгә баһаны уҡыусыларыбыҙ биреп тора. Күптәрен үҙебеҙ генә тыңлайбыҙ ҙа, күңелгә һалып ҡуябыҙ. Ҡайһыларын гәзит биттәренә лә сығарғылайбыҙ. Нисек кенә булмаһын, ул баһалар һәм маҡтауҙар беҙҙең иңгә тағы ла ҙурыраҡ бурыс йөкмәтә. Бына һигеҙ йыл инде, гәзит сыға башлағандан алып, үҙебеҙсә билдәләгәнбеҙ ул бурысты, үҙебеҙсә атҡарабыҙ. Шулай итеп, "Киске Өфө" - мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, ундай сығанаҡтар былай ҙа етерлек. "Киске Өфө" үҙ уҡыусыһын уйландырһын, аң даирәләрен киңәйтеп ебәрһен, фәһем һәм һабаҡ бирһен, һығымталар яһатһын, был ҡатмарлы донъяла үҙ урынын табырға, балаларҙы, йәштәрҙе, ололарҙың үҙен дә тәрбиәләргә ярҙам итһен, бихисап һорауҙарға яуап бирһен, тибеҙ. Әгәр ҙә беҙ ошо бурыстарҙың яртыһын ғына, хатта 40 процентын ғына булһа ла үтәһәк, күпкә өлгәшер инек.

> Һәр хәлдә, милләт яҙмышы өсөн уйланғандар ишәйер ине. Ул саҡта был дөйөм бурысты атҡарыу ҙа күмәгерәк иңдәргә төшөр ине лә, һөҙөмтәләр, еңеүҙәр тосораҡ булыр ине...

Милләт яҙмышына битараф булмағандарҙың ишәйеүе тураһындағы хыял менән аяҡ баҫам үҙем һәр Яңы йылға. Сөнки һуңғы йылдарҙа был теләк-ниәт мөһим һәм көнүҙәк булыуҙы дауам итә. Ни тиһәң дә, тормош көн дә беҙҙе бихисап һынауҙар алдына ҡуя, "боҙло һыуға" ташланырға мәжбүр итә. Глобалләштереү, оптималләштереү, баҙар шарттары, төрлө реформалар баҙата, ҡулдарҙы һәлендерә, күңелде төшөрә, рухи көрсөккә терәй. Әммә был һынауҙарҙы ла лайыҡлы үтербеҙ, Алла бирһә. Аңды һәм аҡылды бер аҙ көсөргәндерергә, үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға кәрәк икәнен аңларға, эшһеҙлектән, аҡсаһыҙлыҡтан сара табырға өйрәнеп киләбеҙ инде (Гәзиттең был һанында 12-13 биттәрҙәге материалдарҙы фәһем алып уҡый күрегеҙ, йәме). Ғөмүмән, гәзитебеҙҙәге һәр мәҡәлә ниндәй ҙә булһа фәһем бирә - шуны тойорға өйрәнһәгеҙ ине. Фәһемле һүҙҙең көсөн беләһегеҙ. Ошо көндәрҙә бер милләттәш: "Киске Өфө"нө уҡый-уҡый, шул тиклем тәрбиәлегә әйләндем", - тигәйне. Уйынлы-сысынлы әйтелһә лә, был һүҙҙәрҙең ысын яғы күберәк икәнен беләбеҙ. Донъя күргән аҡыл эйәләренең өгөт-кәңәшенә ҡолаҡ һалайыҡ, һәр ишеткән һәм уҡылған фәһемле фекергә эйәреп ҡорайыҡ тормошобоҙҙо, уйҙарыбыҙҙы, шуға яраШлы үҙгәртәйек ҡылыҡтарыбыҙҙы. Ул саҡта...

Ул саҡта, ысынлап та, беҙҙең хыял тормошҡа ашасаҡ: халҡыбыҙ, республикабыҙ именлеге, бөтөнлөгө, яҙмышы өсөн көйөп-янғандар, тиңдәр араһында тиң итеү өсөн эшләгәндәр һәм йәшәгәндәр, милләтебеҙҙе йәшәтергә һәм ишәйтергә ынтылып, лайыҡлы балалар үҫтергәндәр һәм тәрбиәләгәндәр күбәйәсәк. Оһо, ҡалай ауыр һәм маҡтаулы бурыс йөкмәтелә фәһемле һүҙгә. Тимәк, беҙгә лә...

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

ТУҠТА, МӘЛ!

Баймаҡтарҙан килгән "күстәнәс" был!

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан халҡын Яңы йыл менән ҡотланы.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты бойороғо менән республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарын үҫтереү программаһын эшләү буйынса эш төркөмө ойошторолдо. Документҡа ярашлы, эш төркөмө 2011 йылдың 1 майына тиклем райондарҙың ҡыҫҡа сроклы комплекслы үҫеш планы проектын БР Президенты ҡарамағына тапшырырға тейеш. Эш төркөмө составына БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай вәкилдәре - Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу буйынса комитет рәйесе Ф. Сәйфуллин, депутат Н. Крюков, Секретариаттың бүлек мөдире Ш. Мөхәмәтдинов инде. Парламентта үҫештең комплексы планын эшләү буйынса тәҡдимдәр әҙерләнә, төньяҡ-көнсығыш райондарындағы иҡтисади хәл өйрәнелә.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советының һәм Рәсәй Федерацияһы ҡарамағындағы Өҫтөнлөклө милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу һәм демографик сәйәсәт буйынса комиссияның берлектәге ултырышында ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Республика башлығы Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевҡа Дәүләт Советы Президиумының милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр мәсьәләһе буйынса ултырышын Башҡортостанда үткәрергә тәҡдим итте. Дмитрий Медведев Рәсәй Президенты Хакимиәтенә Рөстәм Хәмитов тарафынан индерелгән тәҡдимде ҡарарға ҡушты.

✓РФ Пенсия фонды менән килешеү буйынса почта хеҙмәткәрҙәре аҡсалата түләүҙәр графигы 2 ғинуарға тура килгән граждандарға пенсия һәм пособиеларын декабрҙә үк килтереп бирҙе. 2011 йылдың 3 ғинуарынан 10-ына тиклем түләнергә тейешле пенсиялар һәм пособиелар ҙа билдәләнгән графикҡа ярашлы биреләсәк, пенсияларын 7, 8 һәм 9 ғинуарҙа алырға тейешле кешеләргә лә улар ваҡытынан алда алып барып тапшырыласаҡ. Торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә субсидиялар алыусылар айлыҡ түләүҙәр, торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәтләндереүгә түләүгә айлыҡ субсидиялар, пенсияға өҫтәмәләр, бала ҡарау буйынса түләүҙәр ҡәҙимге график буйынса еткереләсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

ҺАУ БУЛАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

Уйынлы-ысынлы Яңы йыл мөрәжәғәте

Йыл һайын Яңы йыл алдынан, йәғни, 31 декабрҙә төнгө ун ике тулып килгәндә, дәүләт башлығы халыҡҡа мөрәжәғәт итә. Ҡотлау менән тип әйтергә лә була, үткән йыл һөҙөмтәләрен байҡау һәм Яңы йылға пландар менән уртаҡлашыу, тип ҡабул итергә лә мөмкин уны. Америка Ҡушма Штаттары президенты күптән инде яңы йыл тыуғанда телеэкрандарҙан үҙ халҡына мөрәжәғәт итә икән. Яңы заманалар еткәс, беҙҙекеләр ҙә шулайта башланы. Михаил Сергеевич Горбачев беренсе булды. Унан һуң Борис Николаевич Ельцин. Ә бына шул осорҙа бер генә Яңы йылды беҙ билдәле урыҫ сатиригы Михаил Задорнов менән бергә ҡаршыланыҡ.



Өгөнгө түрәләребеҙ ҙә ошо йоланы тотоп килә. Кремль йондоҙҙары һәм шыршы фонында ил башлығы, кем булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҫҡа ғына биш-ун минутлыҡ ҡына телмәр менән сығыш яһай. Шунан һуң куранттар һәм... рәхим ит, Яңы йыл! Дәүләт башлығы булмаһам да, "Киске Өфө"нө уҡыусыларға Яңы йыл уңайы менән мөрәжәғәт итмәксемен. Мөрәжәғәт тигәс тә, оло түрәләребеҙҙе ҡабатларға, уларҙы алмаштырырға йыйынмайым. Уларҙың үҙ һүҙе, минең үҙемдеке... Бары тик үткән йылдың ҡайһы бер һөҙөмтәләренә үҙ ҡарашымды һәм Яңы йылға теләктәремде уҡыусылар иғтибарына еткермәксемен.

Тәүҙә, ғәҙәттәгесә, 2010 йыл тураһында.

Үткән йылда иҫтә ҡалған һүҙҙәрҙән - "Аватар", "Твиттер", "Викиликс", вувузела, блог, Айфон. Хәтергә уйылған исемдәрҙән - Собянин, Джулиан Ассанж, Хренов, Мутко, Кашин, Бут, Чапман. Иҫләрлек ваҡиғаларҙан - йәйге ҡоролоҡ, Кущевская станицаһындағы үлтереш, милләтселәрҙең Манеж майҙанындағы акцияһы, Химки урманы өсөн көрәш, төтөн эсендәге Мәскәү, Польша президенты самолетының ҡолауы.

Һоҡланып ҡабатларлыҡ һүҙҙәрҙән - "Бур төрмәлә ултырырға тейеш".

Үткән йылдың ваҡиғалары тураһында ҡасан да булһа фильм төшөрһәләр, уны, моғайын, "2010-сы йылдың эҫе йәйе" тип атарҙар ине. Йәй генә түгел, тотош йыл ҡыҙыу булды. Эш, әлбиттә, һауа торошонда ғына түгел. Йәмғиәттең температураһын үлсәп булмай шул. Юғиһә, "сирле" булыуыбыҙ шунда уҡ һиҙелер ине. Мәскәү "тығын"дарында водителдәрҙең үҙара һуғышыуы, йәйәүлеләрҙең юлдарҙа тапалыуы, Манеж майҙанына фанаттарҙың сығыштары - былар барыһы ла тап ана шул "ауырыу"ҙың симптомдары. Әйткәндәй, йәмғиәттең "сир"ләүенә ваҡытлы матбуғат саралары ла үҙенең тос өлөшөн индерә икән дә баһа.

Лужковты телеэкрандарҙан "ҡыуалау"ҙары айырыуса ныҡ иҫтә ҡалған икән. Уны дошмандан былайыраҡ күреп, бөтә телеканалдарҙан (бөтә орудиеларҙан тип әйтергә лә булалыр) "мәғлүмәт һуғышы" асыуҙары ғәжәпләндерҙе. Белоруссия президенты Александр Лукашенконы ла тап шул уҡ ваҡытта тиерлек шулайыраҡ "тапағайнылар". Бер мәл, ҡапыл ғына ҡараштары үҙгәрҙе. Хәҙер Лукашенко - һайлап ҡуйылған президент. Уға төрлө яҡтан ҡотлау телеграммалары яуа. Ә Минскиҙа майҙандарҙа туҡмалған һәм төрмәгә эләккән халыҡҡа килгәндә инде (әйткәндәй, уларҙың араһында Рәсәй журналистары ла бар ине), йөрөмәһендәр шунда баш күтәреп, ҡаңғырып, шаулашып. Анна, Лужковты эштән алғанда кем булһа ла урамға сыҡтымы, тауыш күтәрҙеме уны яҡлап? Сирлебеҙ, йәмәғәт. Кемдеңдер температураһы юғары. Ә бәғзеләрҙең, киреһенсә, ҡан баҫымы түбән.

"Аватар"ҙы ҡарағанда алыҫ планетала барған һуғышты түгел, үҙебеҙҙең тарихта булған ваҡиғаларҙы баштан үткәрҙем. Мин генә түгел икән. Күп ваҡыт та үтмәне, Интернетта "Аватар" кадрҙарын башҡорт халҡы тарихының иң аяныслы биттәрен һүрәтләгән бүтән бер фильмдың өҙөктәре менән монтажлаған видеоклипты күрҙем. Баҡтиһәң, уйлап сығарылған Пандорала йәшәгән На'ви халҡы яҙмышы Еребеҙҙәге күп кенә халыҡтарҙың яҙмышынан бер нисек тә айырылмай икән. Уларҙы баҫҡынсыларҙан тәбиғәттәре, хайуандары ҡотҡарып алып ҡала. Еребеҙҙең тәбиғәте үҙе яҡлауға мохтаж. Ул да, йәмғиәт кеүек үк, сирле. Рәсәйҙә ҡоролоҡ, урмандарҙа ҡоторонған янғындар, ә Европаны һыу баҫып алып бара. Ерҙе биҙгәк (тапма) тота. Әллә, тим, кешенән туҡтауһыҙ ыҙа күргән Еребеҙ шулайтып үҙ балаһынан ҡотолмаҡсымы?

Ә кеше һаман уйнай. Тәбиғәт менән дә, үҙенең яҙмышы менән дә. Хатта туп менән дә.

Футбол тураһында артабан. 2010 йылғы донъя чемпионаты менән телмәребеҙгә яңы һүҙ килеп инде. Ул да булһа - вувузела. Баҡтиһәң, Африка халҡы футбол ҡарағанда торба ҡыҫҡырта икән. Әйтергә кәрәк, тәүҙә уйындарҙы ҡарай алмай аптырана инем. Һуңынан күнегелде. Телевизорҙың тауышын һүндерәм дә ҡуям. Күптәр шулайтҡандыр. Бына ғәжәп - ҡайһы илдең командаһы донъя чемпионы булғанын иҫләмәйем. Ә вувузела, уның ҡолаҡ тондорғос тауышы хәтерҙән сыҡмай. 2018 йылда беҙ донъяны нимә менән ғәжәпләндерербеҙ икән?

Ә хәҙер теләктәр. Яңы йылда улар тормошҡа ашһын ине. Беренсенән, йәмәғәт, киләһе йылда илебеҙгә именлек теләйек. Илебеҙҙең именлеге бөгөн ер аҫтында ята. Аңлайһығыҙҙыр. Нефтебеҙ һәм газыбыҙ киләһе йылда ла бөтмәй торһон, тиеүем. Шулай уҡ уларҙы ер аҫтына сығарған механизмдар - насостармы, нефть һәм газ һурғыстармы (техник терминдарҙы белмәйем, ҡыҙғанысҡа ҡаршы). Газ менән нефткә бәйле бер генә һүҙ иҫемдә: ул да булһа - Торба. Шуға күрә теләгем - Торбабыҙ имен генә торһон инде. Ҡайҙа ғына һуҙылһа ла - көнсығышҡамы, әллә көнбайышҡамы - тишелмәһен, ярылмаһын, өҙөлмәһен. Ошо нефтте һәм газды сығарыуҙа эшләгән кешеләрҙең аяҡ-ҡулы һыҙламаһын.

Рәсәйҙә йәшәгән һәм илебеҙҙе төйәк иткән күп һанлы, эреле-ваҡлы милләт вәкилдәренә теләгем - бер-беребеҙҙе күҙҙәр, танауҙар, йәки сәстәр буйынса айырмайыҡ. Беҙ төрлөбөҙ. Һәм был беҙҙең бәхетебеҙ. Алла беҙҙе бәхетебеҙҙән айырмаһын.

Тағы ла бер теләгем - түрәләребеҙ иҫән-һау булһын. Улар булмаһа, йәмәғәт, беҙ ҡайҙа барырға, ни эшләргә, ҡайһы йүнәлеште тоторға белмәй аптыраныр инек. Быға тиклем ун йыл улар менән бергә йәшәгәс, яҡындағы ун ... йылды уларһыҙ булмаҫ инде.

Милициябыҙ, дөрөҫөрөгө, полициябыҙ, иҫән-һау булһын. Улар булмаһа, илебеҙҙә журналистарға яҙырлыҡ тема ҡалмаясаҡ. Улар булмаһа, кем магазиндарға инеп, кешене утҡа тотор, кем резина суҡмар менән урамдарҙа халыҡты дөмбәҫләр, кем эшҡыуарҙарҙан аҡса йыйыр ине. Уйлаһаң, ҡурҡыныс булып китә.

Киләһе йылда бөтәбеҙ ҙә иҫән-һау булайыҡ. Кущевская станицаһында булған ҡан ҡойош башҡа ҡабатланмаһын.

Олигархтарға, хатта бөгөн төрмәлә ултырғандарға ла, наулыҡ теләйек. Рәшәткә артында ултырғандар башҡаларға сағыу миҫал булып торһон. Ә әлегә иректә булғандар - "науын һыйырҙар" булып ҡалһын. Улар булмаһа, Сочиҙағы Олимпиаданы, футбол буйынса донъя чемпионатын кем иҫәбенә үткәрәсәкбеҙ һуң?

Тағы ла бер теләгем бар. Йәмәғәт, нимә генә булһа ла, журналистарҙы туҡмамағыҙ. Уларҙың бар маҡсаты - һеҙ уҡырға теләгәнде яҙыу. Беҙҙе туҡмау, тыйырға маташыу - мәғәнәһеҙ. Беҙ барыбер яҙҙыҡ, яҙабыҙ һәм яҙасаҡбыҙ. Ниндәйҙер һүҙҙәрҙе, исемдәрҙе, вазифаларҙы атарға ярамаһа, беҙ синонимдар табасаҡбыҙ, образдар уйлап сығарасаҡбыҙ. Беҙҙең ауыҙыбыҙҙы ябып, өнөбөҙҙө тығып булмай. Журналист Кашин кеүек аяҡ-ҡулдарыбыҙҙы һындырһағыҙ, беҙ ҡәләмде тешләп булһа ла, яҙасаҡбыҙ. Журналистар бөгөн күпселектә намыҫлы, уйлы, фекерле кешеләр. Улар илдәге хәлдәрҙе яҡшы белә һәм дөрөҫ аңлай.

Вертикалебеҙ иҫән-һау булһын. Үткән ун йыл эсендә уны беҙ ярайһы уҡ нығыттыҡ. Төньяҡ Кавказда ла, башҡа төбәктәрҙә лә. Тәү ҡарашҡа ул ҡаҡшамаҫ, мәңге емерелмәҫ нымаҡ тойола. Иҫегеҙҙә булһа, Советтар Союзы ла мәңге емерелмәҫ нымаҡ тойола ине. Ҡайҙа ул? Бары тик халыҡ хәтерендә генә. Баҡтиһәң, был донъяла бер нәмә лә мәңге түгел икән. Кеше, ҡасан да булһа, фани донъяны ташлап китергә мәжбүр. Империялар ҙа емерелә, юҡҡа сыға. Йондоҙҙар ҙа һүнә. Бер нәмә лә мәңгелек түгел. Шулай булғас, һау булайыҡ, йәмәғәт!

Һау булығыҙ!

Таһир ИШКИНИН.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың банкылар секторында кредит биреү күләме 27,2 процентҡа артҡан. Республиканың аграр секторына ҡоролоҡ менән бәйле кредиттар күберәк бирелгән. Ун бер айҙа ғына Башҡортостандың аграр секторына кредит биреү күләме 6,7 млрд һумға еткән.

✓2010 йылда Рәсәй һәм Башҡортостан бюджетынан 51 коммуналь техника берәмеге һатып алыу өсөн 78 млн һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Ошо арала республика муниципалитеттарына коммуналь техникаһының һуңғы партияһы тапшырылды. Киләһе йылда улар коммуналь техника аласаҡ.

✓Башҡортостанда "Сургуттрубопроводстрой" компанияһы президенты Игорь Путин менән компанияның директорҙар советы рәйесе Сергей Кошкин булып китте - улар беҙҙең республика менән инвестиция проекттарын бойомға ашырыу өсөн уңайлы майҙансыҡ булараҡ ҡыҙыҡһынды. БР Президенты менән осрашыуҙарҙа Стәрлетамаҡта нефть-газ табыусы комплекс объекттарын төҙөү буйынса бэк-офис асыу пландары менән уртаҡлаштылар. Инвесторҙар Өфөлә ике "Ашан" мегаүҙәген һәм аквапарк төҙөргә ниәтләй.

✓Яңы йыл байрамдарында Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһендә ҡала яны поездарының расписаниеһы үҙгәрәсәк. Пассажирҙар үтенесе буйынса Яңы йыл һәм Рашты-уа каникулдары көндәрендә электр поездары хәрәкәтенең киләһе тәртибе билдәләнә: 1-10 ғинуарҙа - йәкшәмбе расписаниеһы буйынса; 11 ғинуарҙа - шишәмбе расписаниеһы буйынса. Шулай уҡ Раевка, Абдулла, Әшә һәм Урман тарафтарына өҫтәмә поездар билдәләнә. Инйәргә лә 11 ғинуарҙа өҫтәмә поезд ебәреләсәк. Шул уҡ ваҡытта был йүнәлештәге поездар 5 һәм 6 ғинуарҙа булмаясаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Указы менән Әнүәр Мәхмүтов Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Әнүәр Әнәс улы быға тиклем Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының ярҙамсыһы булып эшләй ине. Президенттың икенсе Указы менән Николай Курапов икенсе эшкә күсеү сәбәпле, БР Президенты Хакимиәте етәксеһе вазифаһынан бушатылды.

✓ *Яңы йыл кәйефе бүләк итергә тип килгән мөғжизәле Ҡыш бабайҙарҙың ҡайһы берҙәренең ситтә тәмәке көйрәтеүе балалар күҙенә эләкмәй ҡалманы. Уф, тәмәке көйрәткән Ҡыш бабай ҡалай йәмһеҙ, белһәгеҙ ине!*

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

КӨРСӨКТӘН СЫҒЫП...

өҫкә күтәрелә башланыҡ

Журналистар менән үткәргән матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев үтеп барған йылға йомғаҡ яһаны һәм ошоғаса бәкәлгә һуҡҡан көрсөктән сыға башлауыбыҙ хаҡында белдерҙе. Тимәк, Яңы йылға яңы өмөттәр менән аяҡ баҫырға ла мөмкин. Һәр хәлдә, Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткестәре рейтингында үҙенең лидерлыҡ һәм дәғүәселек позицияларын һаҡлап ҡалыуы быға бер дәлил.

Дөйөм алғанда, баш ҡала хужалығының һәм социаль өлкәһенең барлыҡ тармаҡтары ла тотороҡло эшләгән. Реаль секторҙа 2009 йыл менән сағыштырғанда ыңғай үҫеш күҙәтелгән. Һандар теле менән әйткәндә, сәнәғәт етештереүе индексы 109 процент самаһы тәшкил итә, иң ҙур үҫеш химия, транспорт средстволары, электр ҡорамалдары производствоһында күҙәтелеп, улар хатта көрсөккә тиклемге 2008 йыл күрһәткестәрен дә үтеп киткән.

Йыл һуңына тиклем төрлө сығанаҡтарҙан финансланып, дөйөм майҙаны 650 мең квадрат метр тәшкил иткән торлаҡ йорттар файҙаланыуға тапшырыласаҡ, тип билдәләне Павел Рюрикович. Бында күп ҡатлы йорттар ҙа, шәхси төҙөлөш тә инә. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда күрһәткестәр 108,7 процент тәшкил итә.

Павел Рюрикович әйтеүенсә, бөгөн баш ҡалала фатир алыуға иҫәптә 500-ҙән ашыу Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, уларҙың тол ҡалған ҡатындары, был категорияға тиңләштерелгән кешеләр иҫәпләнә. Бөгөн уларҙың 90 процентының ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү, йәғни 400-нә сертификаттар нигеҙендә фатир биреү мөмкинлеге бар. Был йәһәттән ҡала округы хакимиәте яңы төҙөлгән йорттарҙа 400 фатир алған.

Көрсөккә һылтанып, ҡул ҡаушырып ултырмаған баш ҡала подрядсылары. Йыл дауамында баш ҡалала төрлө объекттар файҙаланыуға тапшырылған, шул иҫәптән 8 спорт майҙансығы төҙөлгән, яңы балалар баҡсалары, мәктәптәр, реконструкция һәм ремонттан һуң һаулыҡ һаҡлау объекттары һ.б. ҡабат үҙ ишектәрен асҡан.

Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға булышлыҡ итеү фонды ярҙамында 90 йорт һәм 185 лифт ремонтланған. Быға фондтың, ҡала округы бюджетының һәм милекселәрҙең аҡсалары тотонолған.

Ваҡытында һуҡранһаҡ та, йәйге-көҙгө осорҙа бер нисә урында юлдар ҙа киңәйтелде, артабан Дан бульвары һәм Үҫмерҙәр китапханаһы тупҡалыштарында ер аҫты үткәүелдәрен эшләү планлаштырыла. Шулай уҡ тиҙҙән бер нисә урында юл сиселештәре төҙөләсәк һәм баш ҡала урамдарының ҡайһы берҙәрендә бер яҡлы ғына хәрәкәт буласаҡ.

Демография проблемалары ла артыҡ борсолоу тыуҙырмай. Бөгөн Өфөлә дөйөм тәбиғи артым 1650 кеше тәшкил итеп, был Рәсәй Федерацияһында иң яҡшы күрһәткес булып тора. Шулай уҡ йыл башында эшһеҙҙәр һаны 13 мең кеше булһа, йыл һуңына ул 11 меңгәсә кәмегән.

Ҡала буйынса уртаса эш хаҡы 21,4 мең һум күләмендә иҫәпләнә һәм был күрһәткес Санкт-Петербург, Екатеринбург ҡалаларынан ҡала өсөнсө урында тора. Быны халыҡтың һатып алыу мөмкинлеге лә раҫлай. Ваҡлап һатыу әйләнеше 9 айҙа былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 9 процентҡа үҫһә, түләүле хеҙмәттәр күләме 12 процентҡа артҡан.

Матбуғат конференцияһын йомғаҡлап, Павел Качкаев журналистарҙың һорауҙарына яуап бирҙе һәм "дүртенсе власть" вәкилдәрен объектив булырға, бәләкәй генә хаталарға ла юл ҡуймаҫҡа саҡырҙы.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

Бәләкәстәр әле һаман Ҡыш бабай донъяла берәү генә була, тигәнгә ышанамы икән? Нисек кенә йәл булмаһын, Өфө балаларының ул ышаныуы юҡҡа сыҡты. Сөнки бында йыл һайын Яңы йыл алдынан Ҡыш бабайҙар парады үткәрелә. Мәҫәлән, быйыл Ленин майҙанында үткән тантаналы парадта бөтәһе 500-гә яҡын "әкиәт бабайы" ҡатнашты.Ленин майҙаны ысынлап та ғәйәт ҙур тамашаға, әкиәт донъяһына әүерелде. Етмәһә, һауа торошо ла алдан заказ биреп ҡуйылған кеүек буранланы ла китте: өйөрөлөп ҡарҙар оса, көслө ел һыҙғыра, ә әкиәт буйынса Ҡыш бабайҙар нәҡ ошондай миҙгелдә юлға сыға ла инде.

ҠЫШ БАБАЙ БЕРӘҮ ТҮГЕЛ,

биш йөҙләп тә була икән

Парадты 21 көнсығыш символы асты. Беренселәрҙән булып былтырғы һәм быйылғы йыл хужалары: Юлбарыҫ, Бесәй һәм Ҡуян атланы, уларға оркестр музыкаһы аҫтында бөтә Ҡыш бабайҙар ҡушылды. Парадты Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡабул итте. Ғәҙәттәгесә, үҙенең серле саналарында килеп төшкән Яңы йылдың төп Ҡыш бабайы уға ҡуян бүләк итте һәм Яңы йыл менән ҡотланы.

Майҙанға ата-әсәләре менән килгән балаларҙың шул тиклем күп Ҡыш бабайҙарҙы күреп аптырауының сиге булманы, хатта ҡайһы берҙәре бүләк һонған Ҡыш бабайҙарға ҡурҡып баҡты. Шулай ҙа өфөләләр әкиәт ҡунаҡтарына ихлас ҡыуанды: яңы йыл геройҙары менән иҫтәлеккә фотоға ла төштөләр, йырлап, бейеп, шиғырҙар ҙа һөйләп ишеттерҙеләр. Әсәһе менән бергәләп тамашаны күрергә килгән Ринат исемле малайҙың: "Әсәй, ә был Ҡыш бабайҙарҙы ҡайҙан йыйып алып килгәндәр?" - тип ғәжәпләнеп һорауы иғтибарымды йәлеп итте. Ҡыҙыҡ өсөн унан: "Ринат, ә һинеңсә ысын Ҡыш бабай бармы ул?" - тип һорайым. "Юҡ, - ти алты йәшлек малай. - Ул әкиәттәрҙә генә була".

Замана балалары шул инде улар. Әммә уларҙың ышанысын, күҙаллауын үҙгәртеүсе сәбәпте заманға ғына япһарып ҡалдырып та булмай. Беҙ, ололар, булдырған сәбәптәр барыбер ҙә яманыраҡ. Мәҫәлән, ошондай күркәм тамашаларҙа ла ҡайһы ваҡыт кәйефте ҡырырлыҡ хәлдәр осрап ҡуя. Был юлы кешеләрҙең күңелен асырға, Яңы йыл кәйефе бүләк итергә тип килгән мөғжизәле Ҡыш бабайҙарҙың ҡайһы берҙәренең ситтә тәмәке көйрәтеүе балалар күҙенә эләкмәй ҡалманы. Уф, тәмәке көйрәткән Ҡыш бабай ҡалай йәмһеҙ, белһәгеҙ ине! Ҡыш бабайҙарға һоҡланып ҡараған, ниндәйҙер мөғжизә өмөт иткән күңел шунда уҡ һүрелде лә ҡуйҙы. Ә был күренеште күргән сабыйҙарҙың күңелендә ниндәй уйҙар яралды икән? Бәлки, киләһе йылдарҙа ошоноң кеүек күренештәргә нисек тә юл ҡуймаҫҡа тырышырға кәрәктер, ни тиһәң дә, күңелдәре аҡ ҡағыҙ шикелле саф балаларҙың өмөт-ышаныстарын юҡҡа сығарғы килмәй. Баланың мөғжизә көтөүе, әкиәттәргә ышаныуы үҙе бер мөғжизә лә баһа!

Тантаналы парадтан һуң Өфөнөң ете районынан килгән "олатайҙар" ҡаланың иң яҡшы Ҡыш бабайы исеменә һынау тотто. Төрлө-төрлө костюмдар кейгән, ҡулдарына серле таяҡ тотҡан, арҡаларына күстәнәсле моҡсайҙар аҫҡан аҡ һаҡаллы Ҡыш бабайҙар бер-береһен үҙҙырып йырланы, бейене, һөнәрҙәрен күрһәтте. Еңеүселәр билдәләнде һәм уларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Мансур ИСМӘҒИЛЕВ, Ленин районы: Ҡыш бабайҙар парадында беренсе тапҡыр ҡатнашам. Хәҙерге балалар Ҡыш бабайға, әкиәткә түгел, ә компьютерға нығыраҡ ышана. Ә шулай ҙа Яңы йылда балаларға ғына түгел, ололарға ла ниндәйҙер мөғжизә күрһәтке килә. Йәш саҡта ла Яңы йыл байрамдарына Ҡыш бабай булып кейенеп сыға торғайным. Был әкиәт геройы күҙ алдына йомарт, изге күңелле, алсаҡ, балаларҙы яратҡан аҡ һаҡаллы бабай булып баҫа. Ошоно һынландырырға тырыштым мин дә.

Эльвира ӘХМӘТЙӘНОВА, Октябрь районы: Тантаналы был парадта быйыл икенсе тапҡыр ҡатнашам. Был сара ваҡытында бик күңелле, бөтәһендә лә Яңы йыл кәйефе. Миңә был ярышта еңеүеңмәү мөһим түгел, мин хатта ярыш барғанын да онотам. Минең өсөн иң мөһиме - ошолай Ҡыш бабай булып кейенеп, кешеләрҙең күңелен асып, уйнап, бейеп ҡайтыу.

Рафаэль ВӘЛИУЛЛИН, Совет районы: Мин үҙем олоғайып бөтөүгә ҡарамаҫтан, Ҡыш бабайға һаман да ихлас ышанам. Йыл һайын Яңы йылды түҙемһеҙләнеп көтөп алам һәм Ҡыш бабайҙан үҙемә генә түгел, туғандарыма, яҡындарыма ла иҫәнлек-һаулыҡ, байлыҡ һорайым. Ә былай Ҡыш бабай булып кейенеп парадҡа сығыуымдың маҡсаты - кескәй сабыйҙарға әҙ генә булһа ла мөғжизә бүләк итеү. Ҡыш бабай йомарт булырға тейеш, шуға күрә беҙ ҙә балаларға мул итеп тәм-томдар, уйынсыҡтар әҙерләнек. Улар араһында ла беҙгә бүләккә Яңы йыл тураһында шиғыр, йырҙар әҙерләп килеүселәре була. Юғиһә, халыҡ араһында һөнәрен күрһәтмәһә - Ҡыш бабай бүләк бирмәй, тигән ышаныу бар бит.

Нәзирә АЙЫТОВА яҙып алды.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән Рузалия Хисмәтуллина Башҡортостан Республикаһы финанс министры итеп тәғәйенләнде. Рузалия Сафиулла ҡыҙы быға тиклем БР финанс министры урынбаҫары булып эшләй ине.

✓Декабрҙә булып үткән Яңы йыл алды йәрминкәләрендә ауыл хужалығы продукцияһы һатыусылар өсөн 5600 сауҙа урыны булдырылды. Йәрминкәлә барлығы 1142,4 тонна ит һатылды. Уның хаҡы үткән йылдар менән сағыштырғанда10-15 процентҡа арзанираҡ булды, йәғни килоһы 145-187 һумдан уҙманы.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, Өфө ҡала округы Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин Өфө һәм республика халҡын Яңы йыл байрамы менән ҡотланы.

✓Өфөлә "Штраф" профилактик операцияһы үтте. Рейд ваҡытында 225 автомобиль хужаһы штраф бурысын ваҡытында түләмәгән өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылды. Белеүегеҙсә, бындай осраҡта закон ғәйепле кешенең банктағы иҫәбенә, мөлкәтенә, шулай уҡ автомобиленә лә арест һалырға рөхсәт итә. Штрафын үҙ ирке менән түләмәгән автомобиль хужалары уны икеләтә күләмдә түләй икәнен дә онотмаҫҡа кәрәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты республиканың хоҡуҡ һаҡлау органдарын ҙур күләмдәге ришүәтселек менән көрәшкә саҡырҙы. Былтыр ришүәтселек менән бәйле енәйәттәрҙе асыҡлау 40 процент тәшкил иткән. Әммә күберәк ваҡ ришүәтселәр тотола, эреләре күп ваҡыт яуаплылыҡтан ҡасып ҡотолоусан. Рөстәм Зәки улы хоҡуҡ һаҡлау органдарына бигерәк тә дәүләт заказдарына иғтибар йүнәлтергә ҡушты.

✓Яңы йыл төнөндә урамға һәм боҙ ҡаласыҡтарына 800 меңләп кеше сығасаҡ. Граждандар тыныс була ала: өс меңдән ашыу милиционер йәмәғәт тәртибе һағында торасаҡ. Раштыуа байрамында ла 139 православие йорттарына 40 меңләп кеше киләсәк. Ул көндә лә меңләп милиционер беҙҙең тыныслыҡты һаҡлаясаҡ.

ҺАЙ, БАШҠОРТОМ ЙОЛАЛАРЫ!

ҠАҘ ӨМӘҺЕ

Халҡыбыҙҙың йылдың төрлө миҙгеленә, хеҙмәткә бәйле йолалары бик күп. Шуларҙың береһе, йәйге, көҙгө эштәрҙе тамамлағас үткәрелә торған байрам-ҡаҙ өмәһе. Байлыҡ, муллыҡ, матурлыҡ, тәүге ҡар киләсәккә яҡты өмөт уята ул.

"Темәс" тарихи-мәҙәни үҙәге методисы Лилиә Ишбаева әйтеүенсә, Темәстә лә ҡура тултырып ҡаҙ көткән уңған, егәрле хужабикәләр бик күп. Ауылды уртаға бүлеп аҡҡан Һаҡмар, Шырҙы, Талашты йылғалары ла был файҙалы ҡошто үрсетеү өсөн бик уңайлы һәм отошло. Ата- бабалар тап ошо ергә килеп, юҡҡа ғына нигеҙ ҡормаған бит. Ҡаҙ, йорт ҡошо булараҡ, беҙҙең халыҡта билдәле бер айырым урынды алып тора. Ул кеше тарафынан эйәләштерелгән иң боронғо ҡоштарҙың береһе: мамығынан мендәр, түшәктәр яһап, итен аш- һыу әҙерләгәндә ҡулланалар, ә ҡаҙҙың майы менән хатта дауаланалар ҙа: ҡышҡы һыуыҡтарҙа бит, ҡолаҡ өшөһә, ҡаҙ майы һөртөндәр, һалҡын тейгәндә ҡаҙ майын эретеп эскәндәр.

Ҡаҙ өмәһе ул эш кенә түгел, ә матур итеп аралашыу, күңел асыу, үҙеңде күрһәтеү сараһы ла булған. Тирә-яҡты аҡлыҡҡа, сафлыҡҡа күмеп ҡар яуыу менән был күркәм йоланы һаҡлау, дауам итеү маҡсатында "Темәс" тарихи- мәҙәни үҙәге ауылдың уңған хужабикәләренең береһе булған Гөлдәр апай Имелбаеваның йортонда "Ҡаҙ өмәһе" байрамын ойоштороҙо. Йәмле Һаҡмар йылғаһының яр буйына һыйынып ултырған күркәм өйгә иртә менән байрамса кейенгән килендәр, хужабикәнең әхирәттәре, балалары йыйылды. Изге теләктәр, йыр - моң менән башланып киткән был байрамдың төп маҡсаты - халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында һаҡланып килгән, хеҙмәткә бәйле йолаһын тейешле ҡанундарға таянып, еренә еткереп башҡарыу, уларҙы үҫеп килгән йәш быуынға, балаларға өйрәтеп ҡалдырыу ине. Быуындар бәйләнешен, күсәгилешлекте һаҡлап, байрамда ҡатнашҡан һәр кем үҙе менән бергә ейән - ейәнсәрен дә эйәрткәйне. Йыр- моң, бейеүҙәр менән бергә аралашып барған был сарала балалар өләсәйҙәрҙән йолаға бәйле хеҙмәт алымы нескәлектәренә өйрәнде, еңгәләре менән бергә сәмләнеп ҡаҙ йолҡто, ҡаурый һыҙырыу, тәпәй таҙартыуҙа ярышты, ҡаҙ майын һыҙырыуҙа ихлас ҡатнашты.

Өмәле эш - ырамлы эш, тигәндәй, күмәкләгәс, һә тигәнсе атҡарып та сыҡтылар. Һимеҙ, тос ҡаҙҙарҙы йәш килендәр, еңгәләр көйәнтәләренә аҫып, йәмле Һаҡмар буйына төшөп, ағын һыуҙа сайҡай-сайҡай йыуып, киләһе йылда ла ҡаҙҙарҙың уңыуын теләп, ҡаҙ мамығы һиптеләр. Бында ла дәртле йыр- моң, бейеүҙәр дауам итте. Гөлнур инәй Мостафина ҡаҙ майына бешергән ҡоймаҡтары менән барыһын да ихлас һыйланы. Өйҙә өләсәй кескәйҙәрҙе ҡаҙға бәйле һынамыштар, йомаҡтар, ырымдар менән таныштырһа, ҡартәсәй еткән ҡыҙҙарҙың бәхетен юраны. Ҙур эште өлкәндәр менән бергә, күмәк көс менән атҡарып сыҡҡан балалар үҙҙәренең хеҙмәттә генә түгел, ә йырбейеүгә лә әүәҫ икәнен күрһәтеп, өмә хөрмәтенә ойоштороlған байрам табынында йырлап, бейеп, шиғырҙар һөйләп, ололарҙың күңелен асты.

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ЕРҘЕҢ ХУЖАҺЫ БУЛ!

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында республикала ер участкаларын һәм ауыл хужалығы ерҙәрен бер тапҡыр бушлай хосусилаштырыу ваҡытын 2012 йылдың 1 ғинуарына тиклем оҙайттылар. Был ошо хаҡтағы БР Законының 21-се статьяһына үҙгәрештәр индереү һөҙөмтәһендә мөмкин булды.

Депутаттар алдында сығыш яһап, БР Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министры Юлай Ильясов ер участкаларын бушлай хосусилаштырыу осоронда - 2006 йылдың 1 ғинуарынан 2010 йылдың 1 ғинуарына тиклем был хоҡуҡ менән 350 мең граждан файҙаланып, дөйөм милектәге ике миллион тирәһе ауыл хужалығы ерҙәренә эйә булған, тип белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер райондарҙа халыҡ был хоҡуғын тормошҡа ашыра алмаған. Ошо ваҡытта 1500 кеше ер өлөшөн алыу исемлегенә индерелгән, әммә вәкәләтле органдар тарафынан уларға бушлай ер биреү тураһында тейешле ҡарар ҡабул ителмәгән. Быларҙың барыһын да иҫәпкә алып, Республика Хөкүмәте Парламент ҡарауына ерҙәрҙе бушлай хосусилаштырыуҙың ваҡытын оҙайтыу тураһында закон проектын тәҡдим итте. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары закон проектын өсөнсө уҡыуҙа ҡабул итте.

БАШҠОРТ АТЫНЫҢ НӘҪЕЛ КИТАБЫ

Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы башҡорт тоҡомло аттарҙың нәҫел китабын баҫмаға әҙерләй. Әлеге ваҡытта был үҙенсәлекле китап өсөн материалдар йыйыу бара.

Йылҡысылыҡ буйынса селекция эшен тағы ла яҡшыраҡ иҫәпкә алыу маҡсатынан республика хужалыҡтарында махсус компьютер программаһы индерелә. Был программа республиканың Баймаҡ районындағы "Ҡолонсаҡ", Әбйәлил районындағы "Аҡбуҙат", Учалы районындағы " Байрамғол агрофирмаһы", "Юлдаш", "Юрға" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәрендә, "119-сы Өфө ат заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә, "Өфө" дәүләт ат һарайында, Иглин районының "Х. Иҙиәтуллин" крәҫтиән хужалығында уңышлы ҡулланыла. Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының йылҡысылыҡ һәм ҡымыҙ эшләү лабораторияһы Бөтә Рәсәй Йылҡысылыҡ ғилми-тикшеренеү институты менән берлектә Башҡортостандың тоҡом йылҡысылығы мәсьәләләре буйынса Берҙәм мәғлүмәт үҙәге ойоштора. Бында йылҡысылыҡ өлкәһенә алдынғы технологиялар индереү, башҡорт тоҡомло аттарҙың продуктлылығын һәм яраҡлашыу сифаттарын камиллаштырыу буйынса ҙур эш алып бара. Тап улар тарафынан башҡорт тоҡомло аттарҙың ит һәм һөт биреүсе Ирәндек, Учалы типтары булдырылып, Рәсәй Федерацияһының Селекцион ҡаҙаныштар дәүләт реестрына индерелгән.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

Гайморит

Ниңәлер күп кеше яланбаш йөрөргә күнеккән. Тап ошо сәбәптән гайморит башланыуы ихтимал икәне бер кемде лә борсомай, ҡыҙғанысҡа күрә. Шуға ла был сир башланып өлгөргән икән, түбәндәгесә дауаланырға була:

4-6 сәғәт дауамында 15-әр минут кәрәҙле бал ашап, кәрәҙен сәйнәп тороғоҙ. Унан һуң инде кәрәҙле балды аҙна буйына көнөнә бер мәртәбә ашарға, кәрәҙен сәйнәргә кәрәк. Ғөмүмән, был ысулды көҙҙән алып йәйгә тиклем көн һайын 1-2 балғалаҡ бал ҡабып эшләргә кәрәк;

❖ әгәр гайморит мәлендә тамаҡ төбө ауыртып, ҡытыҡланып торһа, уны ошо төнәтмә менән сайҡарға кәрәк: икешәр ҡалаҡ эвкалипт үләне япрағын, календула сәскәләрен, шалфей япраҡтарын, берәр ҡалаҡ аҡ сәскә, андыҙ тамырын, йүкә сәскәһен бергә болғатырға. Шунан бер ҡалаҡ үләндәр ҡатнашмаһын бер стакан ҡайнаған һыуға һалып, икенсе йылы һыу һалынған һауытҡа ултыртып, 15 минут төнәтергә, һөҙөргә. Һәр ике сәғәт һайын шуның менән тамаҡты сайҡатырға кәрәк.

Тимерәү

Экзема (тимерәү) булғанда ҡабаҡ һутын һөртөргә кәрәк. Экзема зарарлаған тәнгә һөртөү ҙә файҙалы. 5-6 мәртәбә алма һеркәһен һөртөү ҙә яҡшы.

Кесе яраҙы тота алмаһаң

Был бигерәк тә бала-сағала күҙәтелә. ❖ 1 ҡалаҡ укроп орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, яҡшылап сепрәк менән төрөп, 2-3 сәғәт төнәтәһең һәм һөҙәһең. Шуны көнөнә бер тапҡыр тулыһынса эсәһең. Был дауа бөтә йәштәге кешеләр өсөн дә файҙалы.

❖ 40 грамм кипкән һары мәтрүшкәне сәскәһе, һабағы менән бергә 1 литр ҡайнап ҡына сыҡҡан һыуға һалаһың, төрөп, 1-2 сәғәт төнәтәһең. Сәй урынына теләгәнсе эсәһең. Йоҡо алдынан был дауаны 0,5-1 стакан эсеү ҙә файҙалы.

Укроп

Тәндең йәрәхәтләнгән урындары шешеп барыусан була. Быны булдырмауҙың бик ябай ысулы бар: ул урындарға укроп көлөн һибергә генә кәрәк.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

АТАЙ ҺҮҘЕ

ИР НАМЫҪЫ - УЛАНДАР

ҺОРАУ: Атайығыҙҙан ниндәй ир тәрбиәһе алдығыҙ, улдарығыҙға ниндәй ир тәрбиәһе бирәһегеҙ?

Йәмғиәттә аталарына ҡарап, улдары тураһында фекер йөрөтәләр. Юҡҡа ғына ололар йәш кешенән: "Һин кем улы?" - тип һорамай. Беҙҙең атай-олатайҙар Түңгәүер бабаға барып тоташа. Бөгөнгө көндә минең ейәнемдән башлап Түңгәүер олатайға тиклем 19 быуын иҫәпле. Улдарым нәҫел шәжәрәһен яҡшы белгәнгә күрә, нәҫел тамырыбыҙ нығлы, киләсәге өмөтлө. Ир кешенең намыҫы, дәрәжәһе көҙгөһө - уландары бит!

Беҙҙең атайыбыҙ Төхвәтулла Һөйөндөков ғүмер буйы ауылда фельдшер-ветеринар булып эшләне. Һәр ваҡыт дин юлында булды. Диниҫез заманда уҡ хаҡ юлдан тайпылмауы ҡартатайымдың тормош позицияһынан да киләлер. Атайым һүҙҙәре буйынса, Шәһишәриф ҡартатайым Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһен тамамлаған уҡымышлы кеше, ғүмер буйы Йылайыр районы Исҡужа ауылында указлы мулла була. Дин әһелдәрен эҙәрлекләүҙәр башланып торған 1933 йылда совет власы вәкилдәре килеп: "Әгәр үҙеңдең ҡараштарыңдан баш тартмаһаң, төрмәгә алып китәбеҙ, йә атабыҙ",- тип янай. Ҡартатай уларға иманынан баш тартмаясағын белдерә. Күп тә үтмәй, ул, ауырып китеп, 48 йәшендә генә вафат була. Бәхеткә күрә, атайым дини белем алып өлгөрә унан. Олоғая башлағас, намаҙға баҫты. Беҙгә лә дини белем бирергә тырышты, аяттар уҡырға өйрәтте, ваҡыты еткәс, күңелебеҙ иман нурына үрелерен шулай алдан хәстәрләне.

Ғаиләлә дүрт малай, бер ҡыҙ үҫтек. Тәрбиә мәсьәләһендә ата-әсә һүҙен йығманыҡ, эштә тилбер, уҡыуҙа отҡор булдыҡ. Ул беҙгә һәр ваҡыт ошо һүҙҙәрҙе әйтә ине: "Атың барҙа - ил таны, атаң барҙа - ир таны". Йәғни, атайың бар саҡта кемдең кем икәнен төшөнөп ҡал, яҡшыны ямандан айыра бел, тигәнде аңлатырға тырышты. Һабаҡ биреүгә килгәндә, "өрлөктәге сыбыҡ менән ҡурҡытыу" алымы беҙҙең ғаиләлә лә булды. Баланы сыбыҡ менән "уҡытыуҙы" Ислам тәғлимәте лә тыймай. Мин үҙем офицер булып хеҙмәт иткәнгә күрә, ике малайым да бәләкәй саҡтарынан "портупея" тигән һүҙ менән яҡшы таныш ине. Ир бала тәрбиәләүҙә был алымдың яҡшы һөҙөмтәләр биреүе һәр кемгә лә мәғлүм. Улдарымдың исемдәре Салауат һәм Азат. Әле икеһе лә эшләп йөрөйҙәр. Салауат улым Силәбе өлкәһендә йәшәй, шәхси стоматология клиникаһы бар. Уның 10 йәшлек улы Ислам да намаҙ уҡый. Ейәнем өсөн бик һөйөнәм. Ул мәктәптә лә тик яҡшы билдәләргә өлгәшә. Азат улым да өйләнде, килен менән Әнисә исемле ҡыҙ үҫтерәләр.

Үҙемдең дингә килеүемә атайымдың вафаты сәбәпсе булды. Миңә 33 йәш ине. Уны юғалтыуҙан барлыҡҡа килгән бушлыҡты тултырырға тырышып, дин юлына нығлап аяҡ баҫтым. Дин ҡағиҙәләрен, намаҙ уҡыу тәртибен, ғәрәп графикаһын өйрәнеүҙе атайымдың әйтеп өлгөрмәгән васыяты, тип ҡабул иттем. Уның рухы шатлыҡ кисергәндер.

Атай кеше үҙе лә иманлы булһын, дин тотһон һәм балаларына ла шуны өйрәтһен, ҡанына һеңдерһен ине, тигән теләктәмен. Улдарым бәләкәй саҡта уларға бер нисә сүрә өйрәттем. Шулай ҙа улар ҙа дингә ихласланып китер, тип һис уйламай инем. Улдарым Ҡөрьән Кәримдең русса тәржемәһен компьютерҙан тыңлағандан һуң намаҙ уҡыу тәртибен өйрәнергә булып киттеләр. Тәүҙә иртәнге намаҙ тәртибен генә өйрәткәйнем, һуңынан уларҙың биш намаҙҙы ла ҡалдырмай уҡый башлауын белеп, бик ҡыуандым. Ата-әсә өсөн балаларының иманлы юлда йөрөүен белеүҙән дә ҙурыраҡ бәхет бармы икән?!

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.
Сибай ҡалаһы.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

Нәфсе бөтәбеҙҙә лә бар. Билдәле шағир Әнғәм Атнабаев әйтмешләй, ҡара икмәк булһа, аҡ етмәй; шыуышып йөрөгәндә - аяҡ етмәй; йәйәү йөрөгән саҡта - ат етмәй; аты булһа, машинаһы етмәй; осор өсөн ракета етмәй. Планета етмәй, Күк етмәй...

НӘФСЕНЕ СИКЛӘЙЕК,

тик, түҙәм, тип, ғәҙел ғәмәлдәрҙе сикләп ҡуймайыҡ

Иртән теште таҙартып, ауыҙҙы сайҡатыр өсөн бер сынаяҡ һыу етә. Ошо көндәрҙә биологик таҙартыу ҡоролмаларының береһендә авария булып, бер аҙ һыуһыҙ ултырғанда шуны аңланым. Юғиһә, теш таҙартҡанда буштан-бушҡа ағып тороп, күпме һыу әрәм-шәрәм ителә ине. Ҡулды-битте сайғансы ғына ла бер күнәктәй һыу ағыҙабыҙҙыр. Ә һауыт-һаба, кер йыуғанда нисек рәхәтләнәбеҙ. Һыуҙы һаҡсыл тотоңған илдәрҙә, мәҫәлән, Голландияла һауыт-һабаны бер ҡат ҡына йыуып, таҫтамал менән ҡороталар икән.

Эйе, һыуҙың ҡәҙере юҡ беҙҙә. Үнһыҙ йәшәп булмағанын, йәшәү сығанағы икәнлеген белһәк тә ҡәҙерләмәйбеҙ. Быйылғы ҡоролоҡ та, ғәҙәти булмаған эҫе йәй ҙә ҡурҡытманы беҙҙе. Тотош ауылдарҙың нисек һыуһыҙ интегеүен телевизорҙан күреп ғәжәп итһәк тә, һыуға мөнәсәбәбеҙ үҙгәрмәне. Сама тигән нәмәне белмәйбеҙ. Ә бит тәбиғәт-әсә биргән бөтә нәмәнең самаһы бар.

Сама тигәндән, Аллаһы Тәғәлә кеше мөмкинлектәрен дә сама менән сикләгән. Әгәр сикле булмаһа, кеше тормошо мәхшәргә әйләнер ине. Мәҫәлән, ишетеү мөмкинлеген нисек кәрәк, шулай ғына биргән. Үтә түбән тауыш көсөн ишетеү һәләте сикләнмәһә, башыбыҙҙағы сәстәребеҙ бер-береһенә ышҡылып сығарған тауыштан ғына ла аҡылдан шашыр хәлгә килер инек. Тәнебеҙ, мейебеҙ буйлап бер туҡтауһыҙ йөрөгән ҡандың тауышы ла тынғы бирмәҫ ине...

Күреү һәләтебеҙ ҙә сикле. Сикләнмәһә, күҙ сағылыуҙан, төҫтәр төрлөләргә күҙебеҙ нуры күптән ҡайтыр ине. Ә иртән торған түшәгебеҙгә башҡа бөтөнләй ятмаҫ инек. Төн сыҡҡансы ҡубып төшкән иҫке тире киҫәксәләрен ашарға кескәй генә ҡорттар мыжғып йыйыла икән унда. Беҙ, кешеләр, уларҙы күрмәйбеҙ, әлбиттә. Әгәр күреү һәләтебеҙ сикләнмәһә, беҙҙе оҙатып, яманнан һаҡлап йөрөүсе фәрештәләрҙе, йәки беҙҙе юлдан яҙҙырып, ҡоторып йөрөүсе шайтандарҙы ла күрер инек...

Башыбыҙ, уйыбыҙ етмәгәнде лә аң-зиһенебеҙ ҡабул итмәй. Был да үҙенә күрә сик, сама белдерә...

Тауыш сығарыу һәләте лә самалап бирелгән, әгәр ул сикле булмаһа, бөтәһе лә ишетһен өсөн кешеләр үҙендә булған бөтә тауыш көсөн тышҡа сығарыр ине...

Түҙемлек менән нәфсенең һәм изгелектең генә сиге юҡ. Сабырлыҡ тураһында боронғо бер риүәйәт: бер батша халыҡ түҙемлеген һынап ҡарарға була. Башта ул йылғанан һыу алғандары өсөн налым индерә. Халыҡ өндәшмәй. Һауа һулаған өсөн налым индерә, ә ил тыныс. Һәр сантиметр буй өсөн дә налым налына - түҙә халыҡ. Көнөнә ике тапҡырҙан артыҡ ашаһа, налым түләргә тейеш булалар. Халыҡ бер ашауға күсә. Батша үҙе сығырынан сыға, тағы ауырыраҡ налымдар уйлап сығарып, тормошҡа ашыра. Халыҡ өндәшмәй. Ахырҙа, ул ҙур йыйын йыя.

- Илдә ашарға етмәй, шуның өсөн иртәгә һәр унынсы кешене аҫабыҙ, - ти.

Шул саҡ берәү ҡул күтәрә. Әһә, тип уйлай батша, түҙемлектең дә сиге бар икән.

- Нимә менән риза түгелһең? - тип һорай ул кешенән батша.

- Барыһы менән дә ризамын, тик аҫыу өсөн бауҙы үҙебеҙ алып килергә тейешбеҙме? - тип һорай бәндә.

Бындай яуапты көтмәгән батша шундай халыҡ менән идара итеүенә ғәрләнеп, асыуынан ярһып, йөрәге шартлап үлә... Тимәк, түҙемлектең дә сиге булырға тейештер, күрәһең. Исмаһам, батшаларға, хакимдарға ил менән нисек идара итергә тейешлектәре тураһында белгертеп тороу өсөн унда-бында сабырлыҡ сигенә сығып, тауышты ишеттереп алырға кәрәктер...

Ә нәфсегә килгәндә, ул бөтәбеҙҙә лә бар. Ҡара икмәк булһа, аҡ етмәй... Беҙҙе бар итеүсе Илаһыбыҙ күреү, ишетеү, ашау, тауыш биреү һәм башҡа мөмкинлектәребеҙҙе сикләгәндә, ни өсөн нәфсебеҙгә лә сама билдәләмәне икән? Моғайын, был Уның беҙҙе һынау сараһылыр. Шулай уҡ Ул беҙҙе изгелек менән дә һынай икәнен онотмайыҡ. Уныһын иһә сикләмәгән. Изгелекте күпме булдыра алаһың - шул хәтлем эшләргә мөмкин. Яңы йылда нәфсегә сик ҡуйып, әммә ғәҙел, кәрәкле ғәмәлдәрҙе түҙемлек менән сикләмәй, изгелектәр ҡылып йәшәйексе, хөрмәтле милләттәштәрем!

Ләйсән СӘЛИХОВА.
Мәләүез ҡалаһы.

УЙЛЫҒА - УЙ

Сама тигәндән, Аллаһы Тәғәлә кеше мөмкинлектәрен дә сама менән сикләгән. Әгәр сикле булмаһа, кеше тормошо мәхшәргә әйләнер ине. Мәҫәлән, ишетеү мөмкинлеген нисек кәрәк, шулай ғына биргән. Үтә түбән тауыш көсөн ишетеү һәләте сикләнмәһә, башыбыҙҙағы сәстәребеҙ бер-береһенә ышҡылып сығарған тауыштан ғына ла аҡылдан шашыр хәлгә килер инек. Тәнебеҙ, мейебеҙ буйлап бер туҡтауһыҙ йөрөгән ҡандың тауышы ла тынғы бирмәҫ ине…

ШАҢДАУ

НИҢӘ УЙЛАНМАЙБЫҘ?

"Киске Өфө" гәзитенең дуҫы Урал Мостафиндың "Ғүмер атылған уҡ" исемле китабы сығыуға бик шатландым, ижади уңыштар, сәләмәтлек теләйем уға.

Уның гәзиттә баҫылған "Ябай кешенең... ҡатмарлы фекерҙәре" тигән мәҡәләләр циклын бик яратып уҡыныҡ. Күп нәмәгә ҡараш, баһа биреү юҡ кимәлендә икән беҙҙә, тиеп ҡуя инем уларҙы уҡығас. Эйе, беҙҙең күптәребеҙ уйлау, фекерләү тигәнгә күнекмәгән. Уйлай, фекерләй торған ағзалар эшмәкәрлеге ҡатып ҡалған, ахры, беҙҙә. Шулай булмаһа, тормошҡа фәлсәфәүи ҡарап, хәл-ваҡиғаларҙы анализлап, төрлө сетерекле хәлдәрҙе урап үтер инек тә бит...

Уйларға, фекерләргә этәргес кеүек тәьсир итте миңә Уралдың яҙмалары. Шулай уҡ "Ҡойон ҡойроғо оҙон..." тигән повесын да уҡып барҙым. Күп уйландым авторҙың яҙғандары тураһында. Гүзәл менән Батыргәрәйҙең әсе яҙмышы тетрәндерҙе. Ни эшләп Урал Мостафин Батыргәрәйҙе йәки башҡа берәй йәш башҡорт егетен Ислам ҡанундарына күндереп, иман юлына баҫтырманы икән, тип тә уйланым. Ниңә шул тиклем фажиғәле тамамланды һуң был әҫәр, тип, күңел килешмәйенсә, авторға үпкәләп тә ҡуйғандай булдым. Әммә... Авторҙың киләсәкте күҙаллауы шул тиклем көслө. Яҙмышыбыҙ Иван Ивановичтар ҡулында икән дәһә -башта шуны аңлай налмағанмын. Тышаулыбыҙ, иҫереклек ҡоршауындабыҙ, һаман да йоҡолабыҙ. Юлдар асылһа ла, ни иман, ни уҡыу яғынан алдыра алмайбыҙ. Бәйгә күнеккән эт шикелле бығауҙабыҙ. Шуны аңлатырға иткәндер, ахыры, автор. Был бит ысынбарлыҡ. Ҡулдарында форсаты булған үҙ башҡорттарыбыҙ үҙ халҡына ҡаршы эшләп йөрөгәс , кемгә таянаһың? Йә, Раббым, халҡыма ярҙамыңды нал, психологик ҡоршауҙан йәһәтерәк сығып, иманға, белемгә, уй-фекергә тейенеп, илем, халҡын, ерен юғалтмай, сәскә атһа ине. Ошо теләк әле бына Яңы йылды ҡаршы алған көндәрҙә лә баштан сыҡманы.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Шундай фәһемле повесҡа бер кем ҡарашын белдермәне. Был битарафлыҡмы, әллә уҡымайҙармы? Әйҙәгеҙ, гәзит уҡыусылар, әүҙем булайыҡ, фекерегеҙ мин аңламаған ерен асыҡлап аңлатыр, фәһем алырбыҙ. Урал Мостафинға ижади уңыштар, уйландырыр, тетрәндерер уйҙарға аҙыҡ биреп, халҡыбыҙға рухи терәк булыуын теләйем.

Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.

ҺАБАҠТАР

ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҡатмарлы фекерҙәре...

КҮҢЕЛ ЙӘЙҒОРОҒОҘ ИМЕН БУЛҺЫН!

Борон-борон заманда, кешеләр тәбиғәт менән татыу берлектә йәшәгән мәлдә, йыл миҙгелдәре үҙ ваҡытында килгән: яуыр мәлендә ҡар яуған, ҡыш бурандар ҡоторонған, йылы ямғыр үлән-үҫемлек, ағас тамырҙарын үҙ мәлендә йомарт һуғарған. Яҙ етһә, наҙлы Ҡояш нурҙарынан иҙерәп, бөтә донъя дәррәү ҡышҡы йоҡоһонан уянған, болондарҙа гөрләп сәскәләр үҫкән, ҡураларҙа мал-тыуар ишәйгән, урмандарҙа йәнлектәр бәрәсләгән, ҡыуаҡтарҙа ҡоштар һайраған, һыуҙа балыҡтар үрләгән - бөтә тереклек үрсергә, йәшәргә керешкән.

Шул хозур тәбиғәт ҡосағындағы бер ауылда бигерәк ҡомһоҙ, һаран кеше йәшәгән. Уны бөтәһе лә "ҡарун" тип атаған, ти. Ул кеше бәләкәй сағынан уҡ кеҫәһендәге бер нәмәһен дә иптәштәре менән тигеҙ бүлешмәгән, ә гел генә үҙ файҙаһына алыш-биреш иткән, хатта таш араһынан кеҫәртке, ҡамыш араһынан әрмәнде, яр башынан сиңерткә тотоп, ярҙағы ояларынан ҡарлуғас йомортҡалары йә себештәрен урлап һатып йөрөгән, ти. Ҙурая бирә, һарайҙарҙан йомортҡа, баҡсаларҙан алма, кишер, шалҡан урлап тотолоп, оятҡа ҡалыуы ла уны аҡылға ултыртмаған, алама холҡонан биҙҙермәгән. Ир ҡорона етеүгә эргә-тирәһендәге нәмәләрен һатып бөткәс, кәсеп итергә әйбере лә ҡалмаған, шуға уның ҡомһоҙ ҡарашы ямғырҙан һуң күҙҙәрҙең яуын алырҙай булып күкрәп ҡалҡып, бөтә йәмен кешеләргә тигеҙ өләшкән, сағыу төҫлө, саф йөҙлө йәйғорға төшкән. Тәүҙә ул йәйғорҙоң бер осона барып етеп, уны терһәгенә урап йә моҡсайына тыңҡыслап тултырып алып ҡайтырға теләгән, ләкин йәйғор унан йәшенеп өлгөргән. Йәйғор башҡа малайҙарҙы, ҡыҙҙарҙы үҙенә яҡын ебәргән, ҡайһы бер әрһеҙҙәр уны ашатлап сыҡҡан, ҡайһылары хатта төҫлө таҫмалары буйлап йүгерешеп йөрөү бәхетенә лә ирешкән, тип тә һөйләйҙәр. Ысындыр. Йәйғор тыуғандан алып кешеләр уға ҡарап һоҡланған, ата-әсәләренә, туғандарына, бала-сағаларына изге теләктәр теләгән, һәр ваҡыт йәйғор ҡалҡыуын тик шатлыҡлы хәлдәргә һәм донъя йөҙө яңырыуына юраған. Йәйғор тәүҙә, был кеше лә башҡалар кеүек минең менән шаярып уйнайҙыр, тип уйлаған һәм уны үҙенә яҡынлатҡан, хатта үҙенә ҡағылырға ла рөхсәт иткән. Шул ҡағылыуынан ул һөйкөмһөҙ кешенең яуыз ниәттәрен һиҙгән дә, уны башҡаса яҡын ебәрмәгән.

Ләкин ҡомһоҙ кеше алама ниәттәренән аңһат ҡына баш тартырға уйламаған да. Үҙенең генә хәленән килмәҫен белгәс, башҡаларҙы ялларға була ул. Ауылда, ни ғәжәптәндер, уның һүҙенә төшөүселәр табыла. Яуыз ҡотҡоһона эйәргән кешеләр үҙҙәренең бөтә тоҡомона зыян килтереүен аңламаған, күрәһең. Бер көндө йәйғор ҡалҡыуын һағалап тороп, уны йыуан-йыуан, оҙон-оҙон арҡандар менән ҡаяға бәйләп ҡуялар ҙа, төҫлө таҫмаларын һүтеп, йомғаҡтарға урай башлайҙар. Кискә ҡарай йәйғорҙо һүтеп тә бөтәләр, һәм йәйғор юҡҡа сыға. Кешеләрҙең ҡыш буйына йәйғор таҫмаларынан бәйләгән ойоҡбаш, бейәләйҙәрен ҡарун баҙарҙа һатып, ғәләмәт байып киткән, ти. Йыйған байлығын үҙенән дә ҡыҙғаныуҙан ауырып китеп, үлеп ҡалған, ти.

Шул мәлдән, ниндәй генә йылы, ҡойон ямғырҙар яуып үтһә лә, йәйғор күренмәгән. Кешеләр хәүефләнә башлаған, ҡомһоҙ ҡотҡоһона бирелеп, нимә ҡылғандарын аңлаған, үкенгән, ләкин һуң булған. Бер бәйелһеҙҙең яман холҡо, башҡаларҙың вайымһыҙлығы арҡаһында тәбиғи хозурлыҡтан яҙа донъя. Йомарт тәбиғәттең сағыу төҫтәре лә әрәм-шәрәм итеүҙән һүрелә, уйһыҙ исрафлауҙан юҡҡа сыға икән, тип аптырашҡан кешеләр. Ҡылған яуызлыҡтың зәхмәте әллә күпме ғүмерҙәрҙе яфалаған. Әллә күпме быуын балалары йәйғор күрмәй үҫкән. Ҡартатай, өләсәйҙәре, борон-борон заманда ямғырҙан һуң йөрәкте елкендереп, йәнде дәртләндереп йәйғор ҡалҡа торғайны, тип һөйләһә, ейәндәре аңламаған. Йәйғор тигән ғәжәп күренеш әкиәттәрҙә генә булалыр, тип уйлаған улар. Йәйғор йәмен, йәйғор күркәмлеген, йәйғор саф-лығын күреп үҫмәгән быуындарҙың холоҡтары ла боҙолған: кешеләр бер-береһен ҡыйырһытҡан, талаған, үҙ-ара һуғышҡан, алама ғәҙәттәргә еңел бирешкән, яуызлыҡ, яманлыҡҡа күнгән. Кешеләрҙең аламалығынан донъялар ҡара, һоро төҫкә ингән.

Аҙмы, күпме ваҡыт үткәндер, әммә ҡылған гонаһтарын аңлаған, таныған кешеләр табылған. Улар ер йөҙөнән ҡомһоҙлоҡто һөрөр өсөн сикһеҙ йомартлыҡ эшләргә уйлаған һәм бер заман һандыҡтарынан бөтә затлы әйберҙәрен, төҫлө кейем-һалым, түшәк-юрғандарын ҡоймаларына сығарып элә башлаған. Бәлки, тәбиғәт уларҙың йомартлығын, ихласлығын күреп, алама ҡылыҡтары өсөн ғәфү итер ҙә, йәйғорға - төҫтәрен, кешеләргә игелеклектәрен кире ҡайтарыр, тип өмөтләнгәндәр. Тәбиғәткә йәйғорҙо ҡайтарыу өсөн кешеләр оҙаҡ тырышҡан. Ҡырҡылып, ҡыйратылып, һулып, йәме бөткән баҡсаларға, туғайҙарға, болондарға үлән, сәскә, ҡыуаҡ, ағастар ултырта башлағандар. Яҙғыһын үләндәр, ҡыуаҡлыҡтар, ағастар матур-матур сәскә атҡан. Уларҙың йәменә арбалып, төрлө-төрлө төҫтәге ожмах ҡоштары йыйылған. Сағыу төҫтәрҙән тирә-йүн әкиәттәге кеүек биҙәлгән, донъяға йәм, ҡот, тәбиғәткә хозурлыҡ ҡайтҡан. Ул төҫтәр ямғыр тамсыларына яғылып, йырғанаҡтарҙан йылға, күлдәргә йыуылып төшкән, боҫҡа әүерелеп, Күккә күтәрелгән һәм Ергә ямғыр тамсылары булып яуып, бар донъяны биҙәгән. Кешеләр, изгелек илгә таралһын, тип, ямғырға бөтә матур теләктәрен әйткән, бер-береһенә игелек, итәғәтлек күрһәтергә вәғәҙә биргән, иң ҡәҙерле әйберҙәрен туғандары менән бүлешкән. Шул көндән башлап ямғырҙан һуң һүрән генә булһа ла йәйғор осо күренгән. Һауала, Ерҙә, Һыуҙа саф төҫтәр күбәйгән һайын, йәйғор ҙа элекке төҫөнә инеп, һынлана, һылыулана барған. Кешеләрҙең үҙгәреүен күргән һайын, йәйғор сағыуыраҡ төҫкә ингән, бәрәкәтле нурҙары бөтә донъяға таралған. Кешеләр ҙә йәйғорҙан элекке кеүек күңелдәренә сафлыҡ, йөҙҙәренә күркәмлек, тәндәренә сихәт алған, донъялары ла илһамланып, матурланып, яҡтырып киткән...

Уяулы-йоҡоло килеш уйланып ятам: ысынмы был хәл, әллә бушмы? Тышта буран, Яңы йыл етеп килә, йәйғор "тереме" икәнен ҡайҙан, кемдән белешергә? Күңелде шом баҫты, йөрәкһенә башланым. Иҫкә төштө! Көньяҡ ярымшарҙа йәй башланған мәл бит, унда йәйғор терелер әле! Тәбиғәт ҡото именлегенә өмөт тыуыуҙан йәнгә рәхәт булып китте. Яңы йыл байрамдарында йылы илдәргә сәфәр ҡылыу бәхетенә ирешкәндәр, ҡайтҡас, гәзит аша халыҡҡа хәбәр итһен ине, ул яҡтарҙың йәйғоро именме икән?

Йәйғор - йәй ҡуры, йәй ғорурлығы! Ҡурһыҙ ҡымыҙ булмаған кеүек, йәйғорһоҙ йәйҙең ҡото юҡ. Ғүмерҙәрендә йән ҡурын, йән яғымлығын, йән сафлығын һаҡлай алғандар, игелеккә рәхмәтле була белгәндәр - иң бәхетле кешеләр!

Хөрмәтле милләттәштәр, йәйғорҙа нәҙек кенә лә ҡара таҫма юҡ! Яңы йылда һеҙҙең ғәзиз йәнегеҙгә ептәй нәҙек ҡара һыҙат та, әнә осондай ҡара тап та яғылмаһын! Күңел йәйғороғоҙ сағыу хистәргә, саф ниәттәргә бай һәм йомарт булһын! Амин.

УЙЛЫҒА - УЙ

Аҙмы, күпме ваҡыт үткәндер, әммә ҡылған гонаһтарын аңлаған, таныған кешеләр табылған. Улар ер йөҙөнән ҡомһоҙлоҡто һөрөр өсөн сикһеҙ йомартлыҡ эшләргә уйлаған һәм бер заман һандыҡтарынан бөтә затлы әйберҙәрен, төҫлө кейем-һалым, түшәк-юрғандарын ҡоймаларына сығарып элә башлаған. Бәлки, тәбиғәт уларҙың йомартлығын, ихласлығын күреп, алама ҡылыҡтары өсөн ғәфү итер ҙә, йәйғорға - төҫтәрен, кешеләргә игелеклектәрен кире ҡайтарыр, тип өмөтләнгәндәр. Тәбиғәткә йәйғорҙо ҡайтарыу өсөн кешеләр оҙаҡ тырышҡан.

Хыялланып ултырғанда бер көн,
Бейектәргә осоп китте уй.
Уйҙар менгән ергә етер өсөн
Ҡайҙан ғына булһын инде буй.
Бәндәләрҙән азат ерҙәрҙә лә,
Хөкөм һөрмәҫ ике йөҙлөлөк.
Зиһенлеләр - бөйөк, бейектәрҙә
Йәшәмәйҙер иҙеп, иҙелеп.
Менеп кенә күрер кәрәк ине
Йыһан нисек донъя ҡорғанын,
Ят йәндәрҙең бер-береһе өсөн
Бәгерҙәре өҙөлөп торғанын.
Бейегерәк булыу кәрәк ине,
Кәрәк инде, дөрөҫ әйтә уй!
Йыһандағы аңға тиңләшергә
Етмәҫ инде, етмәҫ беҙҙең буй.

Урал МОСТАФИН.

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР

БАШҠОРТ ХАН

(XII быуат)

Уҙған быуаттың республикаға ҙәллылыҡ яуланған 90-сы йылдары милләттәштәребеҙҙе асылына ҡайтарыу, үҙаңын уятыу, милли рухын күтәреү йәһәтенән дә тәүге аҙымдарҙың береһе булды. Тап 90-сы йылдар һуңында Рәшит Шәкүр үҙенең "Арҙаҡлы башҡорттар" тигән ғилми-биографик очерктар йыйынтығын нәшер итеп, билдәле милләттәштәребеҙҙең исемен тағы бер тапҡыр халҡыбыҙҙың хәтеренә һалып ҡуйҙы. "Илдең, милләттең рухи көсөн, ҡеүәтен, кешелек донъяһында тотҡан урынын иң элек уның бөйөк кешеләре, оло аҡыл эйәләре, илем, халҡым тип йәшәгән ҡаһарман рухлы заттары билдәләй. Ә халыҡ үҙенең данлыҡлы улдарын һәм ҡыҙҙарын белергә, улар менән ғорурланырға, һәр быуын улар өлгөһөндә тәрбиәләнеп, фәһем алып үҫергә тейеш", - тип яҙа автор. Был исемдәр ҡабат онотолоуға дусар булмаһын, тип иҫкәртеп, улар тураһында мәғлүмәттә ҡыҫҡартып, гәзит биттәрендә тағы бер иҫкә төшөрөп китеү яҙыҡ булмаҫ, тинек.

Башҡорт хан - рус кенәзлектәренең сәйәси ваҡиғаларында әүҙем ҡатнашыусы ҡыпсаҡ ханы. Уның исеме рус йылъяҙмаларында бер нисә тапҡыр иҫкә алына. СЫҒЫШЫ буйынса ул Аҙау һәм Ҡара диңгеҙҙәр ҡушылдығында йәшәгән ишле ҡыпсаҡ ырыуынан; унда Урал башҡорттары менән тамырҙаш башҡа ҡәбиләләр һәм ырыуҙар ҙа ингән. Башҡорт ханы урҙаһының 20 мең кешеһе булған. XII быуаттың 50-се йылдарында Башҡорт Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйында иң көслө ҡыпсаҡ ханына әүерелә. 1151 йылда хан Ростов-Суздаль кенәзе Юрий Долгорукий, Чернигов кенәздәре Изяслав һәм Владимир Давыдовичтар менән берлектә бөйөк Киев кенәзе Изяслав Мстиславичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан. 1151 йылдың 5 майында Изяслав һәм Юрий ғәскәрҙәре Рутец йылғаһы янында бәрелешә. Долгорукий полктары үҙҙәренең һан яғынан өҫтөнлөгөн файҙалана алмай. Яугирҙарҙың күбеһе болғансыҡ Рутец йылғаһында батып үлә, бер өлөшө әсир төшә. Владимир Давыдович һәләк була, ә ҡатыны (йылъяҙмала исеме юҡ.- **Авт.**) Башҡорт ханына кейәүгә сыға.

1157 йылда бөйөк Киев кенәзе Юрий Долгорукий вафат булып ҡалғандан һуң, уның урынына Изяслав Давыдович Черниговский килгән. Ул бай Галич кенәзлеген баҫып алыу уйы менән яна. Тик яуға йыйынған арала Ярослав Галич менән Мстислав Волынскийҙың берләшкән көстәре Киевҡа яҡынлай һәм Белгородты (хәҙер Киев өлкәһенең Белгородка ауылы) баҫып ала. Изяслав, дошмандарҙың көсө байтаҡ икәнен тойоп алғас, туғаны Святослав Владимировичты ҡыпсаҡтарға ярҙам һорарға ебәрә. Башҡорт үгәй улы Изяславҡа ярҙамға ашыға. 20 мең башҡорт яугиры Белгородҡа килгәндә ҡала яуланған була. Башта Изяслав еңеүгә ышанһа ла, уның ғәскәре сафында Рускә хеҙмәт итеүсе байтаҡ төрки халыҡтары дошман яғына сыға. Изяслав ҡаса, ә Башҡорт Юрьевҡа (хәҙерге Киев өлкәһендәге Белая Церковь ҡалаһы) сигенә.

1160 йылда Башҡорттоң Изяслав менән Чернигов ҡалаһына һөжүмдә ҡатнашлығына ишара яһала: тарихта был ваҡиғаға ҡарата "ҡыпсаҡтар шундай эш эшләргә, ауылдарҙы яндырырға, кешеләрҙе ҡулға алырға өлгөрҙө" тигән юлдар бар.Тиҙҙән Изяслав менән Башҡорт хан Смоленск ерҙәренә үтеп ингән һәм бик күп ерҙәрҙе ҡола яланға әйләндергән. Хан ғәскәре 10 мендән ашыу кешене алып китә һәм мул табышҡа юлыға. 1161 йылдың февралендә Башҡорт Изяслав Давыдовичҡа Киевты алырға ярҙам итә. Тик һуңынан улар уңышһыҙлыҡҡа осрай. Ҡаты яраланған Изяслав Киев монастырында вафат була.

XII быуаттың 60-70-се йылдарында рус кенәзлектәренең ҡыпсаҡтарға ҡаршы ойошторған һәләкәтле яуҙары Башҡорт урҙаһының да көсөн ныҡ ҡына ҡаҡшата. Бынан һуң Башҡорт көнбайыш ҡыпсаҡ ханы Кәбәктең вассалы булып китә һәм 1184 йылда рус кенәздәренең ҡыпсаҡтар менән һуғышында ҡатнаша. 1184 йылдың 30 июнендә Башҡорт Кәбәк хан менән бергә әсиргә эләгә һәм (В. Н. Татищевтың мәғлүмәттәре буйынса.- Авт.) зур түләү аҡсаһында ҡотҡарыла. Рус йылъяҙмаларында артабан Башҡорт тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Уның ҡыпсаҡтарҙың Ҡоншаҡ хан етәкселегендәге Рускә ҡаршы яуында (1185 йыл, "Слово о полку Игореве".- **Авт.**) ҡатнашыуы йәки Уралға күсеүе ихтимал.

Рәшит ШӘКҮР.
"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.

✓ *Башҡорт балаларының һаман да шул смешариктарға конкурент булырлыҡ үҙ геройы булмауы эште бошора. Бер яҡтан, беҙ үҙебеҙҙең балалар өсөн бер нисә герой булдырҙыҡ та кеүек: балалар Тыртыр менән Семәркәйҙе бик ярата.*

Башҡортостан юлдаш телеканалын "Тамыр" студияһы тапшырыуҙарынан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ, тимәм, яңылышмам, моғайын. Уның сағыу, матур сығыштарын балалар ғына түгел, ололар ҙа яратып ҡарай. Үтеп барған йылда "Тамыр"ҙар өсөн айырыуса мөһим һәм әһәмиәтле ваҡиға булды. Хәҙер беҙ студияның сағыу, йәнле тапшырыуҙарын иртәнге 7-нән башлап киске 11-гә тиклем айырым "Тамыр" балалар һәм үсмерҙәр телеканалынан ҡарай аласаҡбыҙ. Ҡасандыр "Башҡортостан" радиоһында "Иләү" тапшырыуынан башланып, һуңынан студияға әүерелеп, хәҙер инде айырым канал булып киткән "Тамыр" тураһында уның директоры Гөлназ ҠОЛЊАРИНА һөйләй:

САБЫЙҘАРЫБЫҘ

"Иләү"ҙән юл алып…

Рәсәй киңлегендә балалар телевидениеһы күп сығым талап иткән, реклама таҡмағына бейемәгән, аҡса килтермәгән кәрәкһеҙ өлкә булып һаналған заманда - 90-сы йылдарҙа тыуҙы "Тамыр". Бөтә үҙәк каналдарға бер "Спокойной ночи, малыши!" ҡалғайны ул саҡта. Ә Башҡортостанда шул мәлдә теләп, көтөп алынған сабый кеүек "Тамыр" донъяға килде. "Сәңгелдәк"тең сатнатып башҡортса һөйләгән балалары халыҡ геройҙарына әйләнде. 3-5 йәшлек балаларҙың телевизион тапшырыу алып барыуы - "Тамыр"ҙы асҡан Луиза Азамат ҡыҙының ҙур табышы ул.

"Сәңгелдәк", "Сулпылар"ға ун туғыҙынсы йәш китте. Телевизион эфир өсөн был бик оҙон ғүмер. Телевидение өлкәһендә талаптар, сифат үлсәмдәре әйләнгән һайын үҙгәреп тора. Беҙгә лә үҙгәрергә, кисә генә бик шәп тойолған алымдарҙан баш тартып, яңыһын уйлап табырға тура килә. Шунһыҙ булмай. Телевизор ҡумтаһы уртаҡ. Тамашасы ҡулында пульт та берәү. Арбанан төшөп ҡалмаҫ өсөн маҡсаттар ҙур, уйҙар яҡты, йөрәк ҡайнар, башта тәртип булырға тейеш, тип шаяртабыҙ үҙара. Ике йыл элек кенә "Тамыр"ҙың айырым канал булыуы әкиәт кеүек тойола ине. Былтыр телевидениены тотош цифровизация көтә тип ҡурҡыта башлағас, балалар каналы төҙөргә тотонғанды һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Аптырап торһаң, әлеге лә баяғы арбанан төшөп ҡалыуың бар. Өҫтәүенә, "Тамыр"ҙа егәрле, яуаплы, нур сәсеп торған йәштәр күбәйҙе. Уларға майҙандарҙың иркене, талаптарҙың юғарыһы, ижадтың ҙурырағы кәрәк икәне һиҙелә башланы. Йәш ҡешегә йөктө өҫтәп тормаһаң, һүлпәнәйә, һүрелә башлай бит.

Мортаза Ғөбәйҙулла улына ниәтебеҙҙе дәлилләп хат яҙҙыҡ. Ул тәҡдимебеҙҙе күтәреп алды. Үтеп барған йылдың февралендә "Тамыр" балалар-үсмерҙәр каналын төҙөү һәм эфирға сығарыу хаҡында Хөкүмәт ҡарары сыҡты, ҡоролмалар алыр өсөн аҡса бүленде. Камера һәм монтажҡаны "Башнефть" алып бирҙе. Йәйге селләлә сюжеттар төшөрә башланыҡ. Уға тиклем бик күп эҙләндек. Каналдың дөйөм концепцияһын, биҙәлешен ҡағыҙҙа, эскиздарҙа ҡабат-ҡабат эшләнек, бәхәсләштек. Рәсәйҙең "Теленяня", "Бибигон", "Радость моя", сит ил балалар каналдарын ҡараныҡ, нығлап өйрәндек. Ыңғай һәм кире яҡтарын билдәләнек, үҙебеҙҙең хәлде, сығымдарҙы самаланыҡ. Барыһын да өйрәндек тә үҙебеҙсә эшләнек. Туған телгә, туған йолаларға нигеҙләнгән тәрбиә - иң тәбиғи, бала күңеленә ауаздаш тәрбиә. "Тамыр" үҙ тәжрибәһендә быны иҫбатланы инде. Мәрйәм Бураҡаеваның "күңел теле" тигән төшөнсәһе ысынлап та бар ул. Беҙ каналыбыҙҙа балаға уның күңел телендә өндәшәбеҙ. Тапшырыуҙарҙың заставкалары, декорациялары милли орнамент нигеҙендә эшләнгән. Бәләкәс кенә биҙәктәр ҙә, моң-тауыштар ҙа осраҡлы түгел. Һәр деталгә мәғәнә, кинәйә һалырға тырыштыҡ. Каналдың логотибын оҙаҡ эҙләнек. Рәссамыбыҙ Арыҫлан Бикбаев эскиздарҙы тиҫтәләп төшөргәндер. Боронғо

фияһы сағыла беҙҙең каналда. Һәр хәлдә, беҙ шуға ынтылабыҙ.

Башҡорт балаһының үҙ геройы булырға тейеш

Бөгөн "Тамыр" каналының "Бауырһаҡ", "Шәп арба", "Әкиәт китабы", "Шатлыҡ йыры", "ƏЮЯ ҡаласығы", "Борсаҡ", "Тау-тау хәбәр" тигән яңы тапшырыуҙары эфирға сыға башланы. Тиҙҙән уларға "Фәләмәт донъя" өҫтәләсәк. Элекке тапшырыуҙарыбыҙҙа төп алып барыусылар балалар ине. Яңы тапшырыуҙарҙа төп көс өлкән алып барыусыларға төшәсәк. Хәҙерге заманда атай-әсәй эштә, өләсәй-олатай йыраҡта булғанда, сабый өлкәндәр менән аралашыуға мохтаж. Ата-әсәнең ваҡыты юҡ, ә телевизорҙың һеҙҙең бала өсөн һәр саҡ ваҡыты етерлек, каналдары һорауҙарына яуап бирә, хуплай, күңелен үҫтерә. Бөгөн балалар каналы шуның өсөн кәрәк тә.

Беҙ Чебурашка, Незнайка, Буратиноларҙың донъяһында, улар өсөн көйөнөп-һөйөнөп үҫтек. Бөгөнгө балалар Лунтик, Смешарик тип иҫтәре китә. Таҫтамалдарҙа ла, кәнфиттәрҙә лә, крем-набындарҙа ла смешарик-лунтиктар. Мин быны насар тимәйем. Заманыбыҙҙың балалар геройҙары яһау технологияһының хәтәр үҫешенә һоҡланам хатта. Тик барыбер ниҙер күңелде ҡыра. Көләкәс Лунтиктың финанс магнатҡа әйләнеүе лә түгел. Аҡса эшләй беләләр икән, эшләһендәр әйҙә. Башҡорт балаларының һаман да шул смешариктарға конкурент булырлыҡ үҙ геройы булмауы эште бошора. Бер яҡтан, беҙ үҙебеҙҙең балалар өсөн бер нисә герой булдырҙыҡ та кеүек: балалар Тыртыр менән Семәркәйҙе бик ярата. Уларҙың ҡурсағын эшләргә, диск-китаптарын сығарырға тип күптән ниәтләйбеҙ. Дәрт бар ҙа, дарман етеңкерәмәй. Ҙурҙан ҡубып эшләйем тиһәң, был үҙе бер айырым сәнәғәт. Шулай ҙа эшләргә кәрәк.

Балалар өсөн халыҡ әкиәттәренә нигеҙләнеп төшөрөлгән башҡорт тамғаһында туҡталдыҡ. Ул ҡояш та, йүгергән, туп атҡан бала ла, һыбай малай ҙа булып тойола. Балаларға ла, арҙаҡлы шәхестәргә лә күрһәттек. Юлай Ғәйнетдиновтың ҡыуаныуы күҙ алдында. "Был бит ҡояш, ут бөрсәһе, хәрәкәт!" тине ул күҙ ташлау менән. Халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашы, тарихы, холоҡ-фиғеле, этнографияһы, бихисап. Беҙ көнкүреш мәшәкәттәре менән мәж килгән арала, телевизор беҙҙең баланы рәхәтләнеп үҙенсә тәрбиәләй. "Тамыр" каналы бала күңелен тәрбиәләүҙә ата-әсәгә ярҙамсы булырға ынтыла. Экранға баҡҡан балаға беҙҙең алып барыусы ағай-апайҙар ябай һәм ҡыҙыҡлы итеп, башҡорт телендә донъяны танып-белергә ярҙам итә, беҙҙең балалар Тыртыр менән Семәркәйҙе бик ярата. Уларҙың ҡурсағын эшләргә, диск-китаптарын сығарырға тип күптән ниәтләйбеҙ. Дәрт бар ҙа, дарман етеңкерәмәй. Ҙурҙан ҡубып эшләйем тиһәң, был үҙе бер айырым сәнәғәт. Шулай ҙа эшләргә кәрәк.

Балалар өсөн халыҡ әкиәттәренә нигеҙләнеп төшөрөлгән башҡа телдәрҙе өйрәнеүе, киреһенсә, еңелерәк буласаҡ. Туған тел - ул нигеҙ, күңел теле. Нигеҙ ныҡлы булһа, ҡатлы-ҡатлы йорттар төҙөп була. Туған йырҙарыбыҙҙы көйләп, яғымлы һүҙҙәребеҙҙе шыбырлап, баланы хатта дауалап була. Туған тел - Хоҙай биргән бүләк, һәр кешенең күңеленә, булмышына һалынған. Ә кешегә нишләптер булғандың ҡәҙерен белмәү хас.

күңел телендә

йәнһүрәттәр яһарға теләк ҙур. Мультипликация - ныҡ сығымлы тармаҡ. Ә эшләге килә. Бала зиһененә йәнһүрәттең тәьҫире ныҡ көслө. Тапшырыуҙар ише генә түгел. Шуға беҙ йәнһүрәттәр эшләп ҡарарға булдыҡ. Сериал итеп күҙаллайбыҙ. Төп геройҙарын билдәләгәнбеҙ. Эскиздар, сценарийҙар өҫтөндә эшләйбеҙ. Киләһе йылда тәүге эштәребеҙҙе күрһәтә алырбыҙ, тип ышанам.

Бала үҙ телендә фекерләһен

Ҡайһы бер ата-әсәләр баланың башын бутамайым, тип башҡортса өйрәтмәй, балаһы менән рус телендә аралаша. Бындай наҙанлыҡҡа иҫем китә. Бала бер юлы өс-дүрт телде лә һеңдерә, тик теле туған телендә асылырға тейеш. Әгәр бала үҙ телендә һөйләшә башлаһа, башҡа телдәрҙе өйрәнеүе, киреһенсә, еңелерәк буласаҡ. Туған тел - ул нигеҙ, күңел теле. Нигеҙ ныҡлы булһа, ҡатлы-ҡатлы йорттар төҙөп була. Туған йырҙарыбыҙҙы көйләп, яғымлы һүҙҙәребеҙҙе шыбырлап, баланы хатта дауалап була. Туған тел - Хоҙай биргән бүләк, һәр кешенең күңеленә, булмышына һалынған. Ә кешегә нишләптер булғандың ҡәҙерен белмәү хас.

Ҡайһы бер ата-әсәләр баланың башын бутамайым, тип башҡортса өйрәтмәй, балаһы менән рус телендә аралаша. Бындай наҙанлыҡҡа иҫем китә. Бала бер юлы өс-дүрт телде лә һеңдерә, тик теле туған телендә асылырға тейеш. Әгәр бала үҙ телендә һөйләшә башлаһа, башҡа телдәрҙе өйрәнеүе, киреһенсә, еңелерәк буласаҡ. Туған тел - ул нигеҙ, күңел теле. Нигеҙ ныҡлы булһа, ҡатлы-ҡатлы йорттар төҙөп була. Туған йырҙарыбыҙҙы көйләп, яғымлы һүҙҙәребеҙҙе шыбырлап, баланы хатта дауалап була. Туған тел - Хоҙай биргән бүләк, һәр кешенең күңеленә, булмышына һалынған. Ә кешегә нишләптер булғандың ҡәҙерен белмәү хас. Башҡа телдәрҙе өйрәнеүе, киреһенсә, еңелерәк буласаҡ. Туған тел - ул нигеҙ, күңел теле. Нигеҙ ныҡлы булһа, ҡатлы-ҡатлы йорттар төҙөп була. Туған йырҙарыбыҙҙы көйләп, яғымлы һүҙҙәребеҙҙе шыбырлап, баланы хатта дауалап була. Туған тел - Хоҙай биргән бүләк, һәр кешенең күңеленә, булмышына һалынған. Ә кешегә нишләптер булғандың ҡәҙерен белмәү хас.

ЯҢЫ КАНАЛДА...

һөйләшәсәк

Хатта хайуан да балаһы ҡояш аҫтында үҙ урынын табып йәшәһен, ризыҡлы булһын, тоҡомон дауам итһен өсөн бар белгәнен балаһына һалырға тырыша. Ә беҙ ғәзиз балабыҙға үҙебеҙҙең иң ҙур хазинабыҙ - телебеҙҙе лә өйрәтмәйбеҙ. Тел йәшәһен өсөн ул телдә һөйләшергә генә кәрәк. Әгәр беҙ балаларыбыҙ менән үҙ телебеҙҙә һөйләшмәйбеҙ икән, тимәк, беҙ үҙ телебеҙҙе үлтерәбеҙ.

Ҡалала балаға туған телле мөхит булдырыу ҡатмарлы ғына. Тик теләк булһа, уңайын сығарып була. "Латифа" башҡорт һынлы сәнғәт студияһы хаҡында ишеткәс, интернеттан адрестарын табып, Урал улымды шунда йөрөтә башланым. Йәш кенә ата-әсәләр, ҡайһы берҙәре үҙҙәре лә башҡортса ауырыраҡ һөйләшә, балаларын ихлас йөрөтә бында. Килеп инеү менән үҙебеҙҙең рух тойола унда, ҡурай моңо, аҫалы балаҫтар, семәрләп-һырлап эшләнгән һауыттар. Улыма бик оҡшай, атлығып тора. Ә ҡыҙым Гәлсәр менән ике-өс йәшенән үк башҡорт спектаклдәренә, "Сыңрау торна", "Арҡайым" балеттарына, арыуыраҡ концерттарға йөрөнөк. Пианинола ла башҡорт композиторҙары әҫәрҙәрен айырыуса яратып өйрәнә ул.

Бала күңеле - елкән

Бала "һин насар булма, яҡшы бул" тигәндән генә тәрбиәле булып китмәй. Насар менән яҡшы хаҡында уның үҙ фәлсәфәһе бар. Өлкән кешенең төшөнөргә зиһене, сабырлығы етһә, баланың фекер йөрөтөүенән күп нәмәгә өйрәнә ала. Беҙҙең "Тамыр" тапшырыуҙарына ноҡот уҡыу хас түгел. Балалар донъяға йылмайып-көлөп баға. Шаярыу, уйнау - бала өсөн иң тәбиғи, аңлайышлы шөғөл. Шуға бер нәмәне етди итеп ҡырҡ тапҡыр ҡабатлауға ҡарағанда, мәрәкә, уйын-көлкө аша еткерһәң, тулыраҡ ҡабул ителәсәк. Шәхси өлгө тигән бик мөһим, нәтижәле нәмәне лә иҫтә тоторға кәрәк. "Тамыр"ҙың тапшырыуҙарын да ихлас, шаян, күп белгән, кескәй тамашасыларға өлгө булырлыҡ ағай-апайҙар алып бара. Хәҙерге заман балалары әкиәт тыңламай, тигәнде ишеткән бар. Һөйләүсе юҡ - шуға тыңламай. Беҙҙең "Әкиәт китабы"нда Ләйсән Солтанғолова башҡорт халыҡ әкиәттәрен еренә еткереп һөйләй, балалар ихластан тыңлай, әкиәтте аңларға тырышып, һорауҙар бирә, үҙҙәре күргән-белгән менән сағыштырып, һабаҡ ала.

"Бауырһаҡ"та Ләйсән Мәзитова шаярып-көлөп кенә балаларҙы файҙалы, тимәк, тәмле аҙыҡ ашарға күндерә. Эш араһында ғына аҙыҡ-түлек хаҡында әллә күпме ҡыҙыҡлы мәғлүмәт биреп ташлай. Малайҙар өсөн айырым тапшырыуыбыҙ бар. "Шәп арба" тип атала. Оҫта ҡуллы Фәрхәт ағай Ғәйнетдинов ҡабаланмай ғына кәрәкһеҙ нәмәләрҙе кәрәклегә әйләндерә. Бармаҡҡа сүкеш һикерһә лә иламаҫҡа, эште ослап ҡуйырға саҡыра. "Һеҙ бит малайҙар - буласаҡ атайҙар", ти. "Шатлыҡ йыры"нда Сәлимә Исламова "Тамыр" йыр ансамбле менән телевизор ҡараусы бәләкәстәргә йыр өйрәтә. Башта ҡыҙыҡ гимнастика яһайҙар, шунан йырҙың мәғәнәһенә, көйҙөң характерына төшөнәләр, аҙаҡ бергәләшеп йырлайҙар. "ӘЮЯ ҡаласығы"н мөхәррирebeҙ Гөлназ Ишемғолова яҙа. Алып барыусылары логопед, артистар һәм балалар өн-хәреф донъяһына саҡыра. Еңел генә итеп уҡырға, һөйләмдәр төҙөргә өйрәнәләр. "Борсаҡ"та Лилиә Дауытова уйнап-бейеп, көлкөлө һанашмаҡтар әйтеп, гимнастика эшләтә. бейеүселәр килде. Бүләктәр алып, түбәләре күккә тейеп, ҡыуаныстан күңелдәре үҫеп ҡайтып киттеләр. Ең һыҙғанып Яңы йыл әкиәтен әҙерләйбеҙ. "Батыр Балҡас" тип атаныҡ. Күңелле лә, фәһемле лә килеп сыҡмаҡсы.

Беҙ Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә эшләгән балалар телестудиялары менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Фестивалдәрҙә аралашабыҙ. Рәсәй киңлегендә "Тамыр"ҙың тапшырыуҙары иң көслөләрҙән һанала. Халыҡ-ара "Включайся!", Бөтә Рәсәй "Бибигон иле" фестивалдәрендә төп призdар - башҡорт тапшырыуҙарыныҡы. Был фестивалдәрҙең финалына тик беҙ генә үҙебеҙҙең телдә эшләнгән тапшырыуҙар менән барып етәбеҙ. Башҡа бөтә программалар ҙа рус телендә. Айырым канал асабыҙ, тигәс, аһ ителәр. Рәсәйҙең бер төбәгендә лә бындай күренеш юҡ. Федераль каналдарҙы әйтмәйем, уларҙың үҙ үҫеш юлы. Киләсәктә башҡа төбәктәр менән тапшырыуҙар алышыуҙы ла яйға һалырбыҙ, тибеҙ.

"Тамыр" каналында сыҡҡан тапшырыуҙарҙы дискыларға туплап, биҙәп, һатыуға сығарырға ла ниәтебеҙ бар. Кабель телевидениеһын Башҡортостандың бөтә төбәктәре лә ҡабул итмәй. Республиканан ситтә лә тамашасыларыбыҙ бар бит әле. Шул тиклем көс түгеп, күңел һалып эшләнгән тапшырыуҙарыбыҙ мөмкин тиклем күберәк балаға барып етһен өсөн кәрәк был эш.

Ә бөгөн кескәйҙәр "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр каналын "Уфанет" һәм "Башинформ" кабель селтәрҙәрендә цифралы пакетта ҡарай ала. Яҡын арала уларға "Кристалл" да ҡушыласаҡ. БСТ каналында "Тамыр" тапшырыуҙарының һаны күпкә артты. Был инде шулай уҡ республикабыҙҙа һәм унан ситтә йәшәгән башҡорт балалары үҙ телендә заманса сағыу, дәртле, рухлы тапшырыуҙарҙы ҡарай алһын өсөн эшләнде. Ата-әсәләр ҙә балаһының ниндәй тапшырыу ҡарауы менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып торһон ине. "Тамыр" каналын ҡуйып,



ҡайһы бер тапшырыуҙарҙы бергәләп ҡарап, мәғәнәһен аңлатып, хуплап ебәрһендәр, бер үҙе булғанда ҡараған башҡорт тапшырыуҙарын һөйләп биреүен һораһындар ине. Балаға өҫтөнә ишелеп барған буталсыҡ мәғлүмәт донъяһында бик ауыр. Бала күңеле - елкән, тибеҙ. Әгәр уны иң яҡын кешеләре саф тулҡындарға йүнәлтеп торһа, күңеле бөтөн, арҡаһы ныҡ шәхестәр үҫеп сығасаҡ. Ә беҙгә шул кәрәк тә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Рәсәй киңлегендә генә түгел, ә сит илдәрҙә лә ҙур танылыу алған "Тамыр" студияһының айырым канал булып сығыуы, ысынлап та, халҡыбыҙ өсөн оло ҡыуаныс. Кескәй сағында йөрәгенә үҙ моңон, үҙ көйөн һеңдергән, күңелен тылсымлы әкиәттәр, бишек йырҙары менән үҫтергән сабыйҙарыбыҙ киләсәктә илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың лайыҡлы ул-ҡыҙҙары булып үҫеп етәсәк. Амин, шулай булһын!

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.

✓ Бүре балаһы алып китеп аҙаштырмаһа, ҡыҙы менән бер ҡасан да осрашмаҫтар ине бит. Эйе, шунан алып Янғол балаһын үҙе янынан ебәрмәне. Атаһынан бөтән һәр кем өсөн ул - Бүребай.

Әммә йылғыр Бүребай уның ҡулынан һыпырылып сыҡты.

- Мин сәнжәр!

- Әле һин бер кем дә түгел. Һин ҡоралһыҙ! Әсиргә төшкән бер байғош ҡына! - тине Хөсәйен көр тауыш менән.

- Нимә?..

- Һинең яның еңел икән! - Хөсәйен ҡулына төшөргән янға үҙенең уғын ҡуйҙы ла ҡыҙға төбәне. Ҡоралдарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан Бүребай яман итеп ҡысҡырып ебәрҙе.

- Һинең менән эт тә дуҫ булмаҫ!

- Күрҙеңме, мин асығауыҙ түгел! Кәләшем булаңмы? Яусы ебәрәм.

- Яусы кем була?

-Атаң-әсәңдән һора! Нишләп улар һиңә бер нәмә лә аңлатмаған?

Бүребай күҙен ағын әйләндереп ҡараны.

- Бей улы, һин бит мин белгәндең яртыһын да белмәйһең!.. Ошо ерҙең һулышын тоям, йәнлек-ҡоштоң телен беләм! Ҡоралымдың яҙа атмаҫын беләм!

Хөсәйен өндәшмәүҙе хуп күрҙе. Ҡыҙ кеше менән бәхәс ҡороу урынһыҙ. Улар тау һыртына килеп сыҡты.

- Бына беҙ Ҡәнифә юлына килеп сыҡтыҡ!

- Күрәһеңме, оло юл беҙҙе берләштерҙе, - Хөсәйен ҡыҙға кинәйәле ҡараш ташланы. - Ҡайһы ғына юлға сыҡһаҡ та, беҙ гел бергә булырбыҙ.

- Гел генә, имеш... Һе-һе... - Бүребай уны үсекләп көлә.

- Йорт һалырбыҙ. Мал үрсетербеҙ. Йәйләүгә сығырбыҙ, балалар үҫтерербеҙ. Ауға гел бергә йөрөрбөҙ. Балыҡҡа! Шамбы тота беләһеңме? Кем күберәк эләктерер!

Бүребай Хөсәйенгә аптырап ҡарап алды, егет иһә йылмайҙы. Ҡыҙға яҡыныраҡ килде, түбәтәйенә эләккән үләнде алып ташланы. Шул саҡ хатта тегенең башынан һыйпағыһы килде. Шуны һиҙептер, Бүребай ситкә ялтарҙы. Үҙ ҡылығына үҙе аптыранымы, көләмһөрәне.

- Уф... Ҡурҡтымсы...

- Бер ҡасан да хаслыҡ ҡыла торғаным юҡ, Аҡбүре.

- Юҡ, унан түгел!.. Мына нисек әйтергә... Һинән әллә ниндәй ялҡын һирпелә, хатта йөрәгем дөп-дөп һуҡты. Ә мин бит ҡурҡаҡтарҙан түгел.

- Был ҡурҡаҡлыҡ түгел.

- Ә нимә?

-Был бөтөнләй икенсе... икенсе... Һин бит беләһең, минең йөрәгемдә тик яҡшылыҡ ҡына!

Бүребай атына менде лә ары сапты.

- Бүребай, Ҡәнифә юлынан ҡайырылдыҡ бит!

- Ә мин абайланым, тик миңә ул юл кәрәкмәй.

- Нишләп?

- Минең үҙ юлым бар. Бүребай юлы!

- Юлдарҙы берләштерәйек... Атайым тиҙҙән сәфәрҙән ҡайтасаҡ.

- Үҙгәрмәйәсәк.

- Атайым ҡаты кеше, шулай ҙа йомшартып булыр. Үҙенең улын бик ярата. Һин минең менән күрешеп торорға ризаһыңмы?

Бүребай баш ҡаҡты.

Эсте әйтеп биргеһеҙ шатлыҡ солғап алды. Хөсәйен һайт-һайтлап һөрән һалғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Был шат, күңелле тауыш урманда яңғырау булып ишетелде. Бүребай тағы һағайҙы.

- Бей улы, был тирәлә кемдер йөрөй.

- Кеше был яҡҡа аяҡ баҫмай.

- Мин урман балаһы. Мин беләм.

- Кешенән кеше ҡурҡамы ни? Нишләп төҫөң үҙгәреп китте?

Бүребай яуап бирмәне, башы менән генә ымланы. Улар шыпырт ҡына тарлауыҡҡа төшөп киттеләр.

- Бей улы, һинең кеше үлтергәнең бармы?

- Аллам һаҡлаһын, нимә һөйләйһең, Бүребай!

- Мин бит яугир!

- Ҡурҡыныс кеше һин!

-Мин йәлләй ҙә беләм. Бер йыл элек беҙҙең элекке биләмәне килмешәктәр килеп баҫты. Беҙ уларҙың ҡайҙа туҡтарын ниндәй маҡсат менән йөрөүен белмәйбеҙ, күҙәтәбеҙ. Бәләкәй генә бер өйҙә дүрт кешене ҡалдырып, ҡалғандары ҡайҙалыр китте. Икәүһе йылға буйына төштө. Ә икәүһе эстә ҡалды. Беҙ күҙәтеүселәр шулай килештек, эстәгеләрен мин юҡ итергә тейеш, йылға буйындағыларын - икенсе сәнжәребеҙ. Ләкин эстәгеләрҙең береһе ҡатын ине. Оҙон итәкле. Эскә ипләп кенә үттем. Теге ир ҡатынды иркәләй, битенән һыпыра. Ҡатын уға һыйына ла һыйына... Мин ҡарап торҙом-торҙом да хәйләремде усыма ҡыҫып тотҡан килеш кире сигендем. Бойороҡто үтәмәгәнемде атама әйткәндәр...

- Кем һинең атаң?!

- Мин бер нәмә тураһында һөйләгәндә, икенсе нәмә тураһында һорашма. Юҡһа...

- Һорашмайым.

- Асыуынан ярһыған атама шулай тип әйттем: "Яҙ кейек-ҡоштоң туй мәлендә беҙ бит уларға теймәйбеҙ. Йыл бәрәкәтенән яҙмаһын өсөн. Минең дә әҙәм баларына тейергә хаҡым юҡ ине бит". Йөҙө боҙолған, ярһыуынан өҙлөкһөҙ йөрөп торған атам ҡапыл туҡтап ҡалды. Шунан ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп: "Алйот", - тине лә, ҡамсыһы менән итегенә нык итеп берҙе һуғып, боролоп сығып китте. Атам мине кисермәҫ тип уйлағайным. Ул мине ярлыҡаны. Яугир исеменә бөтән тап төшөргәнем юҡ!

Әле ишеткәндәренән шаҡ ҡатҡан Хөсәйен йәнә:

- Кем һинең атаң? - тип һораны.

- Үҙе ҡушһа, әйтермен. Ә тегеләрҙе ысынлап та йәлләнем бит. Мин хатта дошманды йәлләй белгәнемде лә белмәй инем... Беренсе тапҡыр шулай булды.

Хөсәйен уға ҡараған килеш тора бирҙе. Был ҡыҙҙы аңлауы еңел түгел. Ләкин күберәк белгән һайын яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк була бара.

- Минең атам һинекенә ҡоҙа ебәрер ҙә, шунан һине кәләш итеп алырмын. Ҡыйынлыҡтар килеп сыҡһа, эргәңдә һәр саҡ мин булырмын. Беҙ гел бергә булырбыҙ!

Бүребай бер ҡасан да аңламаған һәм аңларға уйламаған донъя тураһында һөйләй егет. Был донъя серле, ләкин серлелек аҫтында ниндәйҙер шом да ятҡандай... Бүребай-Аҡбүре уға текләп китте. Хөсәйендең күңелендә яҡшылыҡ, быны ул асыҡ тоя. Тик нишләп был егет Бүребайҙың үҙгәреүен теләй? Уның мәргәнлегенә, яугирлегенә һаман ышанмаймы? Яҡшымы был, насармы? Уны ҡанатландырған, көс биргән нәмәләрҙе ҡабул итмәүҙе аңлатамы? Ул саҡта ни өсөн бүреҡыҙға ҡараған сағында күҙе нурланып янып китә? Ысынлап та, бик ҡыҙыҡ, бик сәйер...

Әбит был яҡшы күңелле кеше менән ҡатышып китеүенең сәбәбе бөтөнләй икенсе нәмәлә. Үҙенә ҡушылған бурысты ул бер тапҡыр ҙа иҫенән сығарғаны юҡ. Бурыс яуаплы. Бурыс етди. Урыҫтарҙың себен дә осоп үтмәҫлек итеп нык һаҡланған нығытмаһына үтеп инергә, уға эс яҡтан күҙ һалырға. Хөсәйендең атаһы алыҫ сәфәрҙә саҡта ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеү еңелерәк тә булыр. Пушкаревтың ҡатыны мышы мөгөҙөн һорағайны. Бүребайҙа бындай дәүләт берәү генә түгел, хатта бер нисәү. Йыйындағы һөйләшеүҙе Хөсәйен дә яҡшы иҫләй.

- Ысынлап та, мөгөҙ бүләк иткең киләме? Унда барыуы, айһай!..

- Мөгөҙ ҙә, йәнлек тиреләре лә. Торған урындарын күргем килә.

- Нишләп күргең килә?

- Яҡшылыҡ ит! Һиңә лә нимә һорапһаң, шуны бүләк итермен!

- Янда ҡорал булмаһын!

- Ант итәм! Баш өҫтө! Һиңә лә бүләк бирермен! Мин йомарт, урман да байлығын йәлләмәй.

- Юҡ, һин түгел, ә мин һиңә бүләк бирермен. Ризаһыңмы шуға?

Бүребай риза икәнен белгертеп, йәһәтләп баш ҡаҡты.

Ҡораллы килеш былай ҙа берәүҙе лә үткәрмәйәсәктәр. Һүҙ ыңғайында рәхмәтен үҙенсә белдереп, Бүребай шулай тине.

- Беҙ һинең менән берәй ваҡыт айыуға ла сығырбыҙ! Бергәләшеп. Шулай бит?

Юҡ, был ҡыҙ бала түгел. Был ысын Бүребай. Әммә был юлы Хөсәйен унан күҙен алмаған килеш шулай тине.

- Сығырбыҙ.

Түҙемлелектең дә бер сиге була. Янғол егеттәре менән ҡулына ҡорал алырға мәжбүр булды. Ҙур ғына урыҫ ғәскәрен ҡыйраттылар. Ләкин еңеү шатлығы оҙаҡҡа барманы. Күп ваҡыт та уҙманы, язалаусылар әтрәде килеп баҫты. Улар артыҡ тикшеренеп-төпсөшөп торманылар, бүтәндәргә һабаҡ күрһәтер өсөн, юлдарында тап булғандарҙы ҡыйрата барҙылар. Ғәйепһеҙҙәр ҡаны түгелде. Көрәш бер һүнеп, бер тоҡанып һаман дауам итте. Һәр яуҙың башында Янғол тормаһа ла, батша вәкилдәренә уның исеме асыҡ билдәле булды. Янғол батырҙың исеме "бур", "юлбаҫар" менән тиңләштерелде. Үҙе өсөн ҡурҡҡан Мораттша бей уны яҡын юлатмаҫ булды. Ә бит тап ошо бей, еҙнәй, туған-зат тип, Янғол утҡа ла, һыуға ла ингәйне заманында. Мораттшаның дәүләтен яҡлағанда Янғол һәйбәт ине, шунан боласы булып ҡалды. Унан, Янғолдан, тартып алынған ерҙәргә батша кешеләре хужа булды. Ғаиләһен яуыз күҙҙән һаҡлар өсөн, Янғолға күсенергә тура килде. Бына шулай, Янғол үҙенең ғаиләһе - ҡатынын, ике улын һәм ҡыҙын, шулай уҡ яҡындарын йәшерҙе. Башҡорттоң ер-һыуы иркен, уларҙың ҡайҙа көнитмештәрен дошман белмәй, шуға ла хәүефһаза уларҙы урап үтер, тип ышанды. Үҙе һаман ҡораллы ғәскәр менән айҡашып йөрөнө. Яугирҙәре менән хөкүмәт кешеләре төҙөгән нығытманы емереп-яндырып, көлөн күккә осорҙо. Ана шул саҡта Янғолдо үҙ ҡулдары менән батшаға оҙатырға һүҙ биргән Пушкарев тигән бер капитан башҡорт кешеләренә ҡарата аяуһыҙлыҡ күрһәтте лә инде. Шул хәлдәрҙән һуң батыр ҡапыл уның әтрәденә һөжүм яһаны, ҡасҡан халдаттар араһына бәреп инеп, ырыуҙаштарын ҡан илатҡан капитанды ҡыуып етте. Бар ғәйрәте, дәһшәте менән дошманының баш осона ҡылысын күтәрҙе. Шул саҡта капитандың үҙенә төбәлгән күҙҙәрен күрҙе. Эйе, башҡаларҙың йәнен алыусы инде үҙ әжәле менән осрашҡайны. Ҡот осҡан ялбарыулы ҡараш, яртылаш асылған ауыҙ... Ҡапыл Янғолдоң арҡаһын нимәлер телеп үтте. Күтәрелгән ҡылыс үҙ хужаһына тулыһынса буйһонманы, шулай ҙа капитандың битенә барып етте, Янғол аҡҡан ҡанды күреп өлгөрҙө, унан уның үҙен ҡараңғылыҡ упты. Дошман пуляһынан ҡаты яраланған батырҙы оҙаҡ дауаланылар. Әгәр ҙә имсе Көһәпҡол ҡарт ҡулына эләкмәһә, дөрөҫөрәге, уның янына алып бармаһалар, Янғол күптән гүр эйәһе булған булыр ине. Аҙаҡҡы алыш тынғы бирмәне. Һушын юғалтҡансы дошманының башын ярырға өлгөрҙөмө? Ҡылысты яҙа һелтәгәне булманы бит уның. Ғаиләһен күрергә ашыҡһа ла яра ауыр уңалды. Ярһыуының, үртәлеүенең сәбәбе лә бар ине шул. Ҡатыны етешеп ҡалғайны. Бәпәй табыр көнө еткәндер. Йәнә лә ике улы, ҡыҙы көтә уны. Аяҡҡа баҫҡансы айҙан ашыу ваҡыт үтеп китте. Ғаиләһе көн иткән ауылға ике көндәк юл.

Йәйләүҙә Янғолдо ҡот осҡос күренеш ҡаршыланы. Йәйләү урынына торомбаштар һәм үлтерелгән халыҡ. Бер тере йән эйәһен тапманы Янғол. Ҡапыл күҙенә таныш күлдәк салынып ҡалды. Ҡатыны йөҙтүбән ҡапланған. Янғол һаҡ ҡына уны әйләндерҙе. Һәм ауырлы ҡатындың эсе ҡылыс менән сабылғанын күрҙе. Башы әйләнеүҙән саҡ йығылып китмәне. Яралы йыртҡыс кейектәй ыңғырашты ир. Янғол ҡатынының ҡорһағын - тыуып өлгөрмәгән улын - ҡосаҡланы. Иптәштәре уны шул килеш таптылар. Аҡылдан яҙырҙай хәлгә еткән ирҙе ҡатынынан саҡ айырып алдылар. "Балаҡайҙарым! Табып килтерегеҙ йән киҫәктәремде!" Ләкин уларҙы таба алманылар. Һуңынан ғына ишетелде - балаларҙы һалдаттар үҙҙәре менән алып киткән. Бына шулай тамам өмөтһөҙлөккә төшөп, башын ике ҡуллап услап ултырғанда һаҡ ҡына аҙымдар ишетте. Дуҫы Гәрәй дүрт йәшлек ҡыҙы Аҡбүрене әпкилә ине. Баҡтиһаң, урмандан табып алып ҡайтҡандар. Аҡбүре әсәһен, ағаларын таптыра башлағас ҡына, уның һалдаттар килгәнсе үк урманға киткәнен аңланылар. "Нишләп урманға киттең, балам?" "Мине бер көсөк алып китте". "Ниндәй көсөк?" "Мынауында ағы бар". Ҡыҙыҡай маңлайына күрһәтте. Янғол терт итеп ҡалды. "Шунан!" "Үҙе юҡ булды. Бүре балаһы алып китеп аҙаштырмаһа, ҡыҙы менән бер ҡасан да осрашмаҫтар ине бит. Эйе, шунан алып Янғол балаһын үҙе янынан ебәрмәне. Ни күрһә лә, бергә күрҙеләр. Ошо йылдар эсендә Аҡбүре бына тигән һунарсы, сәнжәргә әйләнде. Атаһынан бөтән һәр кем өсөн ул - Бүребай. Дөрөҫ, буй еткерә башлағас, ҡыҙының яҙмышы тураһында уйланманы түгел. Бер мәл Гөлйемеш апаһына ҡалдырып та китте. Үҙенең ҡайҙалығын әйтмәне лә хатта. Ләкин балаһында бүре һиҙгерлеге бар ине шул. Өс көндән ғәйепле ҡарашын төбәп, уның ҡаршыһында баҫып тора ине инде. Ата кеше тағы алып китте. Ҡалдырып китергә һылтауы ла табылды һымаҡ. "Һин йорт эшен белергә тейеш. Һөнәргә өйрән, мин икенсе юлы килгәндә маҡтанырлыҡ булһын!" Ләкин бер нисә көндән Бүребай тағы ла уның ҡаршыһында баҫып тора ине.

(Дауамы бар).

✓ *Бер заман күреп ҡалдым: үҙ юлы менән килә тәгәрәп ҡап-ҡара йомғаҡтай ҡуян. Унан байтаҡ артта Орел килә. Эт яҡынлай бит тегегә. Ҡуян йомарланып килеп, беҙҙе үтә бирҙе лә, бер ҡайын төбөнә боҫто ла ҡуйҙы.*

МАТУР ХӘТИРӘ

ҠУЯН МАЖАРАЛАРЫ,

йәғни Ғәҙеллектең тәүге һабаҡтары

Ниңәлер, ул йылда ҡар иртә яуҙы. Ә беҙ, бишенсе класҡа ғына уҡырға барған малайҙар, ҡараңғы төшкәс, ағайҙарҙың арба тәртәләрендә ҡалдырған ҡайыш-һыртлыҡтарын сәлдереп, балта менән юнып эшләп алған саңғыларыбыҙға теген тә ҡуйғанбыҙ. Бер-беребеҙгә күрһәтеп маҡтанабыҙ. Ул осорҙа саңғы ла, уға бәйләрлек ҡайыш та булмай торғайны.

Атайым мөғәллим булып эшләгән ул ауылда бик күп һунарсылар йәшәй ине. Күпселек йортта тиерлек һунар эттәре бар. Хатта икешәр. Һәр кем, олоһо ла, кесеһе лә, хатта беҙ, 11-12 йәшлек малайҙар ҙа, тәүге йомшаҡ ҡар яуыуын көтәбеҙ. Беҙ малайҙар менән тәүге ҡар яуғас та кем кем менән ҡайҙа ҡуян баҫтырырға сығырға тейешлеген күптәнән үҙ-ара һөйләшеп килешеп ҡуйғанбыҙ. Билдәле, һәр кемдең үҙ эте. Ҡуянға сыға торған урындарҙы ла "өләшеп" алғанбыҙ. Ҡар яуған көндө, әлбиттә, беребеҙ ҙә дәрескә бармайбыҙ. Муҡсаларҙы алған булып, атай-әсәйҙәргә уҡырға киттек, тип сығабыҙ ҙа, ҡуян баҫтырырға ҡасабыҙ. Беҙ Вәғиз менән икәү сығырға һөйләштек. Дөрөҫөрәге, Вәғиз миңә үҙе һырыҡты. Сөнки минең этем Орел һунарға өйрәнгән. Өңөнән бурһыҡты ла тартып сығара, ҡаты ҡарҙа ағай менән менән ҡыр кәзәһе лә ала, хатта ҡуянды ла баҫтырып тота. Ә Вәғиздең эте ҡара Дүрткүҙ ҡапҡа эсендә өрөүҙән башҡаны белмәй.

Бер көн кис ҡап-ҡара ергә ап-аҡ ҡар ябалаҡтап-ябалаҡлап яуа башланы. Йоҡлай алмай, төнөнә ике-өс тапҡыр тороп, һаҡ ҡына тәҙрә аша ҡарайым. Үҙем, инәйем уянып ҡуймаһын, тип ҡурҡам. Иртә менән уянып китһәм, ер ап-аҡ. Тиҙ генә тышҡа сыҡһам, Вәғиз Дүрткүҙен эйәртеп, килеп тә еткән. Бөтә ауыл анда ла бында ла эт саҡыра. Беҙ артҡы баҡса аша "Үлектәр ҡыраһы" тигән ергә киттек. Урманға етеү менән минең Орел эҙләнеп ситкә сапты. Китап-дәфтәр һалынған муҡсайҙарҙы ҡайын төбөнә ҡарға күмдек. Вәғиз минән ике-өс йәшкә олораҡ, буйға ла оҙон. Аҙымы ла ҙур. Йомшаҡ ҡарҙа тегенең артынан өлгөрөп булмай. Киләм арттан, танауҙы мыш-мыш тартып. Ә минең эт юҡ та юҡ. Өрмәй ҙә, беҙҙең янға ла килмәй. Ап-аҡ йомшаҡ тәрән ҡарҙа һис бер эҙ юҡ. Бәләкәй булһам да беләм мин. Ҡуяндар йомшаҡ ҡар яуһа, ике, хатта өс көн эҙ сығармайҙар. Тик кенә яталар. Вәғиз, Дүрткүҙен эйәртеп, буштан-бушҡа ҡар йырып барыуҙан ялҡты шикелле.

- Һин анау бейеклеккә бар, - тип ҡул һелтәне лә, үҙе урман араһына һул яҡҡа сығып китте.

Минең алда, һерәйеп торған ҡырлы ташлы түбәлә, дүрт-биш ҡуян ята, тип уйлап, туп-тура шул түбәгә барам. Түбәгә етеп киләм, үҙем таштарҙан күҙемде алмайым. Таштарға етергә 15-20 аҙым ҡалды. Дүрт-биш түгел, бер ҡуян да күренмәй. Йыуан ҡайын артына йәшендем дә, ипләп кенә ҡарайым. Таш алдында йыуан ике ҡайын моҡай таяғы кеүек кәкерәйеп, ер өҫтөнән 50-60 сантиметр ҡалҡып, тағы ла төҙәйеп, ҡосаҡлашып үҫәләр икән. Ике ҡайын араһындағы кәкере өҫтөндәге ҡара нәмәгә күҙ төштө. Күҙгә төшкән тирҙе һөртөп, секерәйеп ҡарайым. Ята бит әй. Ике кәкере араһында боҫоп, башын кәүҙәһенә сумырып, ҡолаҡтарын арҡаһына һуҙған да ята. Үҙе көп-көрән. Ағармаған. Ә тирә-яҡ ап-аҡ. Кинәт кенә яуҙы шул ҡар. Оло ҡуян булһа, инде ағара башлар ине, ни тиһәң дә, октябрҙең уртаһы етеп килә. Күрәһең, был бала ҡуяндыр. Үҙ ғүмерендә тәүге ағарыу миҙгелен ҡаршылайҙыр. Ҡайын артында шаҡ ҡатҡанмын. Ҡарайым. Күҙҙәремде алмайым тегенән. Һис ҡымшанмай был. Еңел генә елгә хатта йөндәре лә ҡыбырҙамай. Күҙҙәре асыҡ, түп-түңәрәк. Ҡабаҡтарын, исмаһам, йомоп та алмай. Әсетмәй микән ни күҙе? Күҙҙәре асыҡ көйө йоҡлап ултыра был. Бындай ҡарҙа ул үҙен күрмәүҙәренә ышанып, боҫоп ята бирә. Минең уның янына килеп үк етеүемде ул абайламаған да, буғай. Оҙаҡ ҡына һис ҡымшанмай ҡарап торҙом. Күҙҙәре һаман асыҡ, йымйым (ҡып-ҡып) итеп йомоп та алмай. Бына бер ваҡыт Вәғиз киткән яҡтан тауыш ишетелә. Ҡуянымдың ҡолаҡтары шунда уҡ торҙо. Эй ҡайынсылай был ҡолаҡтарын, эй ҡайынсылай.

Ахырҙа, тауыш бөтөп, бер аҙ тынысланғас, ҡайсы ҡолаҡ урынында ҡатты. Бер ни тиклем ваҡыт үтеүгә, яйлап ҡына арҡаһына ятты.

Һыуыҡ ҡына еүеш нәмә ҡулыма тейеүенә артыма боролоп ҡараһам, Вәғиздең Дүрткүҙе ҡойороғон болғап янымда тора. Йәнлек эҙләмәгәне өсөн асыуы килеп, Вәғиз уны янынан ҡыуып ебәргәндер. Ояттыр инде уға минең һәм этем Орел алдында... Ә ул, Дүрткүҙҙе әйтәм, ҡайтып китмәгән, минең янға килде. Ҡойроғон болғай-болғай таш яғына китте был. Ә миңә ҡысҡырырға ярамай. Ҡуян төшөп ҡасһа, уны Дүрткүҙ һә тигәнсе тотоп, талап, алып ҡасып ашар, тип ҡурҡам. Шунан Вәғиз минең алда маҡтаныр. Минең эт тотто тип бөтә малайҙарға һөйләп бөтөр. Ә минең ни булһа ла ҡуянды Орелдан тотторғо килә. Бына Дүрткүҙ таш янына килеп, тубылғыға аяғын күтәрҙе. Һауаны еҫкәштерҙе. Ташты урап, кире минең янға килде. Ҡуянға күҙ һалһам, ҡуян юҡ. Шым ғына ағас кәкереһенән һикереп төшөп, аҡ ҡар өҫтөндә ҡап-ҡара булып ҡайындар араһында сабып бара. Ә Дүрткүҙ һис ни һиҙмәй, артҡа ҡарап ҡойороҡ болғап тора. Ҡарап ебәрһәм, ҡулына таяҡ тотоп, Вәғиз килә. Ә минең эт юҡ. Бер ваҡыт Орел минең эҙ менән сабып килде лә, туҡтап та тормай, ары-бире еҫкәнеп, ҡуяндың артынан сапты.

Оҙаҡ та үтмәне, йыраҡта, урман араһында саңҡ-саңҡ өргән тауыш ишетелде. Вәғиз менән шаҡ ҡатҡанбыҙ ҙа эт саңҡылдаған яҡҡа ҡарайбыҙ. Орелдың, ғәҙәттә, йәнлек күреп баҫтыра башлаһа, ике-өс тапҡыр саңҡылдап ала торған ғәҙәте бар. Бер заман күреп ҡалдым: үҙ юлы менән килә тәгәрәп ҡап-ҡара йомғаҡтай ҡуян. Унан байтаҡ артта Орел килә. Эт яҡынлай бит тегегә. Ҡуян йомарланып килеп, беҙҙе үтә бирҙе лә, бер ҡайын төбөнә боҫто ла ҡуйҙы. Минең алабарман эт күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, саңҡылдай-саңҡылдай, тегенең янынан үтте лә китте. Илле-етмеш аҙым ер үткәс кенә ҡуяндың алдында юҡлығын аңғарып, туҡтап ҡалды һәм эҙләнә башланы. Ә бәләкәй генә һоро ҡуян эт янынан үтеп китеү менән килгән юлына төшөп, йән-фарман кире сапты. Ә Дүрткүҙ уны хатта күрмәне лә. Күп ваҡыт та үтмәне, Орел боролоп килеп, ҡуяндың эҙенә төшөп, тағы ла кире сапты. Өсәүләп Орелдың артынан йүгерҙек. Барһаҡ, Орел бер ҡая ташлыҡтың тишегенә инергә маташып, ерҙе ҡаҙый, таштарҙы тешләп тарта. Керә алмай бит был. Ахыры, Вәғиз миңә этте өңдәп тартып сығарып, уны тотоп, таш артында торорға ҡушты. Үҙе таяҡ алып, таш тишегенә тығып болғай башланы. Ҡапыл мин торған яҡтан таш аҫтынан ҡар туҙҙы. Аҡ ҡар араһынан ҡара йомғаҡ осоп сыҡты ла түбәнгә йомолдо. Ҡулдан ысҡынып киткән Орел уны йыраҡ та ебәрмәй тотоп алды. Беҙ Вәғиз менән уның янына йүгереп барып еткәндә, Орел үле ҡуянды арҡыры ҡабып, "Булды", тигәндәй ҡойороғон болғай-болғай беҙҙе ҡаршыланы. Яҡын килгән Дүрткүҙгә ырылдап ҡуйҙы.

Вәғиз, ҡуянды ҡулына алып, әйләндереп-әйләндереп ҡараны ла, ҡыҙыл һаплы бәкеһен сығарып, үле ҡуянды һуйҙы, салбар бәйен сисеп алып, ике арт аяғын ҡуша бәйләне лә: "Әйҙә, ҡайттыҡ",- тип, кире юлға боролдо. Минең бик тә тотоп ҡарағы килә бит ҡуянды. Ә ул миңә тотторманы ла. Елкәһенә аҫып, көрт кисеп атлауын белде. Ни быйма тишек. Эсенә һалған кейеҙҙе төҙәтеп алам да тағы йүгерәм Вәғиз артынан. Ниһайәт, юлға килеп сыҡтыҡ. Ә Вәғиз мине көтөп тә тормай, атлауын дауам итә. Танауҙы мыш-мыш тартып, еүеш ең менән уны һөртә-һөртә, йүгерә-атлай артынан киләм. Эйәртешеп булмай. Вәғиздең аҙымы ҙурыраҡ бит. Ә минең шул тиклем ҡуяндың аяҡ бәйен ҡулбаш аша аҫып атлағым килә.

- Минең эт тотто бит, Вәғиз, ҡайҙа, мин дә тотоп барайым әле ҡуянды, - тим тегегә.

- Ана, тот ҡапсығыңды, - тип, артҡа ҡарабыраҡ көләмһерәне лә, тағы юлын дауам итте Вәғиз.

Бына ауыл күренде. Эх! Ҡуянды ҡулбашҡа аҫып ауылға керәһе ине лә, бөтә малайҙарға күрһәтәһе ине. Тағы ла һорайым Вәғиздән. Урамға керер алдынан ул миңә ҡуянды бирҙе лә:

- Мә, әҙерәк алып бар, унан урман ситендә ағас төбөнә йәшерелгән муҡсайҙарға йүгер... Беҙгә дәрестән ҡайтырға кәрәклеген оноттоңмо ни, - тине. Егерме-утыҙ аҙым атлауым булды, Вәғиз минән ҡуянды алды. Ә мин йүгереп барып сумкаларҙы алып килдем.

"Их, ҡуянды күтәреп урамға керәһе ине..." тип хыялланам тағы. "Вәғиз, минең эт тотто бит, тотоп барайым инде мин дә",- тип әйтеп тә ҡарайым. Юҡ, ишетмәй ҙә хатта. Йылдам-йылдам алға атлай. Бер аҙҙан минең шыңшыуға түҙмәне, ахры: "Ана, тот алғы тәпәйенән", - ти был. Ҡуяндың бәләкәй генә алғы тәпәйен шунда уҡ эләктереп алдым. Беребеҙ ҡуянды йөкмәп, икенсебеҙ уның тәпәйенән тотоп, ауыл урамына килеп керҙек. Вәғиздең дә, минең дә шул тиклем кешеләргә күренге килә. Әммә урамда берәү ҙә юҡ. Әллә ҡайҙа булып бөткәндәр. Вәғиздең өйө беҙ ҡайтҡан яҡ оста ине. Уның өйөнә барып еткәнсе беҙҙе берәү ҙә күрмәне бит инде. Шуға күрә Вәғиз ҡуянды йөкләп, урам буйлап түбәнгә, беҙҙең өй яғына табан атланы. Бара торғас, ҡаршыбыҙға Зарифа әбей осраны ла: "Рамаҙан ағайҙың бесәйен үлтерә һуғып алып китеп баралар, ҡоромағырҙар. Иртән генә юғалтып, эҙләп йөрөй ине", - тип, эргәбеҙҙән һөйләнеп үтеп китте.

"Ҡуян ул, ҡуян!" - тип ҡысҡырам артынан. Зарифа әбей кире боролоп килеп, ҡуяныбыҙҙы әйләндереп ҡараны ла: "Башы йоп-йоморо, ниндәй ҡуян булһын, үҙе бәләкәй генә", - ти. "Их, танымай бит Зарифа әбей ҡуянды. Исмаһам, беҙҙең ҡуян тотҡанды әбейҙәргә һөйләр ине..." - тип уйлап, ары атланыҡ.

Беҙҙең өйгә еткәс, Вәғиз япма аҫтына ҡуянды аҫып ҡуйҙы ла, һыҙыра башланы. Мин уның янынан китмәйем. Эттәр ҙә ҡарап тора. Һыҙырып бөтөр ваҡытта Вәғиз миңә: "Әйҙә, һин итен ал, ә мин тиреһен алайым. Миңә билгә бәйләп йөрөргә йә бейәләй итеп тегергә тиреһе кәрәк", - ти. Уйлап торам. Отолған һымаҡ булам бит. Юҡ, һис шикһеҙ отолам. Ҡайтҡанда ла ул миңә ҡуянды тотторманы... Эстән ҡырҡа ҡарарға киләм. "Юҡ,- мин әйтәм, - тире миңә лә кәрәк. Анна, быймам тишек. Уртаҡ булғас, уртаҡ булһын, уртаҡ булмаһа - һиңә ите, миңә тиреһе. Минең эт тотто бит ҡуянды", - тим. Шулай тип әйтеүем булды, Вәғиз ҡуянды бәйҙән сисеп тотоп, ҡайтыу яғына атланы. Артынан киттем. Тағы ла берәү ҙә осраманы. Ҡыҙҙар әле дәрестә, ә малайҙар ҡуян баҫтырыуҙан ҡайтмаған. Вәғиз үҙҙәренең ихатаһына ингәс, ҡуянды һыҙырып бөттө лә, минең талап буйынса итте уртаға бүлде. Ал яғын миңә тотторҙо, арт яғын биҙрәһенә һалып ҡуйҙы. "Тот!" тип, тиренең ситен тотторҙо ла, тегене ҡап урталай икегә бүлде. Береһен ҡулыма бирҙе, икенсе яғын алып, битенә ябып ҡараны. Уға эйәреп мин дә шулай иттем. Ус аяһындай ғына тире, ҡаҡ ҡуян ите тотоп, бик ҡәнәғәт булып өйгә ҡайтып киттем.

Спартак ИЛЬЯСОВ.

ИНТЕРНЕТТАН

АУЫРЫҒАН САҠТА...

ашамай тор

■ Сәләмәт тормош алып барыусыларҙан айырмалы рәүештә, чипсы, йомортҡа, тоҙло ашамлыҡтарҙы күпләп ашаусылар араһында инфаркт кисереүселәр йышыраҡ осрай. Канаданың Онтарио провинцияһының Гамильтон университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 5 меңдән ашыу сирле һәм 11 мең һаусәләмәт кеше ҡатнашҡан. Йышыраҡ емешеләк, йәшелсә, соя продуктары ашай һәм иттән, ҡыҙҙырылған аҙыҡтарҙан баш тартыусылар үҙҙәрен йөрәк сирҙәренән һаҡлай икән. Канада ғалимдары фекеренсә, донъялағы һәр өсөнсө инфаркт - дөрөҫ туҡланмауҙан.

■ Бөгөн ауырлығын кәметергә теләүселәр араһында ананас киң ҡулланыла. Уның составындағы бромелайн организмға аҡһымдарҙы тарҡатырға, тимәк, ябығырға ярҙам итә. Бынан тыш, ананас цинк, кальций, магнийға бай, улар нервылар системаһын тынысландыра һәм кәйефте күтәрә. Банан составындағы мескатил да кәйефте күтәреүсе булып һанала. Был емештәге тирозин аминокислотаһы ауыртыуҙы баҫа, хәтерҙе яҡшырта һәм аппетитты кәметә.

■ Эштә тиҙ арыйһығыҙмы? Улайһа, көн һайын бер ус сәтләүек ашағыҙ һәм шунда уҡ хәтерегеҙ яҡшырыр, бар мәсьәләләрҙе лә еңел хәл итә башлаясаҡһығыҙ. Сәтләүектәрҙең магнийға бай булыуы уларҙы интеллектуаль эш менән шөғөлләнеүселәр өсөн файҙалы итә лә инде.

■ Америка ғалимдары иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа һәм татлы аҙыҡтар ашамаҫҡа кәңәш итә. Татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уянғас та тәм-том менән "һыйланған" организмға ғәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, бигерәк тә юғары калориялы эсемлектәр зарарлы.

■ Аҡһымлы һәм майлы аҙыҡты эшкәртеү өсөн күп энергия һәм ваҡыт сарыф ителә. Шуға ла ауырыған саҡта сирленең бер аҙ ашамай тороуы файҙалыраҡ, сөнки был ваҡытта организмдың көсө аш һеңдереүгә түгел, ә инфекция менән көрәшеү өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Ауырып китһәгеҙ, туҡлыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емеш-еләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуҙа бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашағыҙ, һут эсегеҙ. Әйткәндәй, киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

■ Канаданың Шербрук университеты ғалимдары белдереүенсә, пневмониянан вакцина үпкәләр шешеүенән генә түгел, инфаркт ҡурҡынысынан да һаҡлай. Бындай һығымтаға улар 65 мең инфаркт кисергән сирлене тикшергәндән һуң килгән. Был сирлеләрҙең 12 проценты пневмонияға ҡаршы вакцина эшләткән булған, шуға ла инфарктан үлеү осрағы 40-70 процентҡа кәмегән. Ғалимдар быны пневмонияның йөрәк артерияларының эске көбө шешеүенә булышлыҡ итеүе, ә был үҙ сиратында холестерин йыйылыуы һәм артерияларҙы ҡаплап тороусы төйөрҙәр барлыҡҡа килеүе менән аңлата.

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике сынаяҡ йәшел сәй эсеү, 1 әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьсиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӘЛ

Әҙәм балаһының матур, етеш тормошта йәшәргә ынтылышы тәбиғи күренеш. Ләкин ынтылыш, теләк - бер, ә ысынбарлыҡ бөтөнләй икенсе нәмә. Кешегә үҙ маҡсатына ирешеү өсөн был тормошта ниндәй генә ҡаршылыҡтарҙы үтергә, ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығырға тура килмәй. Юлдарына тормош ҡуйған кәртәләр күптәрҙе һындыра, уй-хыялдарын бушҡа сығара. Оло ихтыяр көсөнә эйә булғандар, үҙ-үҙҙәренә ныҡ ышанғандар, ныҡышмалылар иһә, Хоҙай биргән һәләтен эшкә егеп, барыбер үҙ маҡсатына өлгәшә һәм шуның менән үҙенең булдыҡлылығын иҫбат итә. Үрҙә әйтеп кителгән сифаттарға эйә булған һәм, йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, ныҡлы нигеҙ ҡороп, көслө эшҡыуар исемен күтәреп өлгөргән булдыҡлы егеттәребеҙҙең береһе Ишембай ҡалаһында йәшәй. Был егетте "Мебелсе Рәил" тип йөрөтәләр һәм уның етештергән тауары осһоҙ һәм үтемле, ысын мәғәнәһендә халыҡ мебеле булыу менән айырылып тора.

ЗАТЫ КЕМ ДӘ, АТЫ КЕМ,

йәғни Эшлекленән эшлекле тыуа

Әртис булырға хыялланған ул

Арлар ауылы райондың иң күркәм төбәктәренең береһендә урынлашҡан. Бындағы хозур тәбиғәт ҡосағында тыуып үҫкән һәр кем, тирә-яҡтағы матурлыҡты, нәфислекте үҙ күңеленә күсереп, унан илһам алып, ижадсы булырға ынтылмай ҡалмайҙыр. Тыуған еренең гүзәллегенә сорналып үҫкән Рәил дә, был гүзәллекте йөрәгенә һеңдереп, уны башҡаларға сәхнә аша өләшеү өсөн бәләкәйҙән әртис булырға хыяллана. Һайран, артабан Биксән мәктәптәрендә уҡыған осоронда күңелдәре йырлы-моңло булған уҡытыусыларҙан белем алыуы ла был теләген көсәйтә генә.

Бигерәк тә Биксән мәктәбенең Әнүәр Хөрмәт улы Ниғмәтуллин етәкләгән өлгөлө музыка ҡоралдары оркестрында шөғөлләнеүе уға ҙур этәргес була. Ҡурайҙа оҫта уйнаған егет, мәктәпте тамамлағас та, Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театрынан юллама алып, документтарын Өфө дәүләт сәнғәт институтына илтеп тапшыра. Һайлаған һөнәрен атаһы мөрхәтһенмәҫен һиҙгән Рәил башта уға өндәшмәй, аҙаҡ әйтмәй ҙә булдыра алмай. Ғәлимйән ағай: "Кеше ролен" уйнап түгел, был тормошта үҙ ролеңде уйнап йәшәргә кәрәк", - тип, бер һүҙ менән улының теләген юҡҡа сығара. Атай һүҙенән сығып өйрәнмәгән егет документтарын Стәрлетамаҡ физкультура техникумына илтеп тапшырырға ҡарар итә.

Уҡыуын уңышлы тамамлаған Рәилде Салауат ҡалаһындағы 36-сы һөнәрселек училищеһына физик тәрбиә кабинеты мөдире итеп эшкә ебәрәләр. Бында килеү менән егет баштан-аяҡ эшкә сума. Уҡыу йортонда спортҡа бик иғтибар итеп бармағандарын күреп, был йүнәлештә эште йәнләндереү өсөн бар көсөн һалып эшләй. Ныҡышып, спорт ҡорамалдары алдыра, төрлө спорт секциялары ойоштора. Физик тәрбиәгә уҡыусыларҙы ғына түгел, бөтә училище коллективын йәлеп итергә тырыша. Даими рәүештә "Физкультурниктар көнө", "Сәләмәтлек көнө" үткәртеүгә өлгәшә. Был көндәрҙә уҡыуҙар туҡталып, бөтә училище спорт кейеменә кейенә. Баш ҡалаға барып һөйләшеп, уҡыу йортонда республика кимәлендә ярыштар ойоштороуға ла өлгәшә Рәил. Ҡыҫҡаһы, бер йыл эсендә 36-сы һөнәрселек училищеһы физик тәрбиә буйынса башҡаларға үрнәк итеп ҡуйырлыҡ уҡыу йортона әүерелә.

Иң мөһиме - тормошта үҙ урыныңды табыу

Эштәре ал да гөл булып, уны яратып башҡарһа ла Рәил үҙенең тәғәйенләнешенең икенсе нәмәлә икәнен тиҙ тоя. Училище стеналарына ғына һыймаҫын, ниндәйҙер мөһимерәк эштәр башҡарырға тейешле икәнен күңеле менән һиҙеп йәшәй егет. Бигерәк тә үҙ шөғөлөн булдырып, үҙ аллы эш асыу теләге көсәйгәндән-көсәйә. Төрлө кәсептәр араһынан мебель етештереүгә өҫтөнлөк бирep, шул йүнәлештә эш башларға ҡарар итә ул һәм, был шөғөлдөң төптән айышына төшөнөргә ниәтләп, мебель фабрикаһына ябай эшсе булып эшкә урынлаша. Йыл ярым эсендә байтаҡ тәжрибә туплап өлгөргән Рәил иптәш егете менән Кинйәбулат ауылында үҙҙәренең мебель цехын асып ебәрә. Ләкин тәүге ҡоймаҡ төйөрлө була шул - егеттәрҙең эштәре бер ҙә ырамай.

- Ауыл еренда цех асыуыбыҙ ҙур хата булды. Беренсенән, унда оҫта мебелселәр юҡ тип әйтерлек, икенсенән, етештергән тауарыңды һатыуы ҡыйын, - ти Рәил.

Эштәре барып сыҡмағас, иптәше был шөғөлдән бөтөнләй баш тарта. Әммә Рәил төшөнкөлөккә бирелмәй, Иҫке Ишембайҙағы мебель фабрикаһын арендаға алып, ҡайтанан эшкә тотона. Унда ныҡлап тамыр йәйәм генә тигәндә, кемдәрҙер, ут төртөп, фабриканы яндыра. Бындай уңышһыҙлыҡтарҙан һуң күптәр ҡул һелтәп, ниәтенән төнөлөп тә ҡуйыр ине. Ләкин Рәил ундайҙарҙан түгел. Ныҡыш, үҙ-үҙенә ышанған егет бурыҫҡа батып булһа ла Перегонный ҡасабаһындағы ағас эшкәртеү цехын һатып ала һәм ныҡлап мебель етештереүгә тотона.

- Үҙ эшемде астым, тип әйтеүе генә аңһат. Уны яйға һалып ебәрер өсөн ниҙәр генә эшләмәйһең дә, ниндәй генә ҡаршылыҡтарҙы йырып сыҡмайһың. Иң мөһиме - түҙергә һәм ышанысты юғалтмаҫҡа кәрәк, - ти егет.

Гөлназ ИШЕМБАЕВА фотоһы.

Бына шул түҙемлеге, ныҡышмалылығы, үҙ-үҙенә ышанысы уңыш килтерә лә инде Рәилгә. Йәш эшҡыуар уңғандарҙан ғына торған хеҙмәт коллективы туплай алған. Бөгөнгө көндә уның предприятиеһында 35 кеше эшләй. Матди-техник базаһын нығытыуға ярайһы уҡ көс һалған. Ишембайҙа ер алып, магазиндар, гараждар, йәшелсә һаҡлағыс төҙөп ултыртҡан. Көньяҡ биҫтәһендәге "Алмаз" магазинында үҙе етештергән продукцияны һатһа, башҡаларын емеш-еләк, запчастар һатыусыларға арендаға биргән. Буш торған ҡала мунсаһын да һатып алған Рәил. Хәҙер яҡшылап ремонтлап, сауна, бассейн булдырып, тренажерҙар урынлаштырып, уны сәләмәтлек үҙәгенә әүерелдерергә ниәтләй.

Әлбиттә, башлаған эше табыш, файҙа килтермәһә, үҫешә лә алмаҫ ине эшҡыуар. "Уңышыңдың нигеҙе нимәлә?" - тигән һорауға Рәил былай тип яуап бирҙе:

- Беренсенән, һәм был иң мөһимелер, тип уйлайым, барыбер булдырам, тип эшкә тотоноуҙалыр. Нисек кенә булмаһын, юғалып ҡалырға кәрәкмәй. Икенсенән, заман талабына яраШлы, хаҡы "тешләшмәгән", һорау менән файҙаланылған сифатлы тауар етештереү һәм үҙ ҡулланыусыңды таба алыуҙалыр. Ҡиммәтерәккә берҙе түгел, ә арзаныраҡҡа биште һатыу күберәк табыш килтереүен яҡшы төшөнәм мин.

Рәилгә эш һорап килеүселәр көндән-көн арта. Әлбиттә, һәр кемде бындағы матур хеҙмәт хаҡы ымһындыра. Эшҡыуар хеҙмәткә түләүҙә прогрессив алым ҡуллана. Эш хаҡынан тыш, етештерелгән, һатылған мебель иҫәбенән өҫтәмә, үҫешә барған хаҡ түләй. Мәҫәлән, һәр мебель өсөн 100 мебелгә тиклем бер төрлө, 150-гә тиклем икенсе төрлө, 200-гә тиклем тағы ла күберәк хаҡ тәғәйенләнгән. Шуға ла предприятиела эшләүсе һәр кем күберәк етештереп, күберәк һатыу өсөн бар тырышлығын һала.

- Складта үтмәй ятҡан тауар юҡ бөгөн, мебелдәрем республиканың төрлө төбәгендә һатыла, - ти Рәил. -

Шуныһы ҡыуаныслы, эш башлағанда сеймал эҙләп үҙем саба инем, хәҙер инде уны үҙҙәре килтереп бирәләр һәм һайлап алыу мөмкинлеге лә етерлек.

Коммунизм шулай була икән

Миңә, хәбәрсе булараҡ, ҡалала ла, ауыл ерендә лә эшҡыуарҙар менән байтаҡ осрашырға тура килде. Уңышлы эш алып барыусыларҙың һәр береһенә: "Ата-бабаң кулак - фәлән булмағанмы? - тигән һорауҙы бирмәй ҡалмай инем. Һәм барыһынан да тип әйтерлек ыңғай яуап ишеттем. Тимәк, эшҡыуарлыҡ ҡомары уларҙың ҡанында бар. Рәилгә лә ошо уҡ һорауҙы бирҙем.

- Ҡарт олатайым ауылдың иң бай кешеләренең береһе булған. Күпләп мал аҫыраған, умарта тотҡан. Олатайым да тырмәнсе булған, мал-тыуары ла байтаҡ ине, тиҙәр. Атайым иһә колхозда ферма мөдире, бригадир булып эшләне, ғүмер буйы аттан айырылманы, әле лә ҡурабыҙ тулы мал, күпләп умарта ла тота, - тип яуапланы ул. Был иһә һәләттең быуындан-быуынға күсә килеүен, уның юҡҡа сыҡмай, һәр саҡ тишеп сығырға әҙер тороуын раҫлай.

Делегат булараҡ, Рәил Әхмәтйәнов менән бергә III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ла ҡатнашырға тура килгәйне миңә. Шул осор илебеҙ, халҡыбыҙ, телебеҙҙең артабанғы яҙмышы хаҡында байтаҡ һүҙ алып барғайныҡ. Рәил ҡусты: "Бөгөнгө көндә үҙ-үҙеңде күрһәтергә, раҫларға, аяғыңды ныҡлы терәп йәшәргә ҙур мөмкинлектәр асылды. Ниңә йоҡлай ул башҡорт йәштәре, ниңә үҙ шөғөлөн булдырып, әҙәмсә йәшәргә ынтылмай улар?" - тигәйне әселәнеп-көйөп, дәртләнеп йәшәй. Шул уҡ ваҡытта ул матди файҙа алыу яғын ғына ҡарарға тейеш түгел, ә күңел ҡәнәғәтлеге лә кисерергә тейеш. Йәштәргә шуны әйтер инем - эш урыны эҙләп, ваҡыт сарыф итеп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, кемгәлер ялынып, кемгәлер ялланып эшләп йөрөгәнсе, тоторға ла үҙ эшеңде башларға кәрәк. Был аҙымың менән һин үҙеңә генә түгел, бүтәндәргә лә эш урыны булдыра алаһың.

УЙЛЫҒА - УЙ

- Йәштәр өсөн бөгөн иң көнүҙәк проблемаларҙың береһе - эш урыны табыу. Һәр кемдең яратҡан, күңеленә ятҡан шөғөлө булырға тейеш. Яратҡан эше булғанда, кеше янып-көйөп, дәртләнеп йәшәй. Шул уҡ ваҡытта ул матди файҙа алыу яғын ғына ҡарарға тейеш түгел, ә күңел ҡәнәғәтлеге лә кисерергә тейеш. Йәштәргә шуны әйтер инем - эш урыны эҙләп, ваҡыт сарыф итеп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, кемгәлер ялынып, кемгәлер ялланып эшләп йөрөгәнсе, тоторға ла үҙ эшеңде башларға кәрәк. Был аҙымың менән һин үҙеңә генә түгел, бүтәндәргә лә эш урыны булдыра алаһың. Эшҡыуарлыҡ - киләсәгеңә юл ярыу, - тине ул.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Бында Рәилдең тағы бер ниәте хаҡында ла әйтеп китмәй булмайҙыр. Ул ауылдарынан алыҫ түгел урынлашҡан бик матур аҡланды арендаға алып, шунда ҙур булмаған йорттар төҙөп һәм умарталар килтереп, был аҡланды Ишембайҙың 8-се башҡорт мәктәбе уҡыусылары өсөн хеҙмәт һәм ял лагеры итергә иҫәп тота. Тегеләге тормошҡа ашырыр булдыҡлы егет, тип уйлайыҡ.

- Һинең билдәле эшҡыуарға әйләнеп, матур тормош ҡороуыңа атай-әсәйең ҡыуанып бөтә алмайҙыр инде? - тип һорайым Рәил ҡустынан.

Ул йылмая биреп:

- Атайым "Миңә рәхмәт әйт - әртислеккә юлыңды япмаһам, йөрөр инең шунда тамағың ашҡа, өҫтөң кейемгә туя алмай", - ти. Ә әсәйем: "Улым, беҙ хыялланған коммунизмды күрһәткәнеңә рәхмәт инде. Уның нисек булыуын татыным бит", тип ҡыуана, - тине.

Баҡтиһән, Рәил ауылдарындағы магазинды һатып алған да, уны файҙаланыусыға аренда хаҡы өсөн әсәһенә бушлай аҙыҡ-түлек бирергә ҡушҡан. Хәҙер Гөлйөҙөм апай кәрәк нәмәһен коммунизмдағы кеүек магазиндан аҡсаһыҙ ғына барып ала икән.

Ата-әсәһен коммунизмда йәшәтерлек, милләтебеҙҙең бәҫен, ҡотон күтәрерлек Рәил ҡустылай егеттәребеҙ күберәк булһа, "Бына беҙ кем!" тип күкрәк ҡағып алыр инек тә ул. Бәлки, ҡағырбыҙ ҙа, әгәр мүкләнеүебеҙҙән арынһаҡ.

Мөҙәрис БАГАЕВ.
Ишембай ҡалаһы.

БУЛДЫРАБЫҘ БИТ!

АРМИЯНАН ҠАЙТТЫ ЛА...

бынамын тигән шөғөл тапты

Ауылда күп йәштәрҙең, бигерәк тә әрме хеҙмәтен тултырып ҡайтҡан егеттәрҙең, ата-әсә өйөндә ни аҡса тапмай, ни ғаилә ҡормай буш ятыуы бик аяныслы хәл. Шундай йәштәргә өлгө өсөн Илһам ҡустымдың, йәйҙең ни тиклем ауыр булыуына ҡарамаҫтан, аҡса эшләү сараһын табыуы тураһында һөйләп үткем килә.

Ҡустым, армиянан ҡайтҡас та, ҡайҙа эшкә урынлашайым, нисек аҡса табайым, тип, бер аҙ уйланып йөрөнө, төрлө ысулдарҙы һынап ҡараны. Ғәҙәттә, кеше ниндәйҙер ҙур эшкә тотонор алдынан оҙаҡ уйлана, икеләнә бит инде, ә ҡустым был йәһәттән тиҙ эш итте: 70 мең һум кредит алды ла, шуның 40 меңенә 400 ҡаҙ бәпкәһе һатып алды. Йәй буйы Ирәндек ҡуйынында саф һауала ҡаҙ көтөп сыҡты. Бәпкәләр көткән яланды кәртәләп алды, эргәләге йылғаны быуып, быуа эшләне. Быйыл йәй шул тиклем ауыр булды: ямғыр яумай, үлән үҫмәй, һыу кибә лә ҡуя. Шуға күрә был эш өҫтәмә сығымдар ҙа талап итте: ҡустым бәпкәләр нығынып үҫһен өсөн дарыу, витаминдар ҙа һатып алды - быныһына бөтәһе 25 мең һум аҡсаһы китте. Икенсенән, ҡаҙ бәпкәләрен төйләгәндәр ҙә тибә, тапалып та ҡалалар, төрлө хәлдәр була бит инде. Һөҙөмтәлә ҡустымдың 270 ҡаҙы иҫән-аман йәйләне.

Күптән түгел ауылыбыҙҙа ҡаҙ өмәһе уҙғарҙыҡ. Өмә өс көнгә һуҙылды. Ҡаҙҙар һимеҙ генә булды, шуға күрә һатып алыусылар табылды. 200 ҡаҙҙы шунда уҡ Себер яҡтарына һатып ебәрҙек, 20-һен ғаиләбеҙгә ҡышҡылыҡҡа ҡалдырҙыҡ, ә 50-һен ауыл кешеләре килеп һатып алды. Дөйөм алғанда, ҡустым 150 мең аҡса эшләне. 70 мең кредитын түләһә, бөтәһе 80 мең килем алған булып сыға.

Бында хатта килемдең күпме булыуы ла мөһим түгел. Иң мөһиме, ҡустымдың армиянан һуң буш ятмай, аҡса эшләргә тырышыуы. Уның шулай ҡыҙыҡһынып китеп үҙенә яңы шөғөл табыуы күптәргә өлгө булып торҙо. Ауылыбыҙҙың күп йәштәре быйыл ҡаҙ үҫтерергә йә башҡа төрлө эш менән булышырға ниәтләй. Ҡустым да быйылға эштәрен планлаштыра башланы, ҡаҙ көтәсәкмен йәки теплица асасаҡмын, ти. Бер ниндәй тәжрибәһе лә юҡ көйө лә эшен уңдырғас, быйылға ниәтләгән эшенең һөҙөмтәләре беҙҙе тағы ла нығыраҡ ҡыуандырыр, тип ышанам.

Ләйсән АБДУЛЛИНА.
Баймаҡ районы
Күсей ауылы.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Баймаҡтан килгән ошо хәбәрҙән һуң, йә, кемегеҙ, ауылда эшһеҙлек, тип ауыҙ асыр! Ауылда эшһеҙ булып ултырып буламы һуң инде?! Эйе, был фекергә ҡаршы килеүселәр, "Ауылда йәшәп ҡарағыҙ башта..." тип ҡырт киҫеүселәр барлығын да беләбеҙ. Ә шулай ҙа ошо фекерҙе ҡеүәтләгәндәр ҙә, ҡеүәтләмәгәндәр ҙә беҙгә үҙ фекерен яҙып ебәрһен әле. Әйҙәгеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, бәхәс ҡорона!

УҢЫШ ҠАҘАН

БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

Илаһҡа яҡынайыуҙың юлы

Аллаһы Тәғәлә хаҡындағы уйҙарҙан да ыңғайыраҡ фекерҙәр юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел. Ә ыңғай фекерләү өсөн бынан ары артыҡ көс түгергә кәрәкмәй. Донъя халҡының яртыһы быға өлгәшеүҙең ҡыҙыҡлы һәм һөҙөмтәле ысулын белә. Ул ошо мәлдәге уйҙарҙы еңергә мөмкинлек бирә.

Әгәр һеҙ уҡып ултырған китабығыҙҙы ситкә алып ҡуйып, оло һөйөү менән Аллаһы Тәғәлә хаҡында уйлай башлаһағыҙ, илаһи ярҙам киләсәк өлкә менән бәйләнешегеҙҙе нығытырһығыҙ. Әммә бында бер ауырлыҡ бар. Телефон шылтырауы, ишек шаҡыуҙары, бала илауы, сәй ҡайнауы, сәғәтегеҙгә ҡарап, ҡайҙалыр ашығыу бәйләнеште өҙөүе ихтимал.

Ер шары халҡының яртыһы һәр ваҡыт, көн оҙононда, Илаһтың исемен ҡабатлауҙы ғәҙәткә индерергә тырыша. Индустар "Рама, Рама, Рама", тип ҡабатлаһа, мосолмандар "Аллаһ, Аллаһ, Аллаһ", ти.

Беҙҙең буталып бөткән был донъяла ошо өлгөгә эйәреү мөмкин дә түгел. Хоҙай исемен ҡабатлау хәҙер ниндәйҙер кимәлдә әрләшеү кеүек: "Аллаһ хаҡына, туҡта!", "Хоҙайым, ҡот осҡос!", "Эй Аллам, күңелһеҙ!", "Эй, Хоҙайым, был ҡасан ғына бөтөр икән!". Рустар ҙа "Иисусе Христе, да когда же ты успокоишься?" һ.б. тип ҡабатларға ярата.

"Аллаһ" һүҙен мейе компьютерына һалып ҡуйырға мөмкин. Шулай уҡ уны эш көнө дауамында күп тапҡырҙар ҡабатлауҙы ла программалаштырырға була. Бының өсөн инструкцияны ике йәки өс тапҡыр уҡығыҙ.

"Аллаһ" һүҙен мейе компьютерығыҙға индереү ысулы:

*Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

*Өс тапҡыр уйығыҙҙа ғына: "Аллаһ һүҙе минең өсөн Илаһты аңлата", - тип ҡабатлағыҙ.

*Артабан ҡабат уйығыҙҙа ғына: "Мин көн һайын Аллаһ һүҙен күп тапҡыр ҡабатларға теләйем һәм шулай эшләйәсәкмен дә", - тиегеҙ.

*Уйығыҙҙа ғына: "Һәр ваҡыт, был исемде иҫемә төшөргән һайын, мин уның Илаһ булыуын иҫләйәсәкмен", - тип өҫтәгеҙ.

*Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙ алдығыҙға "Мин үҙ аңымда", тип әйтегеҙ.

*Әгәр был ысулды яҡшы үҙләштереүегеҙгә ышанһағыҙ, уны яҙыуға ҡарамай ғына ҡабатлағыҙ.

Ыңғай йәки кире уй даими көсөргәнеш талап итә. Аңдың программалашыуын көндәлек ғәҙәттәр раҫлай. Беҙ даими ҡабатланған берәй ҡуҙғытыусы нәмәгә йәки ваҡиғаға бер төрлө мөнәсәбәттәбеҙ. Ғәҙәттәр - психика һәм аң программалашыуының һөҙөмтәһе.

Гольф уйнаусының тубы сәкәнгә яңылыш эләкһә, ул һәр ваҡыт яңылыш һуғыу ғәҙәтен ала. Баҫып торошо һәм сәкән тотоуы уны яңылыш һуғыуға программалай. Кесе һеңлеләре кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ үҙен ҡарт ҡыҙ булып ҡалыуға программалай. Эшҡыуарлыҡҡа тотонған кеше һәр ваҡыт уңышһыҙлыҡ кисерә. Ни өсөн? Сөнки улар үҙҙәрен шулай программалаған. Был программаны икенсеһенә алыштырмай тороп, уңыш ҡаҙаныу мөмкин түгел.

Үҙеңде үҙгәртеү буйынса махсус алымдар бар. Мәҫәлән, үҙеңде уңышлы кешеләр менән бергә күҙаллау, үҙеңдең тәртибеңде, һөйләшеүеңде, уйҙарыңды уларға оҡшатырға тырышыу уңыш килтерә. Арҡаң турамы? Аҙымдарың еңеүсенекеме әллә еңелеүсенекеме? Йөҙөң ҡырыҫмы әллә асыҡмы? Арҡаңды тура тот, атлап йөрөүең еңеүселәрҙеке һымаҡ булһын, йөҙөңдән йылмайыу китмәһен. Күптән түгел психологтар кеше йылмайған ваҡытта уның эске донъяһында шуға торошло үҙгәрештәр барыуын раҫлаған. Эске тормошобоҙҙо үҙгәртеп, беҙ тирә-яғыбыҙҙағы тормошто ла үҙгәртә алабыҙ. Кешеләр йылмайғандарға нығыраҡ тартыла. Тикшереп ҡарағыҙ!

Роберт СТОУН.



3 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Новогодние фуршеты"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Контрольная закупка"
10.40 "Жить здорово!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Модный приговор"
13.20 "Один дома"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.10 "Счастье есть!"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.15 "Доктор Тырса", 1-я серия
22.00 "Код да Винчи". Мистический триллер
00.50 "Анаконда-2: охота за кровавой орхидеей"
02.40 "Продюсеры"
04.50 "Жизнь на Марсе"
05.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

РОССИЯ 1
05.15 "Ищите женщину". Иронический детектив
08.15 "Громовы"
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.35 "Тормозной путь". Драма
14.00 "Вести"
14.15 "Тормозной путь". Продолжение
15.20 "Аншлаг и Компания"
17.15 "Слово женщине". Сериал
18.05 "Ефросинья". Сериал
19.05 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши"
20.50 Чокнутая", 1-я и 2-я серии
22.35 "Добрый вечер с Максимом"
00.00 "Моральный кодекс". Юбилейный концерт группы
01.50 "До Жуан де Марко". Романтическая комедия
03.25 "Эта веселая планета"

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "МАсквичи"
09.00 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Дети белой богини". Детективный сериал
13.20 "Суперстар" представляет". "Ирина Аллегрова. Исповедь несломенной женщины"
15.00 "Следствие вели..."
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Эра стрельца", 7-я, 8-я и 9-я серии. Сериал
19.30 "Паутина". "Кодекс воровской чести". Сериал
23.25 "Водка: история всероссийского застолья"
01.25 "Шпионские игры". "Нелегал". Сериал

БСТ
07.00 "Музыка из другой комнаты"
08.45 "Машина времени"
10.30 "Тамыр" представляет..."
11.00 "Радость сильнее"
12.00 "Орнамент"
12.15 "Золотая коллекция сказок"
13.45 "Формула успеха"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 "Телевизонный конкурс красоты "Хылыукай"
15.30 "Принцесса цирка". Комедия
18.00 Новости (на башк. яз.)
18.30 "Однажды зимним вечером"
20.30 "Сэнгелдек"
21.00 "Новогодний ретро-калейдоскоп"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "Призрак оперы"
01.00 "Прогноз погоды"

4 ЯНВАРЯ ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Фальшивая этикетка"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Контрольная закупка"
10.40 "Жить здорово!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Модный приговор"
13.20 "Один дома-2"
15.30 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.10 "Счастье есть!"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.15 "Доктор Тырса", 2-я серия
22.00 "Кинг Конг". Приключения
01.30 "Мистер Бин". Комедия
03.00 "Выбор капитана Корелли". Мелодрама
05.00 "Жизнь на Марсе"

РОССИЯ 1
05.05 "Артистка из Грибова". Лирическая комедия
07.45 "Громовы"
10.30 "Девчата"
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.35 "Не отрекаются любя..." Драма
14.00 "Вести"
14.15 "Не отрекаются любя..." Продолжение
15.15 "Кривое зеркало"
17.15 "Слово женщине". Сериал
18.05 "Ефросинья". Сериал
19.05 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши"
20.50 Чокнутая", 3-я и 4-я серии
22.35 Юбилейный вечер Михаила Жванецкого
01.20 "Полет фантазии". Комедия
03.10 "Соломенная шляпка", 1-я серия. Комедия
04.20 "Городок"

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "МАсквичи"
09.00 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Дети белой богини". Детективный сериал
13.20 "Суперстар" представляет". "Людмила Сенчина. Признание шальной Золушки"
15.00 "Следствие вели..."
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Эра стрельца", 10-я, 11-я и 12-я серии. Сериал
19.30 "Паутина". Сериал
23.25 "Водка: история всероссийского похмелья"
01.05 "Шпионские игры". Сериал

БСТ
07.00 "Призрак оперы". Драма
09.30 "Необыкновенный матч"
11.15 "Тамыр" представляет..."
11.45 "Тубырса и Сыртлыкай"
12.15 "Орнамент"
12.30 "Золотая коллекция сказок"
13.45 "Формула успеха"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 "Телевизонный конкурс красоты "Хылыукай"
15.30 "Ищите женщину"
18.00 Новости (на башк. яз.)
18.30 "Мастер-шоу"
20.30 "Сэнгелдек"
20.45 "Орнамент"
21.00 "Новогодний ретро-калейдоскоп"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "Дневник памяти"
00.45 "Прогноз погоды"

5 ЯНВАРЯ СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Опасный градус"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Контрольная закупка"
10.40 "Жить здорово!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Модный приговор"
13.20 "Один дома-3"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.10 "Счастье есть!"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.15 "Доктор Тырса", 3-я серия
22.00 "Ночь в музее". Приключения
00.10 "Близость". Мелодрама
02.10 "Высший пилотаж"
03.50 "Первобытное зло"
05.20 "Жизнь на Марсе"

РОССИЯ 1
05.050 "Воспитание жестокости у женщин и собак". Мелодрама
07.45 "Громовы"
10.30 "Девчата"
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.35 "Еще один шанс". Мелодрама
14.00 "Вести"
14.15 "Еще один шанс". Продолжение
15.20 "Смеяться разрешается"
17.15 "Слово женщине". Сериал
18.05 "Ефросинья". Сериал
19.05 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши"
20.50 Чокнутая", 5-я и 6-я серии
22.35 Юбилейный вечер Юрия Антонова
01.20 "Плачу вперед!" Комедия
03.10 "Соломенная шляпка", 2-я серия. Комедия
04.15 "Горячая десятка"

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "МАсквичи"
09.05 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Дети белой богини". Детективный сериал
13.20 "Суперстар" представляет". "Крутые 90-е. Счастливые песни смутного времени"
15.00 "Следствие вели..."
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Эра стрельца". Сериал
19.30 "Паутина". Сериал
23.25 "Цены. История всероссийского обмана"
01.40 "Шпионские игры". Сериал

БСТ
07.00 "Дневник памяти"
09.15 "Декамерон"
11.00 "Тамыр" представляет..."
11.30 "Карйондоз"
12.15 "Орнамент"
12.30 "Золотая коллекция сказок"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 "Телевизонный конкурс красоты "Хылыукай"
15.30 "Человек с Бульвара Капуцинов". Мелодрама
17.15 "Новогодний "Спортивный интерес"
17.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция
20.30 "Сэнгелдек"
20.45 "Орнамент"
21.00 "Новогодний ретро-калейдоскоп"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "Чикаго"
00.30 "Прогноз погоды"

6 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ядовитая посуда"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Контрольная закупка"
10.40 "Жить здорово!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Самый народный артист Николай Крючков"
13.20 "Гусарская баллада"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Миссия"
18.00 Вечерние новости
18.10 "Счастье есть!"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Рождество"
21.00 "Время"
21.15 "Царь". Историческая драма
23.10 "Моя мама - невеста"
00.20 "Соловки. Место силы"
01.10 "Рождество Христово"
03.10 "Не торопи любовь"
05.00 "Ангелы-хранители"

РОССИЯ 1
05.10 "Берегите женщин"
07.45 "Громовы"
10.30 "Девчата"
11.00 "Вести"
11.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.35 "Стряпуха". Комедия
14.00 "Вести"
14.15 "Стряпуха". Продолжение
14.50 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт
17.15 "Слово женщине". Сериал
18.05 "Ефросинья". Сериал
19.05 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши"
20.50 Чокнутая", 7-я и 8-я серии
22.55, 03.10 "Деревенский романс"
01.10 "Рождество Христово". Прямая трансляция торжественного Рождественского богослужения

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "МАсквичи"
09.05 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Дети белой богини". Детективный сериал
13.20 "Суперстар" представляет". "Люба, Любонька, Любовь. Концерт-исповедь Л. Успенской"
15.00 "Следствие вели..."
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Эра стрельца". Сериал
19.30 "Паутина". Сериал
23.25 "Красота. История всероссийского обмана"
01.15 "Шпионские игры". Сериал

БСТ
07.00 "Чикаго"
09.00 "Юлдаш йыры"
11.00 "Тамыр" представляет..."
11.30 "Сила матери"
12.15 "Орнамент"
12.30 "Золотая коллекция сказок"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 "Телевизонный конкурс красоты "Хылыукай"
15.30 "Обыкновенное чудо". Сказка
18.00 Новости (на башк. яз.)
18.30 "Мы вместе". Радио "Юлдаш" - 10 лет
20.15 "Истории"
20.30 "Сэнгелдек"
20.45 "Орнамент"
21.00 "Новогодний ретро-калейдоскоп"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "Кин-дза-дза"
01.00 "Прогноз погоды"

7 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Чем нас кормят на улице"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Бедная Саша". Комедия
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Поверь в мечту". Благотворительный концерт
13.50 "Морозко". Фильм для детей
15.20 "Тариф новогодний". Лирическая комедия
16.50 "Зимний роман". Мелодрама
18.30 "Поп". Историческая драма
21.00 "Время"
21.15 "Белая птица". Концерт Елены Ваенги
23.20 "Снежный ангел". Мелодрама
01.20 "Большой"
03.15 "Гамбит"
05.00 "Жизнь на Марсе"

РОССИЯ 1
04.10 "Батюшка"
11.00 "Вести"
11.15 Рождественское интеревью Святейшего Патриарха Кирилла
11.35 "Рождественская "Песенка года"
13.15 "Кадриль". Комедия
14.00 "Вести"
14.15 "Кадриль". Продолжение
15.20 "Аншлаг и Компания"
17.15 "Слово женщине". Сериал
18.05 "Ефросинья". Сериал
19.05 "Институт благородных девиц". Сериал
20.00 "Вести"
20.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши"
20.50 Чокнутая", 9-я, 10-я и 11-я серии
00.20 "Чудо". Драма
02.25 "Безымянная звезда"

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "МАсквичи"
09.05 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "И снова здравствуйте!"
11.00 "Президент и его внучка". Комедия
13.20 "Врач", 1-я, 2-я и 3-я серии. Сериал
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Врач", 4-я, 5-я и 6-я серии
19.25 "Мой грех". Мелодрама
21.25 "Можно, я буду звать тебя мамой?" Мелодрама
23.10 "Унесенные ветром". Мелодрама
03.20 "Вовочка"

БСТ
07.00 Рождественское послание Архиепископа Уфимского и Стерлитамакского Никона
07.10 "Серебристый колокольчик Рождества"
07.30 "Кин-дза-дза"
09.45 "Белые мгновения"
10.45 "Истории"
11.00 "Тамыр" представляет..."
11.30 "Страна розового рассвета"
12.15, 20.45 "Орнамент"
12.30 "Золотая коллекция сказок"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 "Алеко". С. Рахманинов. Спектакль XIII Оперного фестиваля "Шаляпинские вечера в Уфе"
16.15 "С Рождеством Христовым!"
17.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Югра" (Ханты-Мансийск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция
19.30 "Рождественские встречи"
20.30 "Сэнгелдек"
20.45 "Орнамент"
21.00 "Новогодний ретро-калейдоскоп"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "32 декабря"
00.30 "Прогноз погоды"

8 ЯНВАРЯ СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Пельмень с сюрпризом"
07.00 "Доброе утро"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Контрольная закупка"
10.50 "Жить здорово!"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.10 "Модный приговор"
13.20 "Один дома-4"
15.00 "Новый "Ералаш"
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.10 "Поле чудес". Праздничный выпуск
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.15 "Доктор Тырса", 4-я серия
22.00 "Розовая пантера-2". Иронический детектив
23.40 "Поможем тигру!" Благотворительный концерт
00.30 "Снежные псы"
02.20 "Поймет лишь одинокий"
04.15 "Жизнь на Марсе"

РОССИЯ 1
04.50 "О бедном гусаре замолвите слово"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Диалоги о животных"
08.55 "Субботник"
09.35 "Городок"
10.05 "Комната смеха"
11.20 "Рождественская "Песенка года"
13.00 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал
16.20 "Субботний вечер"
18.15 "Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.20 "Я буду жить!" Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.20 "Я буду жить!" Продолжение
23.35 "Одинокий ангел". Мелодрама
01.35 "Есть о чем поговорить". Мелодрама
03.50 "Ехали в трамвае Ильф и Петров". Комедия

НТВ
05.10 "Взять Тарантину"
06.00 "Лучший город Земли"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 Мультфильмы
09.00 "Спето в СССР"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.20 "Врач", 7-я, 8-я и 9-я серии. Сериал
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.20 "Врач", 10-я, 11-я и 12-я серии
19.25 "Богини правосудия". Сериал
23.30 "Лекарства. История всероссийского обмана"
01.35 "Шпионские игры". Сериал

БСТ
07.00 Мультфильм
08.00 "Дарю песню"
10.00 "Тамыр" представляет..."
11.00 "Камыр батыр"
11.45 "Следопыт"
12.00 "Тэмле"
12.30 "Кахым Туре". И. Дильмухаметов. Спектакль Стерлитамакского Башкирского государственного драматического театра
14.00 "Телевизонный конкурс красоты "Хылыукай"
14.30 "Золотая коллекция сказок"
16.45 "Шаляпинские вечера в Уфе". Гала-концерт XIII Международного фестиваля. I отделение
18.00 Новости (на башк. яз.)
18.30 КВН РБ. Финал
20.15 "Сэнгелдек"
20.30 "Байтус". Новогодний маскарад
21.15 "Полезные новости"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Созвездие". "Парад планет"
22.35 "Убить дракона"
00.45 "Прогноз погоды"

9 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.10, 06.10 "Фантазия"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Смак"
10.50 "Анатолий Ромашин. Три молнии в сердце"
12.10 "Пуховик из курицы"
13.10 "Ледниковый период"
14.40 "Ширли-мырли"
17.20 "Хиты и звезды"
19.00 "Ночь в музее-2". Приключения
21.00 "Время"
21.15 "Доктор Тырса", 5-я серия
22.00 "Yesterday Live. Новогодний выпуск"
23.00 "Пляж". Триллер
01.15" Жизнь, как мечта"
03.25 "Жестокий захват"
05.00 "Жизнь на Марсе"

РОССИЯ 1
05.25 "Версия полковника Зорина"
07.15 "Деревенские крокодилы". Семейная комедия
09.05 "Деревенские крокодилы-2". Семейная комедия
11.00 "Вести"
11.10 "Евровидение-2010"
12.55 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.05 "От тюрьмы и от сумы". Мелодрама
18.00 "Измайловский парк"
20.00 "Вести"
20.20 "Школа для толстушек". Мелодрама
00.20 "Два веселых гуся"
00.50 "Забирая жизни". Триллер
02.55 "Шекспиру и не снилось..." Музыкальная комедия
05.05 "Городок"

НТВ
05.10 "Взять Тарантину". Сериал
06.00 "Лучший город Земли"
08.00, 10.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Зиа в Простоквашино". Мультфильм
09.00 "Спето в СССР"
10.20 "Заходи - не бойся, выходи - не плачь..." Комедия
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Чистосердечное признание"
16.00 "Сегодня"
16.25 "Чистосердечное признание"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Чистосердечное признание"
23.30 "ЖКХ-потрошитель. История всероссийского обмана"
01.35 "Шпионские игры". Сериал

БСТ
07.00 Мультфильм
08.00 "Дарю песню"
10.00 "Тамыр" представляет..."
11.00 "Волшебный хвостик"
11.45 "Следопыт"
12.00 "Тэмле"
12.30 "Созвездие талантов"
14.00 "Телевизионный конкурс красоты "Хылыукай"
14.30 "Золотая коллекция сказок"
16.00 "Истории"
16.15 "Дорога к храму"
16.45 "Шаляпинские вечера в Уфе". Гала-концерт XIII Международного фестиваля. II отделение
18.00 Новости (на башк. яз.)
18.30 "Принцесса специй". Драма
20.00 Государственный ансамбль песни и танца Республики Татарстан
21.00 "Урал Лото 6 из 40"
21.30 "Новости недели"
22.15 "Продавщица"
00.15 "Муз-базар"
02.00 Прогноз погоды

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

БАШҠОРТОСТАНДА ЛА БУЛМАҒАС,

тағы ҡайҙа башҡорт телен өйрәнергә?!

Башҡортостан Республикаһы Президенты булып эш башлағандан алып Рөстәм Хәмитов ауыҙынан күңелгә һары май булып яғылырҙай матур һүҙҙәр бихисап яңғыраны. Йылды барлап, Яңы йылға аяҡ баҫҡанда, уларҙы тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп үтеү һис тә яҙыҡ булмаҫ, моғайын. Киреһенсә, ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, хәтеребеҙгә нығыраҡ һеңеп, уларҙың үтәлешен күҙәтеү уңайлыраҡ булыр.

■ Хөкүмәт яртылаш яңырҙы. Яңы исемдәр барлыҡҡа килде, 35-40 йәшлектәр күп. Министрҙар араһында мәскәүҙәр һәм ситтәр юҡ. Барыһы ла үҙебеҙҙеке. Махсус рәүештә үҙебеҙҙең белгестәргә йүнәлеш тоттом. Урындағы кешеләргә таянырға кәрәк икәненә инанам. Башҡортостан кеүек республикала бигерәк тә. Мәскәүҙәрҙең күбеһе минең менән килергә теләне. Мин уларға, заманса, белемле менеджерҙарға, республика Хөкүмәтендә эш биреүҙән баш тарттым, сөнки улар урындағы үҙенсәлекте белмәй. Ни тиһәң дә, "восток - дело тонкое". Өҫтәүенә, бындай эш үҙебеҙҙекеләргә кәрәк. Мин - ҡомһоҙ, яҡшы эш урындарын ситкә ебәргем килмәне. Беҙ үҙебеҙҙең урындағы команда менән эшләйәсәкбеҙ. Беҙҙең министрҙар - профи һәм белгестәр, белемлеләр һәм тәжрибәлеләр. Мин ялыуҙарҙы һәм илауҙарҙы тыңламаясаҡмын. Бюджет аҡсаһын иркен тотонорға теләүҙең бәләкәй генә осрағын да ғәфү итмәйәсәкмен.

■ Август кәңәшмәһенән тәьҫораттар төрлө. Миңә күрһәткән мәктәптәр, балалар баҡсалары, әлбиттә, яҡшы. Һүҙ ҙә юҡ, матур итеп ремонтланғандар, ҡорамалдар бар. Ә бына ултырыш үҙе ғәҙәти булды: министрҙың доклады, әйтергә кәрәк, насар түгел, отчет формаһындағы доклад ҡушымталары һәм минең йомғаҡлауым. Киләһе йылдан конференцияның формаһын үҙгәртеүҙе һораным: докладтар ғына түгел, секциялар, түңәрәк өҫтәлдәр, фекер алышыуҙар, мастер-кластар, ҙур ғалим-педагогтарҙың сығыштары кәрәк. Уҡытыусыларҙы, йәмәғәт хәрәкәттәре, хөкүмәттеке булмаған ойошмаларҙың вәкилдәрен ишетке килә. Бер һүҙ менән әйткәндә, долой тантаналы йыйылыштар, даешь профессионалдарҙың һәм ҡыҙыҡһыныусы кешеләрҙең аралашыуын!

■ Урал аръяғы - ҡеүәте бай төбәк - ялан көтөүлектәре, урмандар, ер аҫты байлыҡтары, иген һәм малсылыҡ, сағыу ҡояш! Ә, йомшартып әйткәндә, бай йәшәмәй. Эйе, был ауыл хужалығы өсөн ҡырыҫ зона, сөнки биш йыллыҡтың өсөһө ҡоро килә, әммә бында ла үҫеш һәм хәрәкәт булһын ине. Хәрәкәт бар, тик йылына 2-3 процент ҡына иҫәпләнә. Эш хаҡы юғары түгел, халыҡ эш юҡлығына зарлана. Күптәр Себергә вахтаға йөрөп эшләй. Башҡорт халҡының традицион ҡаҙы һәм ҡаҙылығын күпләп етештереүҙе юғалттыҡ. Инвесторҙар, нигеҙҙә, Магнитканан да Ырымбурҙан. Үҙебеҙҙекеләр аҙ. Эсәр һыу һәм электричество проблемаһы бар. Ҡайһы бер ҙур ауылдарҙың яңы ҡасабалары цивилизациянан артта ҡалған - электр энергияһы, газ, һыу юҡ. Балалар баҡсалары етешмәй һ.б. Әлбиттә, тормош дауам итә, әммә үҫеш темпы кәрәгенсә түгел.

■ Экологик хәлдәр. Торатау, Ирәмәл. Беҙҙең билдәле тауҙарыбыҙ. "Сода" буйынса сеймал мәсьәләһе ябай ғына хәл ителмәй. Әммә Торатауҙы эшкәртеү ҙә ауырлыҡтан сығыу юлы түгел. Альтернатив вариантты эҙләргә кәрәк. Әлегә мине Торатауҙы эзбиз алыуҙың берҙән-бер юлы тип ышандырырға тырышалар. Мин, исмаһам, иҫәп-хисаптарын да күрмәгәс, риза түгел. Тик хистойғолар ғына. Миңә вариантты сағыштырып ҡарарға кәрәк. Шулай итеп, үҙ фекеремдә ҡалам - Торатауға теймәгеҙ! Ирәмәлде һаҡлау буйынса ҡарар ҡабул ителде. Милли парк төҙөйәсәкбеҙ. 2011 йыл бюджетына аҡса һалабыҙ. Парк буласаҡ. Ул ваҡытта туристарҙың ағымын да тәртипкә һалырбыҙ. Ә тауҙа джиптарҙа йөрөү - эш түгел. Силәбелөр ҙә, өфөлөләр менән уҡалылар ҙа белһен: унда башҡаса уҙыштар булмаясаҡ.

■ Бөгөн донъяла ике миллионға яҡын башҡорт йәшәй, шуның өсөн башҡорт телен өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк. Йәмғиәттә барған глобалләшеү шарттарында ул үҙенән күп тапҡырҙар киңерәк таралған рус, инглиз, татар телдәре яғынан көслө баҫым аҫтында ҡалып килә. Ләкин һәр бер тел, шул иҫәптән башҡорт теле лә, уникаль. Был донъя мәҙәниәте күренеше, һәм ул яҡлаулы булырға тейеш. Башҡорт телен тергеҙеүгә булышлыҡ итергә кәрәк...

■ Башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле иҫәпләнә. Дәүләт телдәре тураһындағы закон 2005-2006 йылдарҙа ҡабул ителгән. Шуға ярашлы, республика мәктәптәрендә башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле булараҡ та өйрәнелә. Дәүләт телдәрен өйрәнеү бөгөн мотлаҡ иҫәпләнә. Башҡортостан Республикаһы территорияһында башҡорт теле һәр ваҡыт өйрәнеләсәк. Иң тәүҙә башҡорттар һәм ошо телде өйрәнергә теләүселәр тарафынан. Шул уҡ ваҡытта мин аңлайым: башҡорт телен мәжбүри уҡытыу булырға тейеш түгел. Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ, тиҙәр. Башҡортостанда ла булмағас, тағы ҡайҙа башҡорт телен өйрәнергә һуң? Планетала башҡорттар йәшәгән, Башҡортостан Республикаһы булған ер башҡаса юҡ.

■ Өфөгә - 1500 йыл. Дискуссия ҡыҙыу бара. Әлегә ҡыҙырға ярамай. Эш шунда, дөрөҫлөктө тарих һәм археология мәсьәләләре буйынса компетентлы кешеләр генә билдәләй ала. Мотлаҡ ғилми фекер алышыу, шул иҫәптән иң ҙур Рәсәй һәм сит ил ғалимдарын да саҡырып, буласаҡ. Йәмәғәтселек тә фекер алыуҙа ҡатнашасаҡ. Дәлилдәрегеҙҙе туплай торорғоҙ. Әммә эмоциялар кәрәкмәй. Шәхсән миндә академик Мәжитовтың эше ҙур ихтирам тыуҙыра. Уның, коллегаларының эшмәкәрлеге бик күп билдәһеҙ факттарҙы асты. Был ысын фән! Бынан тыш, ҡаланың уртаһында, ҡиммәтле ерҙәрҙә археологик ҡаҙыныуҙарҙы яҡлап алып ҡалыу өсөн характер ҙа, ихтыяр ҙа, һөҙөмтәләргә ышаныс та булырға тейеш. Ҙур ғилми асыштар шулай ғына тыуа ла инде.

■ Хакимиәт башлығына Салауат районында Салауат Юлаевҡа бәйле урындар буйлап яңы туристик маршрут әҙерләргә ҡуштым. Бөгөн яҡшы музей ғына бар, ә ҡалғанын - эшләргә кәрәк: йәйәүле һәм атлы маршруттар, туҡталҡалар, Салауат үҫкән ландшафттарҙы күҙәтеү мөмкинлеге. Ғөмүмән, бик ҡыҙыҡлы тарихи - крайҙы өйрәнеү маршруты эшләргә мөмкин. Тимәк, эшләйбеҙ!

■ Тарихты тик аҡ йәки ҡара төҫтәрҙә генә күрһәтергә тырышыуҙарын аңламайым. Тормош күпкә ҡатмарлыраҡ. Салауат ябай кеше, әммә яугир, ҡыйыу һәм сая булған. Һуғыш барған. Ҡаты һәм ҡан ҡойғос. Беҙ барлыҡ деталдәрҙе лә белмәйбеҙ. Һәм белмәйәсәкбеҙ ҙә. Әммә шуныһы асыҡ: Салауат үҙ ере өсөн көрәшкән. Шуның менән халыҡтың ышанысын яулаған да инде. Халыҡ уға ышанған! Һәм ул халыҡ батыры, ә пропаганда менән тыуҙырылмаған. Әгәр кешене 230 йыл буйы иҫләйҙәр, әгәр ул башҡорт халҡының ғәҙеллек символына әүерелгән икән - был уның ЫСЫН булғанын аңлата. Ул урлашмаған, милек талап йөрөмәгән, байымаған, таламаған һәм алтын һатып алмаған. Бер кем дә Салауаттың байлығы хаҡында һөйләмәй бит. Улар булмаған да, юҡ та. Ул ерен, башҡорттарҙың үҙ традицион тормошона хоҡуғын яҡлаған. Шуның менән халыҡ хәтеренә ингән дә.

■ Мин - эсмәүсе кеше. Йәшлектә байрамдар булғыланы, уныһы ла ял көндәрендә. Хәҙер - юҡ. Ҡыҙыҡ түгел. Бөтөнләй. Хатта бер бокал шарап та ҡыҙыҡ түгел. Һәм мине урап алған кешеләр был хаҡта белә. Аҡ йортта, мин килгәс, барлыҡ рәсми табындар бөттө. Бәлки, йәшереп кенә эсәләрҙер, мин был хаҡта белмәйем. Әгәр белһәм - яуап бирәсәктәр, сөнки эскеселәргә ышанмайым. Ғаиләмдә береһе лә эсмәй. Бөтөнләй. Хатта йәштәргә лә ҡыҙыҡ түгел. Туғандарым араһында, ике туғандар араһында эсеүселәр ҙә булды. Хәмерҙән үлделәр. Уның ниндәй бәлә икәнен беләм. Ҡот осҡос бәлә! Беҙҙең Хөкүмәттә эскән кеше юҡ. Был минең һайлап алыу критерийҙарымдың береһе. Тәмәке тартыусылар ҙа юҡ. Эшһөйәрҙәр, һөҙөмтә өсөн эшләүселәр бар. Ундай кешеләр миңә кәрәк.

■ Закон 2015 йылға тиклем республика башлыҡтарының вазифаһы атамаһын үҙгәртмәҫкә рөхсәт бирә. Ваҡыт бар әле. Беҙ күршеләребеҙ менән кәңәшләшеп, был мәсьәләлә улар менән бер төптән эшләйәсәкбеҙ.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Башҡорт халҡында "Ир һүҙе бер булыр", тигән мәкәл бар. Әгәр ҙә Президент тиклем Президент әйтә икән, уның һүҙҙәре артында икеләтә, өсләтә яуаплылыҡ ятыуы бер кемгә лә сер түгел. Шуға ла Яңы йылға республика башлығы әйткән һүҙҙәрҙең ихласлығына, халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреүҙә алға китеш булырына, сәйәси һәм иктисади һиллеккә өлгәшеребеҙгә ышанып аяҡ баҫабыҙ. Хәйерле булһын йылыбыҙ!

Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ЯРЫШ СӘМЕ БУЛҒАНДАР

"Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берләшмәһе" конкурсы еңеүселәре билдәләнде. БР Муниципаль берләшмәләр союзы һәм Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендәге урындағы үҙидара буйынса совет ойоштороған был конкурс быйыл өсөнсө тапҡыр уҙҙы һәм унда 150 кеше ҡатнашты.

Быйыл конкурста 17 номинация буйынса еңеүселәр билдәләнде. Йылдың иң яҡшы муниципаль хеҙмәткәрҙәре тип ауыл советы биләмәләре араһында - Дүртөйлө ауыл советынан Роза Мельникова, ҡала советы биләмәләре араһында - Мәләүез ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Игорь Туманин, ҡала округтары араһында - Өфө ҡалаһының Ленин районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Мирхәт Ҡаҙарғолов һәм Ҡариҙел районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Ғарифуллин билдәләнде. Иң яҡшы ҡала биләмәһе башлығы исеменә Бөрө ҡалаһы башлығы Евгений Виноградов, иң яҡшы ауыл биләмәһе башлығы исеменә Ҡариҙел ауыл советы башлығы Рәмил Вәлинуров лайыҡ булды. Ҡала һәм район хакимиәттәре сайттары номинацияһында беренсе урынға Октябрьский ҡалаһы һәм Мәләүез районы сыҡты. Урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлеген яҡтыртыусы иң яҡшы журналист Лидия Громова "Стәрлетамаҡ эшсеһе" гәзитендә эшләй.

КОТТЕДЖДАРҒА ҺОРАУ ҘУР

Өфөлә ҡала ситендәге йорттарға ихтыяж тотороҡло булып ҡала килә. Бөгөн күп кенә коттедж ҡасабалары элекке ауыл хужалығы биләмәләрендә, йәғни баҫыуҙарҙа төҙөлә. Был ауыл хужалығы өсөн тәғәйенләнгән ерҙәрҙе шәхси төҙөлөшкә күсереүе еңел булыуы менән бәйле.

Популярлығы буйынса Өфөнөң көньяҡ йүнәлеше менән башҡа бер ниндәй ҙә территория ярыша алмай. Шулай ҙа хаҡтар ихтыяж үҫәген көньяҡтан көнбайышҡа күсерә (Әлкә һәм Йоматау). Шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш тарафҡа ла ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта бара. Әммә ҙур булмаған участкаларҙа төҙөлгән ҙур йорттарға ихтыяж кәмей, йәғни һатып алыусы 250-300 квадрат метрлы түгел, ә уртаса 200 квадрат метр булған йорттарға өҫтөнлөк бирә. Һатып алыусыларҙы 12 сутый түгел, ә 20-30 сутый ер участкалары ҡыҙыҡһындыра икән. 2009-2010 йылдарға ҡала ситендәге коттедж тибындағы объекттарҙың хаҡы 13 процентҡа арзанайған һәм яҡынса 3,5 миллион һум тәшкил иткән. Йорттар һәм таун-хаустар үҙгәрешһеҙ ҡалған, йәғни уларҙың уртаса хаҡы 1 млн 400 мең һәм 3 миллион һум булған.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

3 ғинуар "Алтын асҡыс", музыкаль мажара. Башлана 12.00, 15.00.

4, 5 ғинуар "Алтын асҡыс", музыкаль мажара. Башлана 12.00.

4 ғинуар "Минең ғаиләм" (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама.

5 ғинуар "Хыялый" (С. Әбүзәр), лирик комедия.

6, 7, 8 ғинуар "Алтын асҡыс", музыкаль мажара. Башлана 11.00, 14.00.

6 ғинуар "Гипнотизер" (В. Сигарев), комедия.

7 ғинуар "Ҡоҙаса" (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия.

8 ғинуар "Мөхәббәт ҡарағы" (Ф. Бүләков), музыкаль комедия.

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

2-8 ғинуар "Фәрештәләр үҙәнендә Яңы йыл", әкиәт. Башлана 12.00, 15.00.

М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

3-9 ғинуар "Ҡыш батшалығы мажаралары", Яңы йыл тамашаһы.

8 ғинуар "Диләфрүзгә дүрт кейәү" (Т. Миңнуллин), комедия. Башлана 18.00.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

ӨЛӘСӘЙ УЛЫ ИСКӘНДӘР...

Спиваков менән бер сәхнәлә сығыш яһаны

Рәсәйҙең иң титуллы коллективы - Владимир Спиваков етәкселегендәге "Мәскәү виртуоздары" дәүләт камера оркестры яңыраҡ Өфөлә сығыш яһаны. Унда Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдразаҡов, Елена Абдразаҡова һәм һәләтле йәш музыкант, Петр Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендәге үҙәк музыка мәктәбенең 8-се синыф уҡыусыһы Искәндәр Ханнанов ҡатнашты. Өфөгә ял итергә ҡайтҡан мәленән файҙаланып, бар донъяға Башҡортостандың данын таратып йөрөүсе шәп егетебеҙ Искәндәрҙе редакциябыҙға саҡырып, һөйләшеп алдыҡ. Артабан һүҙ - йәш музыкантҡа:

- Сыңғыҙ ағайыма эйәреп, мин дүрт йәшемдән скрипкала уйнарға өйрәнә башлағайным. Тик был инструмент күңелемә ныҡлап оҡшап етмәне һәм мин виолончель класына күстем. Әлбиттә, беҙҙе музыка мәктәбенә йөрөткән өләсәйемә был музыка ҡоралын күтәреп йөрөтөүе еңелдән булмағандыр. Үҙебеҙ йөрөтөр инек - бәләкәйбеҙ, етмәһә, урамда мөмкинлек килеп тыуыу менән көрткә аунап, рәхәтләнеп уйнап ала торған ғәҙәтебеҙ була торғайны.

Виолончель менән бер йыл шөғөлләнгәндән һуң, беренсе тапҡыр зур конкурста ҡатнаштым. Мәскәүҙә үткән "Уҡытыусы һәм уҡыусы" конкурсында мин дә, Сыңғыҙ ағайым да беренсе урын алдыҡ. Шунда беренсе тапҡыр беҙҙе Рәсәй музыка донъяһында ағалы-ҡустылы Ханнановтар тип танылар һәм әле лә шулай тип атап йөрөтәләр. Ағайым әле мин уҡып йөрөгән музыка мәктәбен тамамлағандан һуң, грант буйынса ике йыл Америкала белемен камиллаштырҙы. Әлеге көндә ул Швейцарияла камера оркестрында уйнай.

Мин үҙем шул тиклем мөғжизәгә ышанам. Бәлки, шуғалыр ҙа, тормошомдо ҡапыл ғына үҙгәртә торған ваҡиғалар ҙа йыш булып тора минең менән. Шулай Мәскәүгә уҡырға китеүем дә осраҡлы булды. Өфөлә уҡып йөрөгәндә ҡыллы инструментта уйнаусылар араһында 3. Исмәғилев исемендәге призға конкурс үтте. Шунда жюри ағзаһы, виолончелист, педагог Игорь Иванович Гаврыш мине Мәскәүгә уҡырға саҡырҙы. Имтихандар бирмәй генә, уҡыу йылының уртаһында Мәскәүгә киттем. Ысынлап та, был уҡыу йортона уҡырға инеүе бик ауыр, әлегә тиклем минән һуң тағы ла өс кешегә генә шулай бәхет йылмайҙы. Виолончель менән бер рәттән, дирижерлыҡ менән дә шөғөлләнәм.

2009 йылда "Культура" каналы үткәргән йәш музыканттарҙың "Щелкунчик" халыҡ-ара телевизион конкурсында еңеүем дә хыялдарҙы тормошҡа ашырыу өсөн йәйғорло бер күпер булды. Унда мин 2009 йылдың йәш музыканты тигән махсус призға лайыҡ булдым. Шулай уҡ төрлө фондтар әҙерләгән махсус призҙарҙың барыһы ла тиерлек миңә эләкте. Ә иң мөһиме - Ростропович тың иң яратҡан уҡыусыһы, билдәле виолончелист Иван Манигетти мине үҙенә - Швейцарияға оҡталыҡ дәрестәре алырға саҡырҙы.

Был еңеү миңә ҡанаттар ҡуйҙы һәм мин үҙемдең яҙмамды Владимир Спиваковтың фондына ебәрергә йөрьәт иттем. Был фонд "Мәскәү дуҫтарын йыя" тигән фестиваль үткәрә һәм үҙенә оҡшаған йәш музыканттарҙы Спиваков фестивалдең асыу тантанаһына үҙе менән бергә уйнарға саҡыра. Шулай итеп, мин беренсе тапҡыр бөйөк скрипкасы һәм дирижер менән Мәскәү халыҡ-ара музыка йортоноң ҙур (Светлановский) залында сығыш яһаным. Бынан һуң ул мине Израилгә гастролдәргә алып барҙы. Израиль филармонияһының 5 мең кешегә иҫәпләнгән залында классик музыка һөйөүселәр шығырым тулы ине. Мин әлегә тиклем бындай ихлас һәм музыканы тәрән төшөнгән тамашасыны бер илдә лә осратҡаным юҡ. Һуңынан Владимир Теодорович Израиль буйлап сәйәхәт бүләк итте.

Өфөлә Спиваков һәм "Мәскәү виртуоздары" оркестры менән өсөнсө тапҡыр уйнаным. Спиваков фонды миңә Франциянан махсус ҡайтарылған виолончель бүләк итте. Италияла, Португалияла, Испанияла, Швейцарияла булғаным булһа ла, унда мине Башҡортостандан тип иғлан итһәләр ҙә, был тиклем тулҡынланғаным юҡ ине. Өфөлә уйнаған саҡта иңемдә шундай оло яуаплылыҡ тойҙом. Һәр уңышым өсөн үҙемдән бигерәк, өләсәйем, олатайым, әсәйем, атайым ҡыуана. Уларҙы шатландыра алғаным өсөн миңә шул тиклем рәхәт.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Бөгөн ниндәй генә танылған музыканттар менән аралашырға, иң виртуоз педагогтарҙан музыка ҡоралында уйнау серҙәренә төшөнөү бәхете эләкмәһен, Искәндәр өләсәһен - Альбина апай Исхаҡованы иң бөйөк уҡытыусыһы тип һанай. Шундай яҡшы өләсәйҙең ейәне лә яҡшы булырға тейеш икәнен дә белә, былтыр өләсәһен Парижға сәйәхәткә лә алып барып ҡайтҡан. Донъя әҙәбиәтендәге Арина Родионовна образы кеүек, музыка әҫәрҙәрендә лә башҡорт өләсәйе образы барлыҡҡа килмәҫ тимә инде шунан! Ни тиһәң дә, Владимир Спиваков, Мстислав Ростропович фондтары стипендиаты, төрлө конкурстар лауреаты, ун дүрт йәшлек кенә Искәндәр Ханнановтың йондоҙло сәғәттәре алда әле. Ағалы-ҡустылы Ханнановтар тураһында донъя сәнғәте тағы ла әллә күпме ишетер әле, иншалла!

Ләйсән НАФИҠОВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

БОРОНҒОҢ МЕНӘН ҒОРУРЛАН...

ә бөгөнгөгә эйәр

Баланың ниһең маҡтайһың -
Атаның телен алмаған;
Ҡыҙҙың ниһең маҡтайһың -
Ғәйбәт һүҙҙән ҡалмаған.

Аҡмулла.

Ябаға тайҙы хурлама: яҙға сыҡһа, ат булыр,
Йәш егетте хурлама: уҡыһа, илгә баш булыр.

Башҡорт халыҡ мәҡәле.

Ил байлығы ситкә аға йылға булып,
Беҙ торабыҙ яр башында ҡолға булып.

Рәшит Шәкүр.

Киләсәккә ҡаршы бар - ул һиңә тиҙерәк килеп етер.

Б. Крутиер.

Киләсәк беҙҙе борсой, үткәндәр беҙҙе ебәрмәй тота, шуға ла беҙ бөгөнгөнө ҡулдан ысҡындырабыҙ.

Г. Флобер.

Боронғоң менән ғорурлан, ә бөгөнгөгә эйәр.

Тацит.

Гел ҡурҡып йәшәгәнде ирекле тип әйтеп буламы?

Гораций.

Көндөң өстән бер өлөшөн үҙе өсөн йәшәмәгән кеше, әлбиттә, ҡол тип атала.

Ф. Ницше.

Тиң хоҡуҡлылыҡ... бары тик зыяратта ғына.

Г. Левис.

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ер яралғандан алып уның менән тәбиғәт ҡанундары идара итә. Ә уның нигеҙен тәшкил иткән ҡағиҙәләр ошо:

-Үҙең теләгәндәргә өлгәшкәндән һуң, башҡаларға ла улар теләгәнгә өлгәшергә ярҙам ит.

-Эске бөтөнлөгөңдө һаҡла.

-Әлеге мәл менән йәшә.

-Үҙең белгән иң изге кешеләрҙән дә изгеләкләрәк булырға ынтыл.

-Үҙ намыҫың алдында саф бул.

-Һәләтеңдән килгәнде тағы ла яҡшыраҡ итеп башҡар, һәр нәмәлә камиллыҡҡа өлгәш.

-Хыял иткәнең бик ҡыйыу булһын.

Беҙҙең күбебеҙгә был ҡағиҙәләр таныш. Әммә беҙ уларҙы үтәмәйбеҙ..."

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририят:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

Баш мөхәррир	253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары	246-03-24
Бухгалтерия	246-03-23
Хәбәрселәр	252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 5260